✓ *Бер аҡыл эйәһенән: "Нимә оҙаҡҡа сыҙамлы - йомшаҡмы, әллә ҡатымы?" - тип һорағандар. "Йомшаҡ, - тип яуап биргән аҡыл эйәһе һәм һүҙҙәрен раҫлап, ауыҙынан телен сығарып күрһәткән, - бына, тештәрем күптән ҡойолоп бөттө, ә телем һаман һәленеп тора".*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы иректә

6-12 ҒИНУАР (ҺЫУЫҒАЙ) 2007 ЙЫЛ

№1 (211)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Дөрөҫ уйларға өйрән -** үҙ-үҙеңде үҙгәртеүҙең тәүге баҫҡысы ошо



2

**Бишектәге балаң...** биш доллар һораһа



5

**Тәрбиә алымыбыҙ** китаптан уҡылған түгел



8-9

**Бер мискә дегет**



10

**ТВ ПРОГРАММАҺЫ** 14-15


# ЯҢЫ ЙЫЛ ҠОТЛО БУЛҺЫН!



## ҺӨЙӨНСӨ!

Яңы йылда таңдан Ер шарының
Сонҡаһына баҫҡан көйөнсә,
Ҡыҫҡыраһым килә бар тарафҡа:
Һөйөнсө! Һө-йөн-сө! Һө-йөн-сө!
Һөйөнсөмә сөм күк сыңлап китһен,
Һипкән сакта гәлсәр карҙарын,
Шаңдап шул һүҙ, Ерҙе урап сығып,
Онотторһа икән аһ-зарын.
"Һөйөнсө!" тип, шул һүҙ
сыңғыратып,
Зиндандарҙың асһын ишеген,
Сыныйырҙары селпәрәмә килһен
Тәүбәһенә ҡайтҡан кешенең.
Алып китһен юлдар төбәгенә
Илкәйенән биҙгән бәндәне.
"Һөйөнсө!" тип, битлек кейгәндә лә
Үҙ йөҙөндә ҡалһын йән-тәне.
"Һөйөнсө!" тип юрап киләсәкте,
Һәр өрлөккә бишек аҫылһын.
Тыуған телендә тик һәр сабыйҙың
"Әсәй!" тиеп теле асылһын.
"Һөйөнсө!" тип балҡыр бөгөн ҡояш -
Йыһанымдың алтын сәғәте.
Ошо таңдан күсһен һәр көнөнә
Һөйөнсөләп тыуыу ғәҙәте.
Шатлыҡ килһә ташып, күңелемдә
"Һөйөнсө!" тип сыңлар мең ҡылым.
Бирешмәмен һары һағыштарға,
"Һөйөнсө!" тип тыуһа һәр йылым.

## СУСҠА ЙЫЛЫ

Яңы йыл еткән һайын,
Үткән юлға ҡарайым.
Үтелмәгәнме бушҡа -
Һорай ҙа ҡуйыр Сусҡа.
Ойоп яуа тәңкәләр,
Сусҡа йылы тын килер.
Ул алтын бирәм, тимәҫ.
Көмөшөн тирәм, тимәҫ.
Иң-иң изге теләге,
Уның иң ҙур бүләге:
Алып килгән йыл булыр,
Ни ҡыланһаң, шул булыр.
Тик ғүмер үтһә бушҡа,
Ғәйеплеме ни Сусҡа?

Сафуан ӘЛИБАЕВ.

## БЫЛ ҺАНДА ЯҢЫ РУБРИКАЛАР:

● Үкенес, ғәйеплелек тойғоһо менән йәшәргә теләмәһәң, ғәфү үтен. Беҙ һеҙгә шундай мөмкинлек бирәбеҙ. ● Үҙ атайың хаҡында башҡаларға фәһем булырҙай, ғорурланып һөйләрҙәй һүҙҙәрең бармы? Һөйлә, әйҙә. ● Бала тәрбиәләүҙә һәр ата-әсәнең тормошонда ҡыйынлыҡтар осрай. Уны еңеү юлдарын беҙҙең яңы рубрикалағы сығыштарҙа уҡы.


▸ АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ 6-сы бит

▸ ҒӘФҮ ИТ! 8-се бит

▸ АТАЙЫМ 7-се бит

▸ ИҪ КИТКЕС! 4-се бит

✓ *Әгәр ҙә һин: "Юҡ, минән булмай, бәхет һәм яҡшы тормош мине һәр саҡ урап уҙа", - тиһең икән, улар, ысынлап та, һинең йортоңа һуғылмай уҙасаҡ.*



ИШАРА

# ДӨРӨҪ УЙЗАРҒА ӨЙРӘН -

## үҙ-үҙеңде үҙгәртеүҙең тәүге баҫҡысы ошо

**Тағы бер йыл тарихҡа күсте. Һағынып һөйләр шатлыҡтары ла, иҫкә алырға ҡыйынһынған борсолоуҙары ла булды уның. Нисек кенә тимә, ундағы һәр талпыныу һәм абыныу - беҙҙеке. Сөнки уларҙы беҙ үҙебеҙ саҡырып алғанбыҙ. Беҙҙең уйыбыҙ, ҡылыҡтарыбыҙ емеше улар үткән йылда тормошобоҙҙа булған бар хәл-ваҡиғалар. Әйткәндәй, дөрөҫ уй... һәм үҙ-үҙеңде үҙгәртеү тураһында һөйләшәйек әле.**

Беҙ һәр яңы йыл менән бергә тормошобоҙға ниндәйҙер үҙгәрештәр килеренә, ниндәйҙер мөғжизәләргә ышанабыҙ. Ләкин... Көткәндәр тормошҡа ашһын өсөн үҙебеҙ ни эшләйбеҙ һуң? Мәҫәлән, был көндәрҙә сәләмәтлегең ҡаҡшап китте, уны еңеләйтеү өсөн ниҙәр эшләргә икәнен һин яҡшы беләһең: физик күнекмәләр, саф һауала күберәк йөрөү, йә булмаһа, йәйҙән йыйып ҡуйған шифалы үләндәрҙән төнәтмәләр әҙерләп эсеү - быларын врачтар ҙа кәңәш итә һиңә. Ләкин һин был ябай ғына сәләмәтлек күнекмәләрен үтәүҙе тағы иртәгәгә ҡалдыраһың. Эске тауышҡа ла ҡолаҡ һалмайһың, ундағы "табип" шулай ти: барыһын да йөрәгеңә яҡын алма, алама хәбәрҙәргә, ғәйбәткә ҡолаҡ һалма, асыуыңды, үпкәләүҙәреңде онот, изгелектәр ҡыл... Юҡ, һин быларҙың береһен дә эшләмәнең әле был көндәрҙә, ә үҙең хәлеңдең еңеләйеүен көтәһең. Бәхет көтәһең. Шатлыҡтар көтәһең. Улар алыҫ түгел, улар һинең йортоң ишеге төбөндә генә йөрөй һәм һинең йәшәү рәүешеңде, ҡылыҡтарыңды, донъяға, кешеләргә мөнәсәбәтеңде, ҡыҫҡаһы, үҙ-үҙеңде үҙгәрткәнде көтә...

Үҙ-үҙеңде үҙгәртеү, эйе, ауыр бурыс, ләкин тормошҡа ашмаҫтай түгел - башта ошоно аңлау фарыз. Аңламаһаң иһә, ошо риүәйәттәгесә була инде:"Бер аҡыл эйәһе Хоҙайға мөрәжәғәт итә икән:"Йәш сағымда уҡ мин донъяның дөрөҫ ҡоролмауын күрҙем. Уны яҡшыға үҙгәртергә бик теләнем. Һәм һинән:"Әй, Аллам, донъяны яҡшыға үҙгәртергә ярҙам ит миңә!"- тип үтендем. Йылдар үтте. Был донъяны үҙгәртеү минең генә көсөмдән килмәҫенә тамам ышандым. Шунан мин тағы һиңә: "Әй, Хоҙайым, исмаһам, минең иң яҡын кешеләремде - ҡатынымды һәм балаларымды яҡшыға үҙгәртергә ярҙам ит!" - тип ялындым. Теләгем ҡабул булманы. Бына мин ҡартайҙым, яҡты донъя менән хушлашырға ваҡыт етте. Мин донъяны ла, ҡатынымды һәм балаларымды ла үҙгәртә алманым. Үҙ-үҙемде үҙгәртергә ярҙам итһәңсе, тип, һуңғы тапҡыр ялынам һиңә". "Һуң инде, - ти шунда Аллаһы Тәғәлә. - Тәүҙә үк ошо үтенестән башларға кәрәк ине".

Эйе, донъяны ла, үҙ тормошоңдо ла үҙгәртергә теләһәң, үҙ-үҙеңдән башларға кәрәк икән шул. Бының өсөн... О-о, бының өсөн күпте эшләргә кәрәк. Уны һынап сығыуҙы маҡсат итеп ҡуймайым. Әйтергә теләгәнем шул ғына: тәүге аҙым, моғайын, дөрөҫ уйларға өйрәнеүҙер. Дөрөҫ уй, дөрөҫ аҡыл барыһын да үҙгәртә, хатта яҙмышты ла икенсе һуҡмаҡҡа төшөрә, тиҙәр. Әгәр ҙә һин: "Юҡ, минән булмай, бәхет һәм яҡшы тормош мине һәр саҡ урап уҙа", – тиһең икән, улар, ысынлап та, һинең йортоңа һуғылмай уҙасаҡ. Бәхетте һин үҙеңдең уйың менән үҙең үк йыраҡлаштыраһың, дөрөҫ уйламауың арҡаһында үҙеңә бәхетһеҙлектәр, күңел төңөлөүе саҡыраһың.

Тормошта беҙ аңлаған нәмәләр бар, аңлашылмағандары ла бихисап. Аңлашылғандарын беҙ ҡабул итәбеҙ, ә аңлашылмағандарын - юҡ, уларын хатта үҙебеҙҙең һайлыҡты аҡлар өсөн "ахмаҡлыҡ" тигән булып, кире ҡағабыҙ. Беҙ аңламағандар, бәлки, иң ҡиммәтле төшөнсә, иң кәрәкле аҡылдыр, әммә беҙ, наҙанлығыбыҙға барып, уны аңлау мәлен артҡа күсерә бирәбеҙ. Кешенең энергия ресурстары ғәйәт ҙур, тиҙәр, уны әүҙемерәк эшкә екһәң, аң аҫтындағы баяғы һин аңламағандар ҡалҡып сығасаҡ, быға са белмәгәндәрең аҡылға әйләнәсәк. Шул аҡылға нигеҙләнгән уйҙар менән хатта ауырыуҙы ла еңеп була икән. Уйҙар улар, аламаһы ла, яҡтыһы ла, йәшерен тәьҫир итә, шуға уға ышаныу ауыр һымаҡ.

Был хаҡта күп, бик күп һөйләргә булыр ине. Был хаҡта, йәғни аңында белмәгәндәреңде уятыу тураһында беҙ гәзитебеҙҙең "Уңыш ҡаҙан!" рубрикаһында даими яҙабыҙ. Әле һеҙгә һөйләгәндәрем дә - ошо рубрикалағы сығыштарҙы уҡығандан һуң тыуған һығымталарым. Ислам тәғлимәтенең тәүге аҡылы -"Уҡы!". Ысынлап та, аҡ ҡағыҙға яҙылғандарҙы уҡып, аҡыл йыябыҙ, дөрөҫ уйларға өйрәнәбеҙ. Дөрөҫ уйларға өйрәтеүҙең тәүге сығанағы - ул, әлбиттә, һәр мосолман өсөн Ҡөрьән-Кәрим. Хәҙер башҡа "аҡыллы китаптар" барлыҡҡа килде. Улар күберәк сит ил авторҙарыныҡы. Ете диңгеҙ аръяғындағы аҡыл эйәләре яҙһа ла, был "аҡыллы китаптар" беҙҙең өләсәйҙәр, ата-әсәйҙәр әйткән-өйрәткәндәрҙе ҡабатлай кеүек. Уларҙы беҙ ҡасандыр ишеткәнбеҙ, әммә ишетмәмешкә һалышҡанбыҙ. Йолаларыбыҙҙан тайпылып, үҙебеҙсә йәшәргә маташтыҡ бит. Аңламағандарҙы аңларға тырышып та торманыҡ. Күңел ялҡаулығына бирелеп, өҫтә ятҡан, беренсе ишеткән, беренсе күргән мәғлүмәттәр ҡолона әйләндек. Тап улар - үтә бер ҡатлы аңлатмалар, кәрәкмәгән төшөнсәләр, ғәйбәт, көнсөллөк аңыбыҙҙы яуланы. Былар, әлбиттә, дөрөҫ уйларға, үҙ-үҙебеҙҙе үҙгәртергә ҡамасаулай торған кәртәләр.

"Киске Өфө" менән дуҫлашып, оттоғоҙ, тимәксемен - уйҙарҙы, ҡылыҡтарҙы төҙәттерер аҡылды һеҙ "Уңыш ҡаҙан", "Аҡыл - ҡаҙна" кеүек рубрикаларҙа табырһығыҙ. Ул рубрикаларҙа беҙ баяғы "аҡыллы китаптар"ҙы тәржемә итеп бирәбеҙ. Маҡсат шул: уларҙы уҡып, үҙ-үҙебеҙҙе, донъябыҙҙы үҙгәртергә, дөрөҫ уйларға ярҙам иткән ата-бабалар аҡылын иҫкә төшөрәйек. Мәҫәлән, хәҙер барыһы "фэн-шуй" тип иҫе китә. Беҙ ҙә баҫтырҙыҡ уларҙы гәзитебеҙ биттәрендә. Хәтерҙе уятыу өсөн эшләнек уны. Уҡыусыларыбыҙҙың иҫенә төшкәндер: эйе, башҡортта ла булған көнкүрешен ҡотло итеп ҡороу ҡануны. Ҡарағыҙ, башҡорт ауылдары иң ҡотло урында - йылға буйҙарында, тау битләүҙәрендә урынлашҡан. Ҡытай фэн-шуйы ла бындай урындарҙы иң ҡотлоһо, тип раҫлай. Ләкин беҙҙең ата-бабаларға ҡытайҙар килеп, ауыл урыны һайлап бирмәгән бит. Ҡот тигәнде улар үҙҙәре бик яҡшы белгән. Ул йола әле лә бар.

Беҙ күптән әйтәбеҙ: гәзит - ул өҫтәлеңдең ҡаршы яғында ултырған әңгәмәсең, йә трибунаң булырға тейеш. Юҡ, трибуна дөрөҫ түгел, сөнки трибунанан тороп һөйләргә яратмағандар бар, ҡурҡҡандар, уңайһыҙланғандар бар. Әйҙә, гәзит һинең көндәлек дәфтәрең булһын. Унда һин тел менән әйтеп бирә алмаған бар һүҙҙәреңде яҙ. Кәңәш бир, кәңәш һора. Аҡыл өйрәт, аҡыл өйрән. Һәр хәлдә, башҡаларға фәһем, һабаҡ булып яңғыраһын яҙғандарың.

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**"Бер аҡыл эйәһе Хоҙайға мөрәжәғәт итә икән:"Йәш сағымда уҡ мин донъяның дөрөҫ ҡоролмауын күрҙем. Уны яҡшыға үҙгәртергә бик теләнем. Һәм һинән:"Әй, Аллам, донъяны яҡшыға үҙгәртергә ярҙам ит миңә!"- тип үтендем. Йылдар үтте. Был донъяны үҙгәртеү минең генә көсөмдән килмәҫенә тамам ышандым. Шунан мин тағы һиңә: "Әй, Хоҙайым, исмаһам, минең иң яҡын кешеләремде - ҡатынымды һәм балаларымды яҡшыға үҙгәртергә ярҙам ит!" - тип ялындым. Теләгем ҡабул булманы. Бына мин ҡартайҙым, яҡты донъя менән хушлашырға ваҡыт етте. Мин донъяны ла, ҡатынымды һәм балаларымды ла үҙгәртә алманым. Үҙ-үҙемде үҙгәртергә ярҙам итһәңсе, тип, һуңғы тапҡыр ялынам һиңә". "Һуң инде, - ти шунда Аллаһы Тәғәлә. - Тәүҙә үк ошо үтенестән башларға кәрәк ине".**



## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Йыл буйына һөйләшер һүҙҙәр, фәһем-кәңәштәребеҙ күп буласаҡ әле. Әле мин 2007 йылдың тәүге һанын асып, күптәр өсөн, шулай уҡ үҙем өсөн дә бик еңелдән булмаған, әммә мотлаҡ атҡарырға тейешле бурыс - үҙ-үҙебеҙҙе үҙгәртеү, уйҙарҙы дөрөҫ юҫыҡҡа төшөрөү тураһындағы һүҙҙе башлап ҡына ҡуйҙым. Уны һеҙ, беҙҙең өҫтәлгә ҡаршы ултырыусы яҡ та, эләктереп алығыҙ һәм үҙ тәжрибәгеҙҙе яҙып ебәрегеҙ, йәме. Әйҙәгеҙ, үҙ-үҙебеҙҙе үҙгәртәйек!**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Яңы йыл алдынан Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путин 2007 йылды Рәсәйҙә Рус теле йылы тип иғлан итеү тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Бөгөн Рәсәйҙә 145 миллион кеше, 160 этнос йәшәй. Уларҙың 116 милионы, 79,8 проценты, рустар. Ә бөтөн донъяла 288 миллион кеше рус телен туған теле итеп һанай. Йылды Рус теле йылы итеп нарыҡлау рус теленә киң аудитория иғтибарын йәлеп итеү, сит илдәрҙә рус телен өйрәнеүҙе дәртләндереү, уның халыҡ-ара кимәлдә абруйын күтәреү өсөн эшләнә, тип билдәләне Рәсәй Президенты.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты яңы йылдың тәүге көндәрендә үк эш сәфәре менән Баймаҡ, Әбйәлил, Йылайыр, Күгәрсен, Көйөргәҙе районларында булды. Президентты эш сәфәрендә БР Президенты Хакимиәте етәксеһе Радий Хәбиров менән БР Премьер-министры урынбаҫары - төҙөлөш, архитектура һәм транспорт министры Хәмит Мәүлийәров оҙатып йөрөнө.

✓Мортаза Ғөбәйҙулла улы юл ыңғайында уҡ "Яҡтыкүл" санаторийына һуғылды. Бында бик ҙур реконструкция эштәре башлау күҙаллана. Ҡайһы бер бүлексәләргә реконструция үткәреләсәк, ашхана һәм ял итеү үҙәге, шулай уҡ яңы корпус төҙөләсәк.

✓Республика Президенты Әбйәлил районының Асҡар ауылында үҙәк район дауаханаһы һәм мәҙәниәт йорттары биналарын реконструкциялау барышы менән танышты.

✓Быйыл ноябрь айында республика Советының һаулыҡ һаҡлау мәсьәләләренә арналған күсмә ултырышы Урал аръяғы районларында, шулай уҡ Баймаҡта ла үтәсәк. Шуға ла сираттағы сәфәрендә Президент Баймаҡ районында яңы һаулыҡ һаҡлау учреждениелары төҙөлөшөн һәм реконструкция эштәре барышын ҡараны. Билдәле булыуынса, Баймаҡта Темәс участка дауаханаһы бинаһына, үҙәк район дауаханаһына реконструкция үткәрелә, ҡаланың үҙендә физкультура-һауыҡтырыу комплексы төҙөлә. Президент эштәр барышынан ҡәнәғәт ҡалды.

✓Президент Мортаза Рәхимов Баймаҡтағы "Талҡаҫ" шифаханаһының яңы корпусы төҙөлөшөн ҡараны. Бынан тыш, "Талҡаҫ"та ашхана, йоҡо корпустары һәм ял итеү үҙәген реконструкциялау ҙа бара. Шулай уҡ ял итеүселәр өсөн бында ун коттедж төҙөү башланған. Бөтә төҙөлөш эштәре тамамланғас, санаторий әлеге 54 урынлыҡтан 400 урынлыҡ булып үҫәсәк. Бындағы төп дауа - күлдән алынған батҡаҡ. Ул йөрәк-хәрәкәт, тын алыу ағзалары, нервылар системаһы, тире ауырыуҙарынан файҙалы.

*✓ Сәддәм Хөсәйендең үлемен бөтә донъяға "бүләк" итеп, АҠШ тарафынан асыҡ сағылдырылған Көнбайыш идеологияһы мосолман донъяһына үҙенсәлекле, кинәйәле ишара яһап ҡуйҙы, шикелле.*



*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# АМЕРИКАНЫҢ ЯҢЫ ЙЫЛ "БҮЛӘГЕ"

## Ҡорбан байрамы алдынан Ираҡта Сәддәм Хөсәйенде аҫтылар

**Яңы йыл алдынан, ғәҙәттә, кешеләр бер-береһенә бүләк бирешә. Йолаһы шулай ул байрамдың. Бүләктәрҙең төрлөһө була. Ҡыш Бабай биргәне, йәки атай-әсәй, туған-тыумаса, йә дуҫ-иш тотторғаны. Бынан тыш, бүләктәр тағы ла дәүләт тарафынан тапшырыла. Ундайҙарҙы алғас, ҡыуанырғамы, ултырып иларғамы, тип уйландыра башлай. Бүләктәрҙең бәләкәс кенәһе лә, тауҙай олоһо ла, изге күңелдән булһа, әлбиттә, йыл буйына уны биреүсенең һәм ҡабул итеп алыусының йәненә рәхәтлек бирел тороусан. Көтөп алған һәм ҡыуаныс килтергән бүләктәр менән бер рәттән, көтөлмәгән һәм шуға ла шомландырған, ҡурҡыуға һалған бүләктәр ҙә була икән. Ундайҙарҙы алғы ла килмәй. Әммә биреүсеһе һинең теләгеңә ҡарап тормай шул.**

**Я**ңы йыл алдынан ғына Америка Ҡушма Штаттары бөтә донъя халҡына иҫ китмәле "бүләк" яһаны. Алдан әҙерләп килә ине ул уны. Бер нисә йыл буйына. Тик барыбер көтөлмәгән булып сыҡты. Беҙ бит нисек кенә булмаһын, булып торған хәл-ваҡиғаларҙы яҡшыға юраусан. Америка Ираҡҡа бәреп ингәйне, "Бәлки, шулай кәрәктер", тип ҡабул иттек. Америка буштан-бушҡа һуғыш башламағандыр әле, тимәк, берәй сәбәбе барҙыр, тинек. Күп тә үтмәне, сәбәбе асыҡланды - Америка Ираҡҡа демократия урынлаштырырға килгән икән. Демократия - һәйбәт нәмә, тинек, ирек, азатлыҡ алып килә. Икенсе төрлө әйткәндә, Ираҡ халҡына - яңы тормош, ә Америкаға - арзанлы һәм юғары сифатлы нефть. Ираҡ халҡы нисәмә йылдар буйына баҫылып, иҙелеп йәшәп килгән, әйҙә, хәҙер яңыса ғүмер итеп ҡараһын, тип уйланыҡ. "Яңыса" килеп сыҡманы. Ираҡта туҡтауһыҙ шартлауҙар, үлтереүҙәр, кеше урлауҙар башланды. Рәсәйҙең "ҡорһаҡ" аҫтында ғына ятҡан һәм күп йылдар буйына стратегик партнеры булған ил тотошлайы менән һуғыш аренаһына әүерелде. Хатта оҙаҡ йылдар Ираҡтың башлығы булған Сәддәм Хөсәйенде ҡулға алыу ҙа ярҙам итмәне. Демократияны бер көндә генә урынлаштырып булмай икән, тигән фекергә килдек. Сәддәм Хөсәйен өҫтөнән хөкөм итеү башланғас та тыныс ҡалдыҡ беҙ. Беҙ тигәнем, йәмәғәтселек була инде. Донъя йәмәғәтселеге, тимәк. Ысынлап та, хөкөм итерлек бит. Нисәмә йылдар буйына ил менән идара иткәндә күпме кешенең башына еткән, дини һәм милли аҙсылыҡтарҙы кәмһеткән, шииттарҙы һәм ҡурдтарҙы ҡырған, үҙ халҡын да йәлләмәгән, меңәрләп юҡ иткән ул. Иранға һәм Кувейтҡа ҡаршы һуғыш асҡан. Башҡа енәйәттәре лә баштан ашҡан инде. Ике йылға яҡын барҙы суд процесы. Һәм, ниһайәт, үткән йылдың аҙағында ҡарар сығарылды: Сәддәм Хөсәйен ҡылған енәйәттәре өсөн үлем язаһына дусар ителергә тейеш.

**О**шо урында донъя сәйәсәтендә, ғөмүмән, тормошта диктаторҙарҙың биләп торған урыны хаҡында бер нисә һүҙ әйтеү урынлы булыр һымаҡ. Ни тиһәң дә, әле генә тарихҡа оҙатҡан 2006 йылды төрлө илдәрҙә төрлө осорҙа етәкселек иткән диктаторҙар менән мәңгегә хушлашыу йылы булды, тип баһаларға мөмкин. Чили - Пиночет, Төркмәнстан - Сапарморат Ниязов менән бәхилләште. Тәүгеһе 90 йәшкә барып етте, икенсеһе 66-ға ғына. Беренсеһе үткән быуаттың етмешенсе йылдарында Чилиҙа Сальвадор Альенденың социалистик хөкүмәтен бәреп төшөрөп, илдә ҡаты диктатура булдыра. Ул етәкселек иткән хәрби хунта сәйәсәте менән риза булмағандар күпләп ҡырыла, баш күтәреүселәр аяуһыҙ баҫтырыла, Чилиҙың баш ҡалаһы Сантьягоның иң ҙур стадионы концлагерға әүерелдерелә. Хунта бойороғо менән үлем язаһына дусар ителгәндәрҙе вертолеттарҙан океанға ташлайҙар. Егермеләп йыл Чили менән идара иткәс, Пиночет илдә ирекле һайлауҙарға юл ҡуйып, үҙ теләге менән ил менән идара итеүҙән ситләшә. Әммә ҡоралды көстәрҙең баш командующийы булып ҡала, йәғни власть дилбегәһен үҙ ҡулдарында тота. Пиночеттың төп ҡаҙанышы - илдә ҡаты ҡул менән тәртип урынлаштырыу һәм халыҡҡа етеш тормош тәьмин итеү. Асылда иһә, Чили иҡтисадына Америка Ҡушма Штаттарының эре эшҡыуарҙарын индереү, илдең төп байлығы булған баҡыр ятҡылыҡтарын сит ил фирмаларына тоттороу. Эйе, һүҙ юҡ - һуңғы бер нисә тиҫтә йыл эсендә Чили күҙгә күренеп үҙгәрҙе, уларҙың тәжрибәһен башҡа күп кенә илдәр, шул иҫәптән, Рәсәй ҙә өйрәнеп маташты. Әммә береһе лә уны ҡабул итергә ашыҡмай. Егерме беренсе быуатта Пиночетты бер нисә тапҡыр яуаплылыҡҡа тарттырып ҡаранылар, хатта ҡулға алырға маташтылар. Тик меңәрләгән кешенең башына еткән диктатор вафат булғас, уны хөрмәтләп ерләнеләр. Хатта үлгәндән һуң да илдә Пиночет сәйәсәте менән риза булмаусылар һәм уның ҡаты ҡулын үҙ елкәһендә татыусылар уны хөкөм итергә ашыҡмай. Әллә уларға юл бирмәйҙәрме?

**Б**өтә төркмәндәрҙең Атаһы тип иғлан ителгән Сапарморат Ниязов үҙ илендә Иосиф Виссарионович Сталин тибындағы диктатура ойоштороҙо. Төркмәнстандағы бөтә нәмә Төркмәнбашы рухы менән һуғарылғайны. Уның һәйкәлдәре илдең һәр бер ҡалаһында ҡуйылған, ҡалалар, хатта тауҙар уның исемен йөрөтә, боронғо Рим императорҙары кеүек, Сапарморат Ниязов айҙарҙың һәм көндәрҙең исемдәрен үҙгәртеп, үҙенекен һәм әсәһенең исемен ҡушып бөттө. Ул ғынамы? Төркмәндәрҙең рухи донъяһын үҙенә ярашлы "төҙәтергә" булып китте Сапарморат Ниязов. "Рухнамә" китабын яҙып сығарҙы. Ул әҫәрҙе бөтә халыҡ ятҡан белергә тейеш ине. Илдә мәҙәниәтте юҡҡа сығарып, үҙенең исемен йөрөткән телеканал аша ярандарын бөтә донъяға фашлап, Төркмәнстандың төп байлығы булған газ торбаһының өҫтөнә ултырып алған Төркмәнбашы көтмәгәндә үткән йылдың декабрендә вафат булып ҡалды. Йөрәге туҡтаған, тинеләр. Бәлки, берәй яраны ҡул тигеҙгәндер, тип шикләнер инең, Сапарморат Ниязовты бер нисә йыл рәттән дауалаған Германия врачтары әйтте был һүҙҙәрҙе. Төркмәнбашын халыҡтың иң күренекле шәхесе итеп, сит илдәрҙән, шул иҫәптән, Рәсәйҙән килгән рәсми делегациялар алдында үҙе алдан төҙәттөрөп ҡуйған кәшәнәлә ерләнеләр.

Тимәк, диктаторҙарҙың да төрлө яҙмышлыһы була икән, тип һығымта яһарға мөмкин. Берәүҙәр, ғүмер буйына үҙ иленең кешеһен ҡырып, шәхес культы булдырһа ла, теге донъяға Аллаһы Тәғәлә саҡырыуы буйынса, йәғни, ваҡыты еткәс, китә, ә икенселәре иһә...

Ғөмүмән, Сәддәм Хөсәйенде үлем язаһына тарттырыу кемгә кәрәк булды һуң? Диктаторҙың үлеме уның бойороғо менән теге донъяға оҙатылған меңәрләгән кешене терелтәме? Әлбиттә, юҡ. Хөсәйендең йәне ожмахҡамы, тамуҡҡамы оҙатылыуы Ираҡта тыныслыҡ урынлаштырырға булышлыҡ итәме? Әлегә юҡ. Яңы йыл төнөндә генә был илдең төрлө ҡалаларында кәмендә 16 шартлау яңғыраған, бер нисә тиҫтә кеше һәләк булған. Был хәлдең артабан да дауам итәсәгенә шик юҡ.

**А**мерика Ҡушма Штаттары президенты Джордж Буштың, Сәддәм Хөсәйенде үлем язаһына дусар итеү Ираҡта демократия урынлашыуына һәм нығыныуына булышлыҡ итәсәк, тигән һүҙҙәре лә ышандырмай. Демократик илдәр күптән инде үлем язаһынан баш тартты. Хатта Рәсәйҙә лә әлегә тиклем был хөкөмгә мораторий һаҡланып килә. Был иһә, суд тарафынан үлем язаһы бирелһә лә, уға дусар ителеүсе енәйәтселәр ғүмерлеккә төрмәгә ябыла, тигән һүҙ. Улар хаҡында иң яҡын туғандарынан башҡа кеше онотоп бөтә. Ә бына Сәддәм Хөсәйенде язалауҙы Ҡорбан байрамына тап килтереү күп нәмә хаҡында һөйләй. Уны аңлар өсөн мосолмандар өсөн изге һаналған был байрамдың тарихын байҡайыҡ. Ҡөрьән Кәримдә бәйән ителгән риүәйәтте иҫкә төшөрәйек. Ибраһим бәйғәмбәрҙең олоғайғансы балаһы булмағас, Аллаһы Тәғәләнән сабый һорай был. Бер ир бала насип итһәң, үҙеңә бағышлар инем, тип өҫтәп тә ҡуя. Оҙаҡ та үтмәй, балаһы донъяға килә. Әйткән һүҙ - атҡан уҡ, тиҙәрме әле? Улы Исмәғилгә ун йәштәр самаһы булғас, Ибраһим ғәзизен ҡорбан итеп салғанын төштә күрә. Аллаһы Тәғәлә әйткән һүҙҙәремде иҫемә төшөрә, ти ҙә бәйғәмбәр, улына был ниәтен еткереп, ҡулына бысаҡ алғас, Ябраил фәрештә килеп, Аллаһы Тәғәлә һинең тоғролоғоңдо һынаны, сабырлыҡ дәрәжәңде күрҙе һәм ҡорбан итеп салыу өсөн бына ошо ҡуйҙы ебәрҙе, тип аңлата. Тимәк, ҡорбан килтереү - ул сабырлыҡтың бер сағылышы.

Сәддәм Хөсәйендең үлемен бөтә донъяға "бүләк" итеп, АҠШ тарафынан асыҡ сағылдырылған Көнбайыш идеологияһы мосолман донъяһына үҙенсәлекле, кинәйәле ишара яһап ҡуйҙы, шикелле. Сабыр булығыҙ, тинеләр Мөхәммәт динен тотоусыларға. Демократия әләме аҫтында илегеҙгә ҡырылыш килтерәбеҙ икән, тыныс ҡалығыҙ. Эйелгән башты ҡылыс киҫмәй, ти бит әле халыҡ аҡылы. Киҫеүен киҫмәйҙер ул, әммә эйелгән башты элмәккә тығыуы бер ни ҙә тормай бит.

Сабырлыҡтың төбө һары алтын, тигән халҡым. Тик сабырлыҡтың да булалыр бер сиге.

**Таһир ИШКИНИН.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

## Шартлаған шатлыҡ

... быйылғы Яңы йылды ҡаршылаған төндә һәм артабанғы төндәрҙә урамдарҙағы "шартлауҙар" тарихта тәүге тапҡыр теркәләлер ул. Бындайын күргән һәм ишеткән юҡ ине әле. Замана байҙары хәҙер пиротехниканың 1 мең һумлығынан алып 20-30 мең һумлығына тиклем аҡса йәлләмәй икән. Шыршы янында тәҙрә аша урамдағы "һуғыш уйындарын" өнһөҙ тыңлап, ошо күренештең сәбәптәрен аңларға теләнем һәм шундай һығымтаға килдем. Әҙәм балаһы үҙенең тыумыш асылы буйынса ихластан, бар күңелдән шатланырға онотоп бара шул хәҙер. Урамдағы төрлө уйынсыҡтар менән уйнаусылар шул шартлау тауыштарына һәм төрлө төҫтәрҙәге бихисап уттарға алдана ғына. Шулай-шул, хәҙер хатта шатлыҡ тойғоһо ла үтә дефицитҡа әүерелде. Уны аҡсаға һатып алып булмай, эскерһеҙлекте, тәбиғи шатланыуҙы шартлауҙар алыштырмай.

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Район үҙәге Йылайырҙа реконструкция эштәре алып барылған урта белем биреү мәктәбе лә Президент ҡараған объекттарҙың береһе булды. Был бинала элек профессиональ училище урынлашҡан булған. Район үҙәгендә был икенсе мәктәп буласаҡ.

✓Донъяла төрки халыҡтары этнографияһы буйынса иң күренекле ғалим булып танылған милләттәшебеҙ Ғәлимйән Тағандың тыуыуына 115 йыл тулды. Зәки Вәлидиҙең арҡадашы 1920 йылда тәүҙә Манчжурияға, шунан Японияға эмиграцияға китә. 1930 йылдан 1944 йылға тиклем Венгрияла Милли этнографик музейҙың көнсығыш бүлеген етәкләй. 1945-1948 йылдарҙа - ул Германияла Гамбург университеты профессоры булып эшләй. 1948 йылда донъя ҡуя. Ғалимдың венгр телендә яҙылған күп ғилми эштәре беҙҙең өсөн таныш түгел.

✓Баймаҡ районында Төҙөкләндереү йылына йомғаҡ яһанылар. Беренсе урынды - Аҡморон, икенсене - Темәс, өсөнсө урынды Беренсе Эткол ауыл советтары яуланы. Еңеүсе ауыл советтары 100 мең, 75 мең һәм 50 мең һумлыҡ аҡсалата премиялар менән бүләкләнде.

✓Урал аръяғы райондарының баш ҡалаһы Сибайҙа иҡтисад өлкәһендәге үҙгәрештәр һиҙелерлек. Ҡала хакимиәте башлығы Айҙар Халиҡов әйтеүенсә, үтеп барған йылды ҡала 200 миллион һумлыҡ табыш менән тамамлаған.

✓БР Президенты Күгәрсен районына сәфәрендә Мәксүт ауылындағы һәм район үҙәге Мораҡтағы мәктәп биналарында алып барылған реконструкция эштәре менән танышты.

✓Көйөргәҙе районында булғанда ла Ермолаевоның 1-се мәктәбендә алып барылған реконструкция эштәре Башҡортостан Президентының иғтибар үҙәгенән ситтә ҡалманы.

✓Үтеп киткән йыл Башҡортостан өсөн тышҡы сауҙа эшмәкәрлеге өлкәһендә сираттағы тапҡыр уңышлы булды. Тышҡы сауҙа күләме 6,9 миллиард долларға барып етте. Республика тауар етештереүселәре продукцияһының төп ҡулланыусылары - Евросоюз илдәре компаниялары. Улар араһында Бөйөк Британия, Нидерланды, Словакия, Чехия, Польша предприятиелары, Багам һәм Виргиния утрауҙары фирмалары, шулай уҡ Ҡаҙағстан, Беларусь, Украина, Тажикстан компаниялары менән әүҙем бәйләнеш булдырылған.

✓ **Быйыл пенсия 496 һумға тиклем артасаҡ. Апрелдә беренсе тапҡыр пенсияның страховка өлөшө 9,3, ә база өлөшө 7,5 процентҡа тиклем күтәрелһә, октябргә тиклем 1035 һумдан 1260 һумғаса үҫәсәк.**



ИҪ КИТКЕС!

**Коммуналь хеҙмәт. 2007 йылдың 1 ғинуарынан электр уты өсөн түләү хаҡы 13 процентҡа артасаҡ. Бер киловатт-сәғәт өсөн ҡаланыҡылар 1 һум 11 тин, ә ауылда йәшәүселәр 78 тин түләйәсәк. Эҫе һыуға тариф республика буйынса - 19, ә Өфө халҡы өсөн 21 процентҡа күтәрелә. Торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү баш ҡала кешеләре өсөн 13,3-17,4 процентҡа арта. Уртаса алғанда, "квадрат" өсөн 29 һум 71 тин түләргә тура киләсәк.**

## КҮҘАЛЛАУҘАР

**Пенсия.** РФ Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһе идарасыһы Фоат Хантемиров белдереүенсә, пенсия 496 һумға тиклем артасаҡ. Апрелдә беренсе тапҡыр пенсияның страховка өлөшө 9,3, ә база өлөшө 7,5 процентҡа тиклем күтәрелһә, октябргә тиклем 1035 һумдан 1260 һумғаса үҫәсәк.

**Торлаҡ.** "САН" ябыҡ акционерҙар йәмғиәтенең генераль директоры Рөстәм Камалов, күсмәй торған милеккә хаҡтар - 20-30, ә икенсел торлаҡҡа 40 процентҡа артасаҡ, тип белдерҙе. Хәтерләһәгеҙ, бөгөн "квадрат" хаҡы 45-тән 65 мең һумғаса. Шулай уҡ быйылдан башлап Башҡортостан Республикаһының күсмәй торған милек баҙарында ҡатнашыусыларының профессиональ Ассоциацияһына ингән агентлыҡтар хеҙмәткәрҙәренә танытмалар бирелергә тейеш.

**Эш хаҡы.** 2007 йылдың 1 сентябренән бюджет хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы 15 процентҡа тиклем артыуы көтөлә.

**Стипендия.** Шулай уҡ 1 сентябрҙән студенттарға стипендия түләү ҙә арттырыла. Стипендия әле 600 һум булһа, сентябрҙән башлап 900 һум тәшкил итәсәк.

**Әсәлек капиталы.** 2007 йылда икенсе йәки өсөнсө бала тапҡан ҡатындар өс йылдан һуң 250 мең һум күләмендә пособие аласаҡ. Был аҡсаны торлаҡ, белем алыу йәки пенсия өсөн дә "инвестицияларға" мөмкин.

**Бала тыуҙырыу сертификаты.** 2007 йылдың 1 ғинуарынан "бала тыуҙырыу документы" ҡиммәтләнә. Хәҙер ҡатын-ҡыҙҙар консультациялары 2 мең урынына - 3-әр, ә бала тыуҙырыу йорттары 5 мең урынына 6 мең һум аласаҡ. Унан тыш, һәр баланы 1 йәшкә тиклем диспансер күҙәтеү өсөн дә поликлиникалар 1-әр мең һум аласаҡ.

**Балалар пособиеһы.** Ғинуар башынан беренсе балаға пособие 1500-ҙән, ә икенсе һәм унан ҡала тыуған балаларға (ошоға тиклем Урал коэфициентын иҫәпкә алып, бер бала өсөн айына 805 һум түләнә ине) 3 меңдән дә кәм булмаясаҡ. Балаһын тыуҙырғанға тиклем эшләп йөрөгән әсәләргә пособие күләме уртаса эш хаҡының 40 проценты күләменән (6 меңдән артыҡ түгел) иҫәпләнергә мөмкин.

**Балалар сәләмәтлеген һаҡлау.** 2006 йылда был маҡсатта 370 миллион һум аҡса сарыф ителһә, быйыл сығымдар яҡынса 25 процентҡаса артасаҡ.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ТӨҘӨКЛӘНДЕРЕҮ ЙЫЛЫ ҮТТЕ,

## ә төҙөлөш эштәре дауам итә...

**Төҙөкләндереү йылы тамамланһа ла, Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуының 450 йыллығы уңайынан башланған төҙөлөш эштәре дауам итә. Төҙөүселәр 2 ғинуар көнө эшкә сыҡты. Улар эштәрен 2007 йылдың авгусында тамамларға тейеш. Төҙөлөш объекттарында эштәр нисек бара һуң? Беҙ быға тиклем һеҙгә уларҙағы эш барышы хаҡында хәбәр итеп торҙоҡ, ошо көндәрҙә башҡарылған һәм тамамланған эштәргә лә күҙ һалайыҡ:**

✓**"Өфө" халыҡ-ара аэропортында** ер эштәре тамамланған, багаж бүлегенә реконструкция яһалған, автопавильон төҙөлгән, 1-се терминал файҙаланыуға тапшырылған, 2-се терминалда һылау-биҙәү эштәре алып барыла. Аэропорт бинаһына кирбестән төкөтмә һалыу эше тамамлана, йылылыҡ селтәре үткәрелә.

✓**"Өфө" станцияһы тимер юлы вокзалында** ла бик күп эштәр башҡарылған. Вокзал янындағы гараждар һүтеп алынғандан һуң, ер аҫты үткәле төҙөлгән. Әле үткәлгә нығытма ҡуйыла, ямғырҙан һаҡлағыс коллектор һалына. Йыл аҙағында К. Маркс урамы буйлап автомобиль хәрәкәте асылды, йыл башында шул уҡ урамда юл үткәргесе, тимер юлы вокзалына ер аҫты юлы төҙөү эштәре башланасаҡ. Тимер юлы вокзалы бинаһына реконструкция яһаласаҡ. Трамвай ҡулсаһы төҙөү өсөн Дзержинский урамының бер өлөшө ябыласаҡ.

✓**"Дуҫлыҡ" йортона** килгәндә, унда төп бинаның нигеҙе һәм корпусы, автостоянканың нигеҙе һалынған да инде. Әле төп бинаның эске һәм тышҡы инженер селтәрҙәре үткәрелә. Йорт әйләнәһендәге территория төҙөкләндерелә, йылылыҡ үткәргесе һалына. Төҙөүселәр ошо арала бинаны эске яҡтан йыһазландырыу һәм биҙәү эштәренә тотонасаҡ.

✓**"Өфө-Арена" универсаль спорт аренаһына** монолит каркас ҡуйыу эштәре тамамланды. Унда метал формалар ҡуйылды, Осипенко урамы яғынан вертикаль планировка эштәре башҡарылды. Беренсе ҡатҡа иҙән түшәлде һәм боҙ яланға нигеҙ һалынды, эске канализация һәм йылылыҡ үткәргесе системаһы эшләндә. Аренаның икенсе, өсөнсө һәм дүртенсе ҡаттары араһына иҙән-түшәм һалынды, әле бишенсе ҡатта ла шундай уҡ эштәр башҡарыла. Шулай уҡ аренаның түбәһе ябыла, вентиляторҙар ҡуйыла, бинаның стеналары һылана.

✓**"Аҡбуҙат" ипподромында** өс ат аҙбарына реконструкция яһалған, хәҙер уларҙы биҙәү эштәре бара. Әле манежға нигеҙ һалына, төп трибунаға монолит каркас ҡорола. Ипподромдың төп бинаһының ҡыйыҡы ябыла, уны эске яҡтан биҙәү, вентиляция үткәреү һәм электромонтаж эштәре алып барыла. Ат сабыштырыу яланындағы 90 процент эштәр башҡарылған да инде. Йыл башында ат аҙбарҙарын эске яҡтан биҙәү, манеж төҙөү һәм йылылыҡ үткәреү эштәре тамамланасаҡ.

✓Өфөнөң Калинин районына ҡараған Базилевка ауылында **Республика психиатрия дауаханаһы** комплексы төҙөлә. Әле дауалау корпусын эске яҡтан биҙәү һәм инженер селтәрҙәре үткәреү эштәре тамамлана. Тағы ла дүрт бүлектең корпустары һалынған, түбәләре ябылған, йылылыҡ үткәрелгән. Бер үк ваҡытта комплексҡа ҡараған территорияла төҙөкләндереү эштәре алып барыла, Шакша микрорайонынан Базилевка ауылына юғары вольтлы линиялар үткәрелә.

✓**Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһының** хирургик корпусына реконструкция үткәреү эштәренә килгәндә, унда туғыҙ ҡатлы йорт кирбестән һалына. Шулай уҡ төп бинаға төкөтөп һалынған биш ҡатлы йортта биҙәү һәм махсус ҡоролмалар урынлаштырыу эштәре тамамлана.

**Евгения СЮТКИНА.**
**"БАШвестЪ".**



"Өфө" станцияһы тимер юлы вокзалы



"Өфө" халыҡ-ара аэропорты



"Өфө-Арена" универсаль спорт аренаһы



"Аҡбуҙат" ипподромы



"Дуҫлыҡ" йорто

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Төҙөкләндереү йылында башланған бөйөк төҙөлөш эштәре 2007 йылда тағы ла ҡыҙыуыраҡ темпта дауам итә. Күҙ йомоп асҡан арала 2007 йыл да сабып үтеп китер, яңы объекттар төҙөлөп бөтөүгә Өфөбеҙ танымаҫлыҡ булып үҙгәрер, күркәмләнер, матурайыр, күңелебеҙ йәмләнер.**

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

☑ "Нефтсе" спорткомплексында 8-12 ғинуарҙа "Ҡышҡы мәктәп каникулдары" призына бокс буйынса ҡышҡы республика турниры үткәреләсәк. Унда Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән үкыусы балалар ҡатнашасаҡ.

☑ Быйыл Өфөлә 7 балалар баҡсаһы муниципаль милеккә ҡайтарыласаҡ. 2010 йылға тиклем 2 мең урынға иҫәпләнгән 14 балалар баҡсаһын ҡайтарыу һәм "Урал", "Кариҙел", "Южный", "Колгуевский", "Йондоҙ", "Глумилино", "Затон", "Сипайлово" микрорайондарында 1380 урынға иҫәпләнгән тағы 10 балалар баҡсаһы төҙөү планлаштырыла.

☑ Быйыл боҙҙа шыуырға яратыусылар өсөн баш ҡала һикһәндән ашыу хоккей һәм боҙ майҙансыҡтары әҙерләнгән.

☑ Совет майҙанындағы боҙ ҡаласығында баш ҡаланың иң төп Ҡыш бабайы һайланды. Был маҡтаулы исемгә ҡырҡтан ашыу кеше дәғүә итте. Улар араһында төрлө һөнәр эйәләре, ирегеттәр генә түгел, хатта ҡатын-ҡыҙҙар, мәктәп уҡыусылары ла бар ине. Ҡыш бабайға төп талап - ул мөләйем, изге күңелле, йырлай-бейей, шиғыр һөйләй белергә, махсус Ҡыш бабай кейемендә булырға тейеш.

☑ Яңы йыл төнөндә Ҡыш бабайҙар күпме аҡса эшләй? Ҡыш бабай һәм Ҡарһылыуҙың әйтеүенсә, бер өйгә инеп ҡотлап сығыу яҡынса 1-3 мең һум. Һәр йортта 40 минут самаһы булырға тейештәр. Шулай ҙа Ҡыш бабайҙар өсөн иң мөһиме - образға инеп, балаларҙың күңелен күреп, Яңы йыл кәйефе булдырыу, кешеләргә шатлыҡ өләшеү.

☑ БР Мәғариф министрлығы 10-12 ғинуарҙа Стәрлетамаҡта шулай уҡ "Ҡышҡы мәктәп каникулдары" призына еңел атлетика буйынса республика ярыштары ойоштора. Ә үҫмерҙәр араһындағы саңғыла йүгереү буйынса республика беренселеге 7-9 ғинуарҙа Кушнаренкола үтәсәк.

☑ Каникул саралары 11-14 ғинуарҙа малайҙар һәм ҡыҙҙар араһында Стәрлетамаҡта һәм Туймазыла үтәсәк волейбол буйынса финал ярыштары тамамлаясаҡ.

☑ Яңы йыл байрамы төнөндә республикала 23, икенсе көнөнә 27 янғын осрағы теркәлгән. Ун кеше һәләк булған. Янғын һүндереүҙә 191 хеҙмәткәр һәм 67 берәмек техника ҡатнашҡан, 7 миллион һумлыҡ матди байлыҡ ҡотҡарып ҡалынған.

СОБХАНАЛЛА!

# Салауат проспектында

## яңы мәсет төҙөлә

Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты республиканың барлыҡ халҡына тәрән ихтирамын белдерә.

Рәсәй Федерацияһының әлеге үҫеш этабында традицион диндәр дөйөм кешелектең, рухи-әхләҡи, рухи ҡиммәттәрҙең киң рәҫланыуында өҫтөнлөклө роль уйнай. Уларҙың нигеҙендә тыныслыҡ, изгелек, бөтә халыҡтар, төрлө дин тотоусы кешеләр араһында үҙ-ара ихтирам ята. Юғары рухлылыҡ ысын цивилизациялы йәмғиәттә именлек һәм тотош дәүләттең гармониялы үҫешенең гаранты булып тора.

Бөгөн республиканың мосолман дине православие динен тотоусы христиандар һәм башҡа дин тотоусылар менән тығыҙ хеҙмәттәшлектә изге Хоҙай юлында ҙур эш башҡара. Халыҡтарҙың рухи-әхлаҡи йолалары тергеҙелә, изге иман йорттары реставрациялана, яңы мәсеттәр һәм ҡорамдар ҡалка.

Республика етәкселегенең Өфө ҡалаһының Салауат Юлаев проспектында яңы Собор мәсетен төҙөүгә ризалыҡ биреүе Башҡортостан мосолмандары өсөн ҙур ваҡиға булды. Был - ысын мәғәнәһендә Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәй дәүләте составына инеүен билдәләгән юбилейға иҫ китмәле бүләк, йәмғиәттең рухи-әхлаҡи камиллашыуын тәрән хәстәрләү билдәһе.

Собор мәсете рухи тергеҙелеүҙең, милләт-ара һәм конфессия-ара татыулыҡты нығытыуҙың сағыу күренеше булырына ышанабыҙ.

Республика халҡына, яңы Собор мәсетен төҙөүҙә ҡулдан килгән тиклем ярҙам итеүҙәрен һорап, мөрәжәғәт итәбеҙ. Борон-борондан иман йорттары дуҫлыҡты нығытыуға, төбәктә тотороҡлокто тәьмин итеүгә хеҙмәт иткән.

Изге ҡорамдар һәм мәсеттәр төҙөүҙә ҡатнашыуы менән билдәле булған "Жилстройкомплект" төҙөлөш фирмаһына был эш ышанып тапшырылған.

Ҡәҙерле ватандаштар, һеҙҙең теләһә ниндәй ярҙамығыҙ изге ғәмәл булаcаҡ һәм бер Хоҙайҙан, Төҙөүсенән, Донъялар Аллаһы тарафынан ҡайтасаҡ, быуаттарға хәтерҙә ҡаласаҡ. Амин.

**Башҡортостан Республикаһы мосолмандарының Диниә назараты рәйесе, мөфтөй Нурмөхәмәт хәҙрәт НИҒМӘТУЛЛИН.**

**Банк реквизиттары:**

**ООО ПКФ " Жилстройкомплект"**
**ИНН 0275037943**
**р/с 40702810506000010370 5**
**в Башкирском ОСБ N 8598,**
**к/с 30101810300000000601**
**БИК 048073601**



## ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП:

**Яңы йыл байрамы менән бөтөн донъя мосолмандарын берләштергән Ҡорбан байрамы бергә тап килде был юлы. Күптәр өсөн һынау ҙа булды был: беҙ 31 декабрҙә "ғәҙәттәге" байрам табынынан баш тартып, мосолманса табын ҡорорға тейеш инек. Иншалла, күптәр шулай итте лә.**

"Киске Өфө" гәзите коллективына килгәндә, беҙ, йылдағыса, Ҡорбан байрамында ҡорбан салдыҡ һәм редакциябыҙҙа аш табыны ҡорҙоҡ. Был ниәтебеҙҙе ғәмәлгә ашырырға, йылдағыса, Баймаҡ районы Буранбай ауылында йәшәүсе аҡһаҡал Ғүмәр ағай Үтәбаев ярҙам итте: бер һарығын беҙҙең исемдән Аллаһы Тәғәләгә арнап ҡорбан итеп салып, Өфө тарафтарына оҙатты. Рәхмәт уға!

Байрам табынындағы аштан редакция коллективы менән бергә Башҡортостан Республикаһы Диниә назараты рәйесе, мөфтөй Нурмөхәмәт хәҙрәт тә ауыҙ итте, Ҡөрьән аяттары уҡып, рухыбыҙҙы, күңелдәребеҙҙе сафландырҙы. Осрашыу иҫтәлеге итеп был көндә беҙ фотоға ла төштөк.

**Әйткәндәй, ошо табында "Киске Өфө" гәзите редакцияһы коллективы Өфөбеҙҙә төҙөләсәк Собор мәсете иҫәбенә бер көнлөк эш хаҡын күсерергә ҡарар итте.**



БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# Мәктәпле ауыл

**... хәҙер мәктәп ауылдарҙың мәҙәни йөҙөн билдәләгән берҙән-бер урын булып ҡала килә. Күп кенә клубтарға һалынған йоҙаҡтарҙы тут баҫты, тупһаларына кәҙә эйәләште. Был күренештең, минеңсә, өс сәбәбе бар.** Беренсенән, халыҡҡа массовый мәҙәниәт килтереү ихтыяжы юҡҡа сыҡты, икенсенән, Рәсәй Федерацияһының беренсе Президенты Борис Ельцин "Культура подождет", тип әйткәндән һуң мәҙәниәт ил сәйәсәтенең иғтибарынан бөтөнләй ситтә тороп ҡалды (иғтибар итегеҙ, "Милли проект" та культураның "К" хәрефе лә юҡ), өсөнсөнән, клуб функцияһын мәктәп үҙ өҫтөнә ала башланы, дөрөҫөрәге, был йөктө мәктәптең өҫтөнә һалдылар. Хәҙер күп кенә ауыл мәктәптәрендә йәштәрҙең һәм өлкәндәрҙең спорт ярыштары, мәҙәни саралары гөрләп уҙып тора. Мәктәбе бар ауылда хәҙер тәртип тә, мәҙәниәт тә бар.

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

ҮӘТ БИТ ӘЙ!

# ТОРМОШ САҒЫЛЫШЫ

**Юрий Леваданың Аналитика үҙәге (Левада-Үҙәк) Рәсәйҙең 46 төбәгенең 128 ҡасабаһында халыҡтан 2006 йыл һөҙөмтәләренә арналған һорау алыуҙар үткәрҙе.**

Яуаптарҙан күренеүенсә, рәсәйҙәрҙең яртыһынан күберәге (54 процент), ил өсөн 2006 йыл унан алдағы 2005 йылға оҡшаш булды, тип иҫәпләй. Халыҡтың 24 проценты 2006 йылда йәшәү унан алдағы йылға ҡарағанда еңелерәк булды тиһә, 22 процент өсөн ауыр йылдарҙың береһе тип баһалана.

Уҙған йылға төрлө социаль төркөмдәр түбәндәгесә баһа бирә: 47 процент, 2006-сы иң ярлы йыл ("аҙыҡ-түлеккә аҡса етмәй") булып хәтерҙә ҡаласаҡ, тиһә, 9 проценты ғына, былтыр еңел йәшәлде, тип иҫәпләй. Йәшәү кимәле яҡшы булған төркөмдәр ҙә йылды төрлөсә баһалай, ундайҙарҙың 20 проценты, 2006 йыл айырыуса ауыр килде, тиһә, 34 проценты уны сағыштырмаса еңел үткәреүенә ҡыуана.

2006 йыл бигерәк тә махсус белеме булмаған эшселәргә, йәше һәм инвалидлыҡ буйынса пенсияға сығыусыларға, эшһеҙҙәргә, ваҡытлыса эшкә урынлаша алмаусыларға ыҙалыраҡ йыл булһа, эшҡыуарҙар, етәкселәр, идарасылар, хәрби хеҙмәткәрҙәр, Эске эштәр министрлығы хеҙмәткәрҙәре, уҡыусылар һәм студенттар өсөн күпкә уңышлы килгән йылдарҙың береһе булған.

Шулай ҙа рәсәйҙәрҙең күбеһе, 62 проценты, 2006 йылда кирегә ҡарағанда ыңғай үҙгәрештәр күберәк булды, тигән баһа бирә. 2005 йылды тамамлағанда ла, ыңғай баһаға ҡарағанда киреләре күберәк булһа ла, рәсәйҙәрҙең 66 проценты уны уртаса йылдарҙың береһе тигәйне. Шуға күрә 2006 йылға ла башлыса "уртаса" тигән баһа бирелһә лә, күптәр белдереүенсә, ул 2005-кә ҡарағанда уңышлыраҡ йыл булған.

Киң мәғлүмәт сараларына ҡағылышлы (матбуғат, радио, телевидение) һорауҙарға яуап биреүселәрҙең яртыһынан күбеһенең фекере буйынса, был өлкәлә хәлдәр үҙгәрешһеҙ көйө ҡалһа, байтағы (24 процент) ыңғай һәм ҡалғандар (14 процент) насар яҡҡа үҙгәрҙе, тип иҫәпләй. Шулай уҡ тормошобоҙҙоң айырым өлкәләрендә хәлдәрҙең үтә насарайыуын билдәләүселәр өҫтөнлөк итә. Рәсәйҙәрҙең 39 проценты тирә-яҡ мөхиттең үҙгәрешһеҙ ҡалыуын билдәләһә, 6 проценты ҡәҙимге яҡшырҙы, ә 48 проценты бик тә насарайҙы, тигән баһа бирә. Йәмғиәтебеҙҙең башҡа өлкәләрендәге хәлдәргә баһа биргәндә, яуап биреүселәрҙең 36 проценты матди байлыҡты бүлеүҙә ғәҙелһеҙлек хөкөм һөрә, 33 проценты граждандарҙың шәхси хәүефһеҙлегенә ҡурҡыныс янай, 25 проценты ябай кешеләрҙең дәүләт эштәренә йоғонтоһо һиҙелмәй, 26 проценты дауаханалар, поликлиникалар эше ҡәнәғәтләнерлек түгел, 26 проценты яҡшы эш хаҡы алып эшләү мөмкинлеге юҡ, тип иҫәпләй.

**Шулай итеп, һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, 2006 йылда хәлдәр дөйөм алғанда "икмәк һәм тамашалар" өлкәһендә генә яҡшы яҡҡа үҙгәргән булып сыға.**

## Б Ә Л Ә К Ә Й Ҡ А М У С

# БЕЛМӘҺӘҢ-БЕЛ

### Бастилия төрмәһе

Бастилияны 1789 йылдың 14 июлендә француз халҡы яу менән баҫып ала һәм был ваҡиға бөйөк француз революцияһын башлап ебәрә. Бастилия ҡәлғәһе мөғжизә түгел, ә халыҡ яуына ҡаршы тора алмаған донъялағы берҙән-бер төрмә булараҡ та билдәлелек ала.

X1Y быуаттың икенсе яртыһында төҙөлгән был ҙур бина тәүҙә төрмә булмай, уны хәрби ҡәлғә сифатында файҙаланалар. 1370 йылда һалына башлаған ҡәлғә төҙөлөшө ун ике йыл үткәс кенә тамамлана. Ғәжәйеп ҙур һигеҙ башняны 30-ар метр бейеклектәге ҡалын стеналар тоташтырып тора. Ҡәлғәне уратып ҡаҙылған тәрән соҡор һыу менән тултырыла. Париждың көнсығыш өлөшөндәге ҡәлғә теләһә ниндәй дошман яуын кире ҡайтарырлыҡ итеп төҙөлә.

XY быуатта Париж йылдам үҫә башлай һәм ҡәлғә көндән-көн киңерәк йәйелгән ябай халыҡ, эшселәр һәм төрлө кәсепселәр йәшәгән кварталдарҙың уртаһында тороп ҡала.

Биш йәшендә генә тәхеткә ултырған король Людовик X1Y үҫкәнсе ил менән ваҡытлыса кардинал Мазарини хакимлыҡ итә. Мазариниҙы ил халҡы ла, королдең туғандары ла яратмай. Шуға күрә биш йәшлек король тәхетте биләргә тырышыуға бәйле төрлө ығы-зығы, ялған һүҙҙәр, фетнәләр солғауында үҫә һәм балиғ булғас та үҙен кескәйҙән ыҙалатҡан бөтөн туған-тумасаларын, Бастилияға бикләй.




Ә француз революцияһы тоҡанып, халыҡ уны баҫып алғанда төрмәлә ни бары һигеҙ генә кеше ҡалған була. Фетнәселәрҙең иһә уларҙа эше лә булмай, уларҙың маҡсаты ҡәлғә гарнизонын ҡоралһыҙландырып, дары һәм башҡа ҡоралдарҙы ҡулға төшөрөү була. Бер нисә йылдар үткәс, был тарихи ҡолманы һүтәләр һәм революция еңеүе иҫтәлеге итеп һаҡлар өсөн 1790 йылда һуңғы ташы тантаналы рәүештә Милли йыйылышҡа тапшырыла.

✓ ***Нисә йәштә баланың ҡулына аҡса тотторорға? Күптәр бала уҡырға төшкәс, ти. Психологтар билдәләүенсә, был йәшкә ҡарамай, ә баланың психологик өлгөрөүенә ҡарай.***



УЛЫМ, ҺИҢӘ ӘЙТӘМ...

# ҠАРТЛЫҠТЫ ӘРЛӘМӘ,

## уға ҡулайлаш

**"Ҡәҙерле редакция! Беҙ ғаиләбеҙҙә күмәк йәшәйбеҙ. Үҙ-ара татыубыҙ. Әммә өләсәйем һәр саҡ ниҙәндер ҡәнәғәт түгел, шул тиклем тыныс әсәйемдең ғәйебен табып, ризаһыҙлыҡ белдереп, мыжый ҙа йөрөй. Әсәйемде йәлләйем. Өләсәйем ни өсөн шулай икән? Олоғая килә һаман холҡо боҙола бара. Уның менән ниндәй мөғәмәләлә булырға?**

**Көнһылыу ЯХИНА".**

Көнһылыу ҡыҙым! Тәрбиәле бала икәнлегең хатыңдан, һорауыңдан уҡ күренеп тора. Һин өләсәйеңде ғәйепләмәйһең, уның холҡона төшөнөргә һәм "нисек мөғәмәлә итергә кәрәклеге" тураһында һорайһың. Был бик яҡшы.

Өләсәйең мәсьәләһенә килгәндә иһә, эш былай. Беренсенән, ҡартлыҡ - шатлыҡ түгел, тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Икенсенән, халыҡта тағы: "Етмеш, һиңә ни ҡылдым? Уртымдағы теште алдың, башымдағы һушты алдың",- тип тә әйтелә. Сәс ҡойолоу, теш төшөү, хәрәкәт һүлпәнәйеүе һәм башҡалар күҙгә күренгән үҙгәреш. Ундай үҙгәреште аңлатып тороуҙың кәрәге юҡ. Ә бына зиһен ҡаҡшауы, һуш алыныуы, холҡ боҙолоуы күҙгә күренмәй. Беҙ олоғая барған һайын ундай үҙгәрештәрҙең дә булыуы ихтимал икәнлеген күҙҙән ысҡындырабыҙ. Әлбиттә, төрлө кешегә ҡартлыҡ төрлөсә килә. Ул кешенең ҡанындағы булмышынан, яҡты донъяла йәшәү рәүешенән тора.

Ниндәй ғүмер кисергәнһең, ниндәй холҡло кешеләр менән аралашҡанһың, хыялдарың тормошҡа ашҡанмы, ҡәнәғәтһеҙлек ҡалмағанмы, яраҡкан кешең менән ғүмер иттеңме, әллә һөйгән йәрең ғүмерлек һағыш булып йөрәк башҡайыңа ҡан һауҙырҙымы, балаларың үҙеңә ҡарата итәғәтлеме, ирең рәнйетмәнеме... Ҡыҫҡаһы, ҡартлыҡ - ул йәш сағыңдағы йылдарыңдың сағылышы.

Ҡартлыҡтың тағы бер яғы бар: йәш саҡта маҡталған сифаттарыңдың ҡартайғас, киреһенсә, насар холҡ һымаҡ ҡабул ителеүе ихтимал. Талапсанлыҡ, үҙ һүҙеңде бирмәү, һаҡсыллыҡ (боронғо әйберҙәрен ташлатмау) һәм башҡалар.

Ҡарт кешене бағыу бала бағыуға ҡарағанда күпкә ҡатмарлы һәм ауыр.

Мейеләге һушты алыу, тигән һүҙ ҙә юҡтан әйтелмәгән. Мейенән һуш ҡына алынмай, мейе күҙәнәктәрендә бихисап үҙгәрештәр була. Уныһы ла беҙҙең өсөн ҡараңғы.

Әйтәһе һүҙҙең әрәсәһе шул: өлкән кешенең холҡон үҙгәртеп булмай, уға фәҡәт күнергә, яйын табырға, күп мыжыуҙарына иғтибар итмәҫкә, "ярай" тип, күндәмлек күрһәтергә кәрәк.

Нисек кенә булмаһын, беҙ ата-әсә алдындағы бурысыбыҙҙы үтәргә тейешбеҙ. Тик өлкәндәрҙе ҡағырға, рәнйетергә ярамай.

Ҡайһы бер ҡарыуы ҡайтҡан кешеләрҙең ҡарғауы ла ихтимал. Уларҙың ҡарғышынан ҡурҡмағыҙ, был зиһен үҙгәреше арҡаһында булыуы ихтимал. Кешегә телдән әйтелгән ҡарғыш төшмәй, кешенең "аһы" төшә.

Ҡарғыштың да, рәхмәттең дә төрлөһө була. Ысынлап та, рәхмәтле булып әйтелгән "рәхмәт" тә, әҙәп өсөн генә әйтелгәне лә була. Ҡарғыш та шуның һымаҡ. Ысын рәнйеү арҡаһында әйтеп ебәрелгәненең ҡоро тел "сарлап" әйтелгәне менән айырмаһы бар.

**Зилә БИКТИМЕРОВА.**

ЯҢЫ РУБРИКА: АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ

# БИШЕКТӘГЕ БАЛАҢ...

## биш доллар һораһа

**Кибеттә, баҙарҙа ата-әсәһенән яңы уйынсыҡ, йә булмаһа, тәм-том талап итеп илаған баланы йыш осратырға була. Ҡайһы бер ғаиләләрҙә улы йәки ҡыҙы өлкәндәрҙең кеҫәһенән аҡса урлап аптырата. Үҫмерлек осорона еткәндәре модалы кейем, телефон, автомобиль таптыра башлай. Хәҙерге заман сабыйы аҡсаның нимә икәнен белеп тыуа. Күп осраҡта тап аҡса арҡаһында бала һәм атай-әсәй араһында мөнәсәбәттәр ҡатмарлана. Шуның өсөн дә аҡсаға булған дөрөҫ мөнәсәбәтте балала кескәй саҡтан уҡ тәрбиәләү мөһим.**

Миҫал өсөн үҙемде килтерәм. Мин бала саҡта аҡса иҫәбен бөтөнләй белмәнем. Ҡаты, шар итеп өрөлмәй торған һағыҙ ул заманда биш тин тора ине. Шуға күрә, мин биш тиндәрҙе таный һәм уларҙы хөрмәт итә инем. Ҡалаға интернатҡа уҡырға киткәс, атай-әсәйем биргән аҡсаға үҙемә кәрәкле әйбер ҙә ала белмәй торғайным. Үҙ-үҙемде ҡарап, эшләй башлаһам да, аҡсаға ҡарата һаман да тейешле мөнәсәбәт тәрбиәләй алмайым. Эш хаҡым ҡулыма килеп керә лә, бармаҡ араһынан ағып юҡҡа сыға.

Көнбайышта балаларға аҡса биреү атай-әсәй теләге менән түгел, ә закон менән билдәләнгән. Мәҫәлән, Германияла 6 йәше тулмағандарға аҙна һайын 50 евроцент, 7 йәштәгеләргә 2 евро, 10 йәштәгеләргә - 10-12, ә 13-тә - 20 евроға тиклем аҡса бирелергә тейеш. Әгәр ҙә ата-әсә бик һаран булһа, бала кәрәкле инстанцияларға ялыу итеү хоҡуғына эйә.

Рәсәйҙә быndай закондар юҡ. Ләкин социологтар билдәләүенсә, беҙҙең илдә атай-әсәйҙәрҙең 70 проценты даими рәүештә балаларына аҡса бирә, ә 30 проценты быны кәрәкле, тип тапмай.

Психологтар әйтеүенсә, баланың ҡулына аҡса тотоу теләге һис тә насар түгел. Уның артында мөһим сәбәптәр йәшеренгән. Кеҫәһендә аҡса булыу балала үҙ-үҙенә ышаныс тойғоһо уята. Сөнки мәктәптә синыфташтары тәм-том һатып алғанда, улығыҙ йәки ҡыҙығыҙ был мөмкинлектән мәхрүм булһа, кәмһенеү тойғоһо барлыҡҡа килә. Шул уҡ ваҡытта балаға аҡса биреп, артыҡ шаштырырға ла ярамай. Сөнки артыҡ аҡса дуҫтары араһында баланың мин-минлеген үҫтереп ебәрә.

Үҙ аҡсаһы булған бала финанс менән идара итергә өйрәнә. Иҡтисадты теоретик яҡтан түгел, ә практикала төшөнөү отошло. Мәҫәлән, бер айға бирелгән аҡсаны бала һәр көнгә бүлеп, күпме тотоноуҙы планлаштыра. Ҡайһы берәүҙәре бер ни тиклем сумманы ҡара көндәргә, йә булмаһа, берәй нәмә һатып алыу өсөн йыя бара.

Шулай уҡ атай-әсәй биргән даими аҡсаның баланы үҙ аллы шәхес итеп тәрбиәләүҙә лә ҙур әһәмиәте бар. Күҙ алдына килтерегеҙ: ололарҙан инәлеп, ваҡ-төйәккә аҡса һорау уларҙы кәмһетә. Әлбиттә, ҡайһы бер атай-әсәй үҙаллылыҡты башҡа юл менән дә үҫтереп була, тип иҫәпләй. Мәҫәлән, баланы эшкә ебәреп. Сит илдә 13 йәшлек үҫмерҙең ваҡыты-ваҡыты менән эшләп алыуы тәбиғи күренеш. Финанс хәле ҡыҫынҡы ғаиләләрҙәге бала-саға ғына эшләй, тип уйлау хата. Күпселек осраҡта бай ғаиләләрҙә тәрбиәләнгәндәр ҙә финанс үҙаллылыҡ хаҡына тир түгә. Әлбиттә, был үҫмерҙәргә ҡағыла. Алты йәшлек баланы машина тәҙрәһе йыуырға, урам һепергә сығарып ебәреү башҡа һыймай. Шуның өсөн аҡса бәләкәйҙәргә атай-әсәй кеҫәһенән килергә тейеш. Сөнки бала үҙ аҡсаһы булыуы хаҡында бәләкәй йәштән уҡ хыяллана. Был уға өлкәнлек тойғоһо бирә. Ата-әсә баланың был тойғоһон үҙ файҙаһына ҡуллана ала. Өлкән булырға теләйһең икән, үҙеңде өлкәндәрсә тот, улар башҡарған эште башҡар: һауыт-һаба йыу, өйҙө йыйыштыр, магазинға йөрө.



Балаларға аҡса биреүҙең кәрәклеген иҫбатлаусы тағы бер факт килтерергә мөмкин. Кескәйҙәрҙең кеҫәһендә үҙ аҡсалары булыуы уларҙы урлашыу ғәҙәтенән ҡурсалай. Сөнки бик күп бала ололарҙың кеҫәләгенән аҡса урлап йонсотоусан.

Нисә йәштә баланың ҡулына аҡса тотторорға? Күптәр бала уҡырға төшкәс, ти. Психологтар билдәләүенсә, был йәшкә ҡарамай, ә баланың психологик өлгөрөүенә ҡарай. Ә быны ҡайҙан белергә һуң?

Бала аҡсаның ҡуктән яумауын, ә тир түгеп, тырышып эшләү емеше икәнен аңларға тейеш. Шул уҡ ваҡытта ул үҙенә бирелгән аҡсаны нимәгә тотонорға теләүен анык әйтеп бирергә лә бурыслы. Ата-әсәнең һәр ваҡыт аҡсаһы булмауын бала яҡшы аңларға һәм уларҙың финанс хәле ҡырҡыулашканда кеҫәһен ҡалынайтыуҙы талап итмәҫкә тейеш.

Шул уҡ ваҡытта бала менән ата-әсә араһындағы финанс мөнәсәбәттәрҙә тыйыуҙар ҙа бар.

Аҡсаны бер ваҡытта ла дәртләндереү сараһы итеп ҡулланырға ярамай. Улығыҙға физиканан "бишле" өсөн, ҡыҙығыҙға иҙән йыуған өсөн аҡса биреү киләсәктә бик насар һөҙөмтәләргә килтерергә мөмкин. Сөнки балағыҙҙың иң ябай эште лә түләүһеҙ эшләүҙән баш тартыуы бар. Ләкин ваҡ-төйәк эш өсөн аҡса бирмәгән хәлдә лә, сабыйығыҙҙың тормошонда бик ҙур ваҡиға булғанда, мәҫәлән олимпиадала еңеү, сиректе тик "бишле" билдәләренә тамамлау - ул ваҡытта аҡсалата бүләк бик урынлы булыр.

Аҡсаны язалау ҡоралы итеп файҙаланырға ярамай. Мәҫәлән, баланы насар билдә алған өсөн аҡсанан мәхрүм итеү яҡшы түгел. Иптәштәренә, ололарға насар мөғәмәләһе өсөн, әлбиттә, бирелә торған аҡсаның суммаһын бер ни тиклем кәметеү кәрәк. Баланы бөтөнләй аҡсанан өҙөүҙең тәрбиәүи һөҙөмтәһе булмаясаҡ. Бары тик кескәй кешенең күңелендә асыу һәм агрессия тоҡанасаҡ.

**Шулай уҡ финанс мөнәсәбәттәрҙең тағы бер яғы бар. Күп кенә өлкәндәр балаларға иғтибар биреп еткермәүен, аҡса менән ҡапларға тырыша. Тик кескәйҙәр оло кешенең мотивацияһын бик тиҙ аңлай һәм быны шантаж итеп ҡуллана. Бәләкәсегеҙ: "Һин ай буйына минең менән бер тапҡыр ҙа киноға барманың, шуның өсөн һинән 250 һум",- тип талап итһә, аптырарға урын юҡ. Аҡса, ҡиммәтле тәтәйҙәр, тәм-том балаға кәрәкле мөхәббәтте, йылы тойғоно бер нисек тә алыштыра алмай. Шуның өсөн бала тураһында хәстәрлекте аҡсаға ҡайтарып ҡалдырмағыҙ.**

**Тамсыгөл ДИҢГЕҘБАЕВА әҙерләне.**

## ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Адик ӨМӨТБАЕВ, ике бала атаһы, журналист:**

**$** Әгәр бала аҡса һорай икән, уға ниндәй маҡсатта тотонорға теләүен белгәндән һуң ғына бирергә мөмкин, тип иҫәпләйем. Үҙемә килгәндә, юғары синыфта уҡыған улымдың телефонына даими аҡса һалып торам, ә кәрәк нәмәһен алам тиһә, тиҙ генә үҙе йүнен таба һала. Ҡалала үҫкәндәрҙең, әлбиттә, аҡсаға мөнәсәбәте ауыл балаларыныҡынан ҡырҡа айырыла. Бер Өфөгә килгәнемдә дуҫымдың улына йомаҡ әйттем. Башланғыс синыфта уҡып йөрөгән малай миңә: "Яуабын тапһам, 50 һум аҡса бирәһеңме?- тип һалмаһынмы. Ғәжәпкә ҡалһам да: "Ярай, бирермен", - тинем. Теге малай көнөнә әллә нисә тапҡыр шылтыратып, миңә яуаптар яуҙыра. Бер ни тиклем ваҡыттан йомаҡты систе, аҡсаһын алды ла: "Йә, тағы йомаҡ әйт. Уныһының яуабы өсөн 100 һум түләрһең", - тине тыныс ҡына. Бала аҡсаға тиҙ өйрәнеп, ололарса фекер йөрөтә башлай. Минең уйымса, бала саҡ - иң бәхетле миҙгел, шуның өсөн аҡса менән уны ҡыҫҡартмаҫҡа кәрәк. Ни тиһәң дә, барлыҡ бәлә шул аҡсанан сыға.

**Зөбәржәт ШӘМСИТОВА, ҡыҙ үҫтерә, һатыусы:**

**$** Ғөмүмән, аҡса биреү-бирмәү һәр ғаиләлә ныҡлы уйлап хәл ителергә тейеш. Бөтөн балаға ла аҡса тоттороп сығарып ебәреү мөмкин түгел. Уға хатта бик бәләкәй сумманы бирер алдынан аҡсаға дөрөҫ ҡараш тәрбиәләү кәрәк. Бала бер ваҡытта ла аҡсаны иң юғары ҡиммәт, тип һанарға тейеш түгел. Мин кибеттә эшләгәс, иғтибар итәм: бот буйы бала-саға кеҫә тултырып аҡса йөрөтә. Кәрәкмәгән нәмәләр - һағыҙ, кәнфит, шаҡы - шоҡо ала. Ҡайҙа ҡарай был ололар? Ярай, бөгөн ул сабый аҡсаһына кока-кола, чипсы алды, ә үҫкәс, иртәгә... тәмәке, араҡы, наркотиктармы? Шуны күреп, йәнем көйә. Шунса йәшкә тиклем кескәйҙәрҙе ата-әсәһеҙ кибеттә хеҙмәтләндермәҫкә, тигән ҡарар ҡабул итергә кәрәк, тип уйлайым

**Гөлиә ИШМӘТОВА, бер ҡыҙ һәм ул әсәһе, уҡытыусы:**

**$** Ҡала шарттарында балаға юллыҡ һәм тамаҡ ялғарлыҡ аҡса бирмәү мөмкин түгел. Аллаға шөкөр, минең балаларым аҡсаның күктән яумауын, уҡытыусының эш хаҡы бәләкәй булыуын яҡшы аңлай, миңә шуны ал, быны ал тип, бер ҡасан мыжымайҙар. Ҡыҙым бер-ике йыл рәттән маркетинг селтәрендә эшләй. Мин ҡаршы килмәйем, әйҙә, аҡса эшләү серҙәренә төшөнөп үҫһен. Улымды ла иҫәп-хисапты өйрәнһен тип, мәктәпкә төшмәҫ элек үк икмәк-һөткә яңғыҙын йөрөттөм. Баланы артыҡ аҡса ла, уның булмауы ла боҙа. Шуның өсөн бала бәләкәй саҡтан уҡ аҡсаны табырға ла, аҡыл менән тотона белергә лә өйрәнергә тейеш.

***✓ Атайымдың ғәрәпсә уҡый-яҙа белгәнен яҡшы хәтерләйем. Ул малай саҡтан уҡ ҡул эшенә, бигерәк тә бәке менән ағас һырларға бик оҫта була. Тирмән ҡулсаларын, күсәрҙәрен, шестерняларын ҡарағастан яһай.***

ЯҢЫ РУБРИКА: “АТАЙЫМ”



***"Инәй" һүҙе "әсәй"ҙән боронғораҡтыр. Сөнки "инәй"ҙең нигеҙендә һәр баланың донъяға яралғандағы өн-ауазы "эң-ңә", әсәһенән имсәк таптырғандағы "имәм", "мәмәй" ята. Сабый лөғәтендәге икенсе "атай" һүҙе "ат"ҡа (атҡа атланып һунарға йөрөүсе кеше), "атыу"ға (уҡ атып, ашарға алып ҡайтыусы кеше), исем атауға (фамилиялар атайҙан алынған) бәйлелер. Нисек кенә булмаһын, "инәй", "әсәй", "атай" һүҙҙәрен әҙәм балаһы ғүмере буйына бер туҡтауһыҙ ҡабатлай.***

***Гәзит битендә ошо һандан "Атайым" рубрикаһын башлайбыҙ. "Атанан күргән уҡ юнған" тиҙәр. Һәр кемдең үҙенә тормош бүләк итеүсе, яҙмыш юлына төшөрөүсе, тормош атына атландырыусы атаһы хаҡында башҡаларға фәһем булырҙай, ғорурланып һөйләрлек һүҙҙәре була. Рубрикалағы мәҡәләләр бына ошо хаҡта булыр тип уйлайбыҙ.***

***Баймаҡ районының Төрөкмән ауылы янындағы Туғажман тауында торған ҡурайға ҡуйылған һәйкәлде күргәнегеҙ бармы? Донъяла музыка ҡоралына ҡуйылған иң ҙур һәйкәл Гиннес китабына ингән. Уның авторы кем, тип уйлайһығыҙ? Ошо төбәктә тыуып үҫкән үҙенсәлекле шәхес, рәссам һәм шағир, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре, Б. Вәлид исемендәге премия лауреаты Миҙхәт Байрамғолов. Миҙхәт ағай үҙлегенән генә ана шулай танылған ҡыҙыҡлы шәхес булып тыумаған. Уның атаһы Байрамғолов Әсфәндиәр Ибраһим улы (1878-1938) хаҡында яҙғандарын уҡығандан һуң шулай уйлайбыҙ. "Атайым" рубрикаһын асып, бисмиллаға, Миҙхәт ағайҙың ошо мәҡәләһен тәҡдим итәбеҙ. Сират һеҙгә, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ, атайығыҙ хаҡында яҙып ебәрегеҙ беҙгә.***

# ЕТМЕШ ТӨРЛӨ ҺӨНӘРЛЕ...

## ир-егет өлгөһө ул

Бөрйән ырыуына ҡараған Күсей ауылының Ай-һайҙар араһындағы Гөләндәм һәм Ибраһим Байрамғоловтарҙың өс балаһы була: өлкән улдары Әхмәҙей, икенсеһе - атайым Әсфәндиәр, кесеһе ҡыҙ бала - Асия. Йорттары мәсеттең көньяғында урынлаша. Әхмәҙей башлы-күҙле булып, башҡа сыҡҡас, уның янына атайым нигеҙ ҡора. Улар иген сәсмәй, күпләп мал тота, һыу тирмәндәре лә була. Бүрәнә, таҡта әҙерләп, уны игенгә алмаштырып кәсеп итәләр. Йәйләү урындары Күсей янындағы Мәмилә туғайы була, ул урын тәүҙә Ибраһим йәйләүе, аҙаҡ Әсфәндиәр йәйләүе тип йөрөтөлә. Бөгөн ауыл байрамдары, һабантуйы шунда үтә.

Ибраһим олатайҙың өс балаһы ла ауылда белем ала. Атайымдың ғәрәпсә уҡый-яҙа белгәнен яҡшы хәтерләйем. Ул малай саҡтан уҡ ҡул эшенә, бигерәк тә бәке менән ағас һырларға бик оҫта була. Тирмән ҡулсаларын, күсәрҙәрен, шестерняларын ҡарағастан яһай атайым. Бынан тыш, ул ағастан һауыт-һаба, бүкән, өҫтәл, һандыҡ, шкаф, тәҙрә рамдары, өй ҡыйығы кәрниздәре эшләй, ҡапҡаларҙы семәрләп биҙәй. Ҡайын оролары уның сихри ҡулы тейгәндән һуң табаҡ, туҫтаҡ, ижау, киле-төйгөстәр һынын ала. Атайым арба, сана эшләгән, арба тәгәрмәстәрен үҙе бөккән. Арбаны талдан ситәүкә менән көпләгән, кәрәкле тимер деталдәрҙе лә үҙе әҙерләгән. Төрлө ҙурлыҡтағы тәгәрмәстәр, дуғалар, көйәнтәләр бөккән.

Тырыш атайым алтын да йыуған, Рәмиевтар менән яҡындан аралашҡан. Тапҡан алтынын ҡайҙалыр алып барып, аҡсаға, әйбергә алмаштырыр булған. Кәсебенән алтын-көмөш менән биҙәлгән һауыт-һаба, башҡа затлы әйберҙәр тейәп ҡайтҡан. Үҙен "купец" тип тә атағандар. Әйткәндәй, һуғыш осоронда мин атайҙан ҡалған гәлсәрҙән эшләнгән алтын ялатылған ике ишек тотҡаһын үҙ ҡулым менән өс кило иткә алыштырҙым.

Бер ваҡыт атайым ҡара камзол, ҡара плащ һәм түбәтәй кейеп ҡайта. Кейеме нәҡ Туҡайҙыҡы кеүек була. Ауыл халҡы уны күреп: "Әсмәндиәр татар күписе булған", - тип көлә.

1921 йылғы йот йылында тирмәндәре йүнләп эшләй алмай. Иген дә булмай, тирмәнде әйләндереүсе һыу ағымы ла кәмей. Артабанғы йылдарҙа иген уңа башлағас, он һалдырыусылар ҙа күбәйә. Бер тирмән өлгөрә алмағас, атайым йылғаның шәберәк ағымлы түбән яғындараҡ бәләкәй тирмән ҡора. Һыу кәмеп, тирмән әйләнмәй башлаһа, уға беркетелгән ҡулайламаға үгеҙ егеп әйләндереү мөмкинлеге лә булған.

***Тырыш атайым алтын да йыуған, Рәмиевтар менән яҡындан аралашҡан. Тапҡан алтынын ҡайҙалыр алып барып, аҡсаға, әйбергә алмаштырыр булған. Кәсебенән алтын-көмөш менән биҙәлгән һауыт-һаба, башҡа затлы әйберҙәр тейәп ҡайтҡан. Үҙен "купец" тип тә атағандар. Әйткәндәй, һуғыш осоронда мин атайҙан ҡалған гәлсәрҙән эшләнгән алтын ялатылған ике ишек тотҡаһын үҙ ҡулым менән өс кило иткә алыштырҙым.***

Кулактарҙы әҙәрлекләү, ситкә һөрөү сәйәсәте башлана. Уға эләгерен алдан һиҙенгән атайым 1930 йылдың бер төнөндә бар донъяһын ташлай ҙа, алырға мөмкин булған әйберҙәрен арбаһына тейәп, Баҡырүҙәк приискыһына күсеп китә. Унда Әбүбәкеров фамилияһы менән балта оҫтаһы булып эш башлай. Бында ул Өмөтбаев Ғимран (яҙыусы Рамаҙан Өмөтбаевтың атаһы), Яруллин Ғарифуллалар менән бергә эшләй. Эҙәрлекләүҙәрҙән ҡасып, ул бер мәлде Ибраһимов фамилияһы менән дә йөрөй. Нисек булһа ла, кулактарҙы һөрөү фажиғәһенә эләкмәй. Ә Күсей ауылындағы һигеҙ мөйөшлө өйө, таш һарайы, ике тирмәне һәм башҡа әйберҙәре эйәһеҙ тороп ҡалып, һуңынан колхоз мөлкәтенә күсә. Күпмелер алтыны һәм аҡсалары ла күмелеп ятып ҡала.

Баҡырүҙәктә лә атайым оҫталыҡ кәсебен дауам итә. Ситәндән йәтеш кенә итеп үреп яһалған оҫтаханаһында ҙур бер һандығы булыр ине. Һандыҡ эсендә күмер өрҙөрөү күреге, ағас ҡырғыс, тараҡ яһау станогы, башҡа хеҙмәт ҡоралдары ята торғайны. Уның хеҙмәт ҡоралдарының үткерлеген ҡәйнеше Сө-нәғәт Байбулов "Һаҡал-мыйыҡ етеп китһә, Әс-мәндиәр еҙнәнең балтаһы менән ҡыраһың да ҡуяһың", тип баһалай.

1932 йылда атайым миңә ағастан өс тәгәрмәсле самокат эшләп биргән. Тик мин сабый ғына көйө уның менән йөрөй алмағанмын, уның ҡарауы, күрше малайҙар рәхәтләнгән. Бер аҙ үҫә төшкәс, ул самокаттың алғы тәгәрмәсен этеп уйнағаным хәтерҙә. Урамыбыҙҙа ҙур сәңгелдәк торор ине, уға ике-өс малай атланып, әүһәләк өйөр инек.

Атайым нимә генә эшләмәһен, өҫтәлме, ултырғысмы, шкафмы, йөйҙәре һәм ҡаҙауҙары күренмәҫ ине. Иң ҡыҙыҡ эштәренең береһе - ел тирмәне. Ел тирмәне әйләнеп тора, тик ул тирмән итеп файҙаланылмай, тирмән урынына бысҡы ҡуйып, ағас бысып ҡарауын әсәйем һөйләй торғайны. Күсем ауылы мәсетенең манараһын да атайым биҙәгән, тиҙәр. Манараны ҡолатҡанда атайымдың күҙҙәре йәшләнеүен дә әсәйем һөйләне. 1935 йылда мәсетте клубҡа әйләндергәндә лә атайымды саҡыралар. Ул сәхнә, залдың артҡы яғына балкон эшләп китә. Колхозға ферма төҙөргә лә атайым ярҙамға килә.

Атайымдың оҫталығына тағы бер миҫал. Күсей ауылы хәҙрәте Фәйзулла үҙе тере саҡта атайымдан ҡәбер ташы эшләтеп ҡуя. Бының өсөн ул 3-4 метр оҙонлоғондағы ташты дүрткел формаға килтерә, ике яғын да шымартып, ғәрәпсә аяттар яҙа. Ул ҡәбер ташы бөгөн дә Күсей зыяратында тора. Ер өҫтөндә - ике метр, ер аҫтында ла шул сама. Хәҙрәттең үлеү датаһы - 1927 йыл. Был ташты миңә атайым үҙе күрһәтте. Һуғыштан алда ул таш йәшел төҫтә ине. Хәрефтәре бер яғында алтын, икенсе яғында көмөш буяуҙар менән буялған ине. Бөгөн төҫтәр һаҡланмаған. Яҙыу оҫталығына, грамотаһына ҡарағанда, атайым оҫта ла, белемле лә булған, тип уйлайым. Ташҡа соҡолған ай һәм йондоҙҙар формалары геометрик яҡтан бик дөрөҫ үлсәмдәр менән башҡарылған. Атайым оҫта һунарсы ла ине, ике мылтығы булды. Ҡышҡыһын ҡуян, төлкө, сел, йәйгеһен өйрәктәр алып ҡайта ине.

**Миҙхәт БАЙРАМҒОЛОВ.**
Баймаҡ ҡалаһы.

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Үҙемдең хәтерләүҙәрем, әсәйемдең һәм башҡаларҙың һөйләүе буйынса, атайымды шулай үҙ заманының Кулибины итеп күҙ алдына килтерәм һәм иҫкә алам. Атайым башҡарған эштәрҙең күбеһен хәҙер инде үҙем дә башҡара алам. Миңә һигеҙ йәш кенә тулғанда донъя ҡуйһа ла, миңә унан күп нәмә күсеп, һеңеп ҡалған. Атайым миңә уҡытыусы ла булған. Уҡырға бармаҫ элек латин хәрефтәре менән яҙа ала инем, уҡый белдем. Бөгөн дә атайым рухы менән йәшәйем, уның ярҙамын һәр саҡ тоям.**

ЗАМАН ШАУҠЫМЫ

# Әсәләр яңғыҙы ғына...

## бала баға

**Хәҙер ҡыҙ-ҡатындарҙың ҡайһы берҙәре, никахҡа инмәйенсә, баланы "үҙе өсөн" генә табыуҙы ғәҙәт итеп алды һәм быны ыңғай күренеш кеүек ҡабул итә, үҙҙәрен яуаплы аҙымға әҙер, тип һанай. Бала тәрбиәләүҙә атай кешенең кәрәге юҡ, тип уйлай улар. Ирҙәр ҙә бала тәрбиәләүгә артыҡ иғтибар итеп бармай. Атай бар ҙа, юҡ та һымаҡ: йә ул аҡса эшләү һылтауы менән оҙаҡ ваҡыттар ситтә йөрөй, йә гәзит тотоп, диванда ята, йә көндәр буйы телевизор ҡарай, йә компьютер төбөнән китмәй. Өйҙә булған хәлдә лә, күп ирҙәр бала тәрбиәләүҙә бөтөнләй ҡатнашмай. Шунан ҡайҙан ғына малайҙар ысын ир-азамат булып үҫһен инде?**

Республика социаль-психологик ярҙам үҙәге педагог-психологы Светлана Ҡаһарманова әйтеүенсә, бөгөн ирлек сифаттары әҙ булған инфантиль ирҙәр бик күп. Ҡағиҙә буларак, улар атайһыҙ ғаиләлә тәрбиәләнә, "ысын ир" моделен күрмәй үҫә. Әсәй кеше ниндәй генә яҡшы тәрбиәсе булмаһын, атайҙы алмаштыра алмай. Әммә, дөрөҫөн әйтергә кәрәк, тормошта шундай ситуациялар ҙа була: атайҙың булмауы күпкә хәйерлерәк...

Тағы бер сәйер күренеште билдәләп үтергә кәрәк: күп ғаиләләрҙә атай ҙа, әсәй ҙә тик әсәйлек функцияһын башҡара, өйҙә "ике әсәй" мәж килә - атай юҡ. Имсәк балаға ике әсәй булды ни ҙә, бер әсәй булды ни, ә бына үҫә килә, уға атай кәрәк була башлай.

Айырылған ҡатындар элекке ирҙәренә балаһын тәрбиәләүҙе генә түгел, уны балаға бөтөнләй яҡынайтмаҫҡа тырыша. Әгәр ҡатын кеше ваҡытында нәҡ шул ирҙән бала табырға ҡарар ҡабул иткән икән, тимәк, ул уның яҡшы яҡтарын күргәндер бит. Нисек кенә булмаһын, бала өсөн дә атай һәр ваҡыт берҙән-бер атай булып ҡала. Быны онотorға ярамай - психологтар шулай кәңәш итә.

Ә инде булдыҡһыҙ атай кеше ғаиләне ташлап ҡасҡан осраҡта ни эшләргә? Светлана Ҡаһарманованың фекеренсә, балалар атайҙарының барлығын белергә, уның холоҡ-фиғеле тураһында мәғлүмәтле булырға тейеш. Балаға атаһы тураһында һөйләүҙән тартынырға ярамай. Һеҙ һөйләгеҙ, ә бала үҙе хәл итер - ғәҙәттә, бала күңеле яңылышмай.

Атай менән бала айырым йәшәп, уларға осрашыу мөмкинлеге булмаған хәлдә лә, бәйләнеш өҙөлмәҫкә тейеш. Бала үҙенең әсәйҙән башҡа атайға ла кәрәклеген белеп үҫһә, тулы ҡанлы була. Мәҫәлән, бөгөнгө көндә телефон бәйләнеше бының өсөн бик ҡулай. Тик әсәй кеше был осраҡта атай менән бала араһындағы мөнәсәбәткә ҡыҫылмаҫҡа, үҙен аралашсы итеп тоймаҫҡа, баланы атаһына ҡаршы ҡотортмаҫҡа тейеш. Бала атай еҫен тоймаһа ла, тауышын булһа ла ишетһен, сөнки уның өсөн әсәй ҡурсалаусы тыныс өй һымаҡ, ә атай үҙаллы йәшәй тоған тышҡы тормош билдәһе.

Бөгөн атайҙар тик аҡса килтереүсе сығанаҡ һымаҡ ҡына ҡабул ителә, тәрбиә иһә, әсәй-өләсәйҙәргә ҡағыла. Элек бит атай кеше туйҙырыусы ғына булмаған, рухи сығанаҡ та булған, унан үрнәк алғандар, уға тиң булырға тырышҡандар. "Меҫкен атай"ҙан кем үрнәк алһын инде. Әсәй кеше күңеле менән тик ҡурсалай ғына, һаҡлаусы бурысы борон-борондан атайҙар ҡулында булған. Атайһыҙ ғаилә - һаҡлаусыһыҙ ғаилә.

**"Атайһыҙ - ул, әсәйһеҙ ҡыҙ үҫтермә", ти халыҡ мәҡәле. Бөгөн атайһыҙ ул да, ҡыҙ ҙа үҫтереүе - ғәҙәти хәл. Әммә шуны онотмау хәйерле: уның емештәре әсе булырға ла мөмкин бит.**

**Галина БАХШИЕВА.**
**“БАШвестЪ”.**

✓Ҡасандыр үпкәләткән кешеңдең күҙенә туп-тура ҡарап, ғәфү үтенеүе, әлбиттә, бик мәслихәт күренеш. Тик күптәребеҙҙең был аҙымды яһарға ҡыйыулығы етмәҫ.



ЯҢЫ РУБРИКА: "ҒӘФҮ ИТ!"

# Үкенес тойғоһонан...

## ҡотолоу өсөн

**"Ғәфү ит, мине", тигән һүҙҙе әйтеүе еңелдән түгел. Сөнки хаталарыңды таныу, үҙ ҡылығыңа тәнҡит күҙлегенән ҡарау ихтыяр көсө, айыҡ аҡыл талап итә. Тормошта төрлө хәлдәр була. Яңылыш ҡына ауыр һүҙ әйтеп, ярамаған эш ҡылып, тирә-йүндәгеләрҙең йөрәктәренә яра һалабыҙ, күңелен ҡыябыҙ. Булмышыбыҙҙың иң түренә инеп оялаған үкенес тойғоһо намыҫты игәп, тыныслыҡ бирмәһә, ҡотолоу юлы тәүбәгә килеп, бер-беребеҙҙән ғәфү үтенеүҙә. Тик нисек итеп? Ҡасандыр үпкәләткән кешеңдең күҙенә туп-тура ҡарап, ғәфү үтенеүе, әлбиттә, бик мәслихәт күренеш. Тик күптәребеҙҙең был аҙымды яһарға ҡыйыулығы етмәҫ. Ошоно иҫәпкә алып, яратҡан гәзитегеҙҙә "Ғәфү ит" тигән яңы рубрика асырға булдыҡ. Йәберләгән кешегеҙ һеҙҙең үкенес тойғоһон "Киске Өфө" аша ишетһен - ғәфү үтенегеҙ. Яңы йылда үкенес тойғоһо, ауыр уйҙар менән йәшәмәйек, дуҫтар. Шулай уҡ бөтөн дуҫтарығыҙ, яҡындарығыҙ ҙа бындай ҡыйыу аҙымдың шаһиты булыр.**

Ғинуар айы яҡынлашһа, күңелемдә бала саҡ хәтирәләре яңыра. Юнир менән дыу килеп тауҙан шыуыу, һарай башынан көрткә һикереү, эттәрҙе санаға егеп йөрөү иҫкә төшә. Юнир минең ике туған ағайым, иң яҡын балалыҡ дуҫым, шулай уҡ ун бер йыл бер парта артында ултырған синыфташым да. Хәтирәләр менән бергә уға ҡарата ҡылған этлегем иҫемдә яңыра һәм күңел төпкөлөндә бына нисәмә йылдар һаҡланған үкенес тойғоһо терелә. Мин оятымдан ни эшләргә белмәй башлайым. Ә иң ҡыҙығы - Юнир уға ҡарата ҡылған аламалығымды бөтөнләй белмәй. Ул белмәгәнлектән миңә икеләтә уңайһыҙ һәм оят. Беҙ хәҙер элекке кеүек бәләкәй түгел, ағайымдың ҡыҙы һәм улы йүгереп йөрөй. Тик йылдар төпкөлөндә ҡалған ваҡиға мине һаман намыҫ утында көйҙөрә.

Ғинуарҙың уртаһында Юнирҙың тыуған көнө. Беҙ бөтөн ғаиләбеҙ менән йыл да уны ҡотларға барабыҙ. Атай-әсәйем ағайыма бүләк һатып ала ла, минән йәшереп бүләк итә. Аҙаҡ Юнир менән икәүләп тыуған көндә бирелгән бөтөн бүләктәрҙе ҡарайбыҙ, әммә атайым менән әсәйемдең бүләген барыбер белмәй ҡалам. Күрәһең, атай-әсәйем Юниргә алған әйберҙе мин дә талап итермен, тип уйлағандыр - балаларҙың холҡо шулайыраҡ бит инде.

Беренсе синыфта уҡыған йылды, Юнирҙың тыуған көнө алдынан, өй эсендә бутанып йөрөгәндә кейем шкафы башынан ялтыр ҡағыҙға төрөлгән ҡумта табып алдым. Асып ҡараһам, унда күҙ яуын алырлыҡ Буратино ҡурсаҡ, төҫлө ҡәләмдәр, линейка, юйғыс ята. Был Юниргә алынған бүләк икәнен аңланым, шунда уҡ миңә бик ҡыйын булып китте. Ни өсөн атайым кеше улына ошондай матур нәмәләр бирергә тейеш? Бынау ҡәләмдәр, мозаикалы линейка, ҡурсаҡ үҙ ҡыҙына кәрәкмәҫ, тип уйлай микән? Шулай уйлай-уйлай, Буратино менән рәхәтләнеп уйнаным, ҡәләмдәр менән һүрәт төшөрҙөм, линейка менән ҡағыҙҙан туптар аттым. Юҡ, мин бер нисек тә был бүләкте Юнирға бирә алмайым. Тик атайым уны миңә лә ҡалдырмаҫ. Әйҙә, уға ла булмаһын, миңә лә. Линейканы уртаға һындырҙым, Буратиноның ҡулын сәйнәнем, ә буяу ҡәләмдәренең осон тешләнем.

Атай-әсәйемдән арыу ғына эләкте миңә. Тик ул ваҡытта ҡылған эшемдең яуызлығын төшөнмәнем. Әрләүҙәренә ҡарамаҫтан, үҙүҙемдән ҡәнәғәт ҡалдым. Өлкәнәйгәс, аҡыл ултырғас ҡына аңлап, был ваҡиғаны күңелемә оҙаҡ йылдарға үкенес итеп бикләнем.

**Юнирҙың тыуған көнө алдынан бынан ике тиҫтә йыл элек эшләгән яуызлығым өсөн ғәфү үтенгем килә. Һине Буратиноһыҙ, матур линейкаһыҙ, буяу ҡәләмһеҙ иткәнем өсөн ғәфү ит, ағайым! Ҡасандыр минең арҡала эләкмәгән бүләкте быйыл ағайыма үҙем тапшырырмын. Юнирға уларҙың хәҙер кәрәге булмаһа ла, балалары ҡыуаныр, тип ышанам.**

**Ләйсән СӘЛИМОВА.**

# ТӘРБИӘ

## китаптан

**Буталсыҡ яҙмыш юлдары боролошонда бер-береңде осратаһың да, мөкиббән ғашиҡ булып, мәңге бергә булырға анттар әйтеп, ғаилә ҡораһың. Әммә был - башы ғына. Мәңгелек һөйөү иленә илтеүсе юлдары ауыр һәм ҡатмарлы уның. Көндәлек мәшәҡәттәр, ваҡ-төйәк араһында иң изге хистәр ҙә тупаҫланып, юғалып ҡалыусан. Оло мөхәббәт тураһында тормош "һурпаһын" бергәләп эсеп, балалар үҫтергәс, бер-береңде һанағас һөйләү урынлыраҡтыр, моғайын. БР Хөкүмәтенең ЗАГС-тар идаралығы начальнигы Рәмилә Наил ҡыҙы һәм "Башҡортостан" телерадиокомпанияһының радиотапшырыуҙар цехы начальнигы Динар Ҡәнзәфәр улы ЙОМАҒУЖИНдарҙың татыу, күркәм, мөхәббәтле ғаиләһенә ҡорға саҡырам һеҙҙе. Бергәләшеп, уларҙың мәктәп йылдарында тоҡанған хистәренең үҫешен, студент йылдарында ҡорған ояларының уңыш, бәхет серҙәрен, тормошҡа ҡараштарын тыңлайыҡ әле.**

**▶ Рәмилә апай, Динар ағай, икегеҙ ике өлкәлә эшләйһегеҙ, эштән ҡайтҡас, һөйләшер уртаҡ темаларығыҙ нимәнән ғибәрәт? Бер-берегеҙҙән йәшерен серҙәрегеҙ бармы?**

**ДИНАР:** Беҙ өйләнешеп йәшәй башлағас та уҡ бер-беребеҙҙең эшен хөрмәт итергә, бер-беребеҙгә ҡамасауламаҫҡа, киреһенсә, ярҙам, терәк-таяныс булырға һөйләштек. Өс тиҫтә йыл ғүмер бергә йәшәгән ир менән ҡатын өсөн уртаҡ темалар бихисап инде ул: балалар, көнитмеш, буш ваҡытты планлаштырыу, көн дә тыуып торған проблемаларҙы хәл итеү, һ.б. Ә серҙәргә килгәндә, дәүләт хеҙмәткәре булараҡ, Рәмиләнең серҙәре булырға тейештер инде ул, ошоно аңлағанлыҡтан, артыҡ һорауҙар менән йонсотмаҫҡа тырышабыҙ.

**РӘМИЛӘ:** Динар минең тормош иптәшем генә түгел, рухташым, фекерҙәшем дә. Башҡа ғаиләләрҙәге кеүек, беҙҙә лә мәшәҡәттәр етерлек, тимәк, уртаҡ темалар ҙа тулып ята. Әммә беҙ бер ваҡытта ла эш урынындағы хәбәрҙәрҙе һәм кәйефте өйгә алып ҡайтмаҫҡа тырышабыҙ.

**▶ Гәзит уҡыусыларҙы, улар мәктәп йылдарынан уҡ таныш, тип, ҡыҙыҡһындырып өлгөрҙөм инде. Әйҙәгеҙ, хәтер ебен тағатып, шул матур йылдарға ҡайтып урайыҡ...**

**РӘМИЛӘ:** Беҙҙең тәүге танышыу мәле йылдар артында ҡалһа ла, барыһы ла бөгөнгөләй хәтерҙә. Мин Учалы районы Кәрим ауылы ҡыҙы, 8-се синыфты тамамлап, Мәсәғүт педучилищеһының 3-сө курсында уҡып йөрөйөм. Дыуан районындағы башҡорт ауылдарының береһе Арыйға беҙҙе мәктәпкә практикаға йөрөтәләр. Ҡара көҙ көнөндә батҡаҡ кисеп, клубтағы бер концерттан һуң әхирәтем менән фатирға ҡайтып килә инек, ике егет тағылып алды. Тиҙ-тиҙ генә өйгә инеп китергә булғайныҡ, ҙур ҡапҡаны асып булманы ла ҡуйҙы. Хәтһеҙ генә ваҡыт теге малайҙар менән ишек алдында тартҡылашып, әрләшеп торҙоҡ. Хатта ҡараңғыла бер-беребеҙҙең йөҙҙәрен дә күрмәгәс, исемдәрҙе лә әйтмәгәс, иртәгәһен мәктәптә мин уны таныманым.

**ДИНАР:** Ул егеттәрҙең береһе Арый мәктәбенең 11-сы синыф уҡыусыһы мин инем. Рәмиләне иртәгәһен мин дә таныманым. Сөнки концерт ваҡытында дуҫ егеткә Рәмиләнең әхирәте оҡшаған да, мине, тегеһе менән һин танышырһың, тип, иптәшлеккә алды. Ҡыҙҙар инеп китмәһен, тип, фатирҙарының ҡапҡаһын алдан барып бикләп килдек. Икенсе көндө теге ҡыҙҙың кемлеген малайҙарҙан һорап белдем. Рәмиләне күрһәткәйнеләр, күңелем ятты ла ҡуйҙы. Шунан артынан саба башланым. Рәмилә ҡыйыу ҙа, уҫал да, шаян да, аҡыллы ла ҡыҙ ине...

**РӘМИЛӘ:** Динар бик ныҡышмал, алдына ҡуйған маҡсатына ирешеүсән булды. Минең ҡаршылашыуыма, ҡасып ҡалыуыма, урыныма икенсе ҡыҙҙар сығарып ҡыуҙырыуыма ҡарамай, беҙҙең яҡка юлды тапауын дауам итте. Мин уҡыуымды бөтөп, БДУ-ның филология факультетына уҡырға индем, ә Динар армияға китте. Хеҙмәтен тултырып ҡайтҡас, радиотехникумға уҡырға инде. Студент осоронда өйләнештек. Ике йылдан Рөстәм улыбыҙ тыуҙы. Минең алда уҡыуымды туҡтатып тороп, академик отпуск алыу мәсьәләһе тыуғас, ирем бар ауырлыкты үҙ өҫтөнә алды. Техникумды тамамланы ла, бәләкәй бала менән Дыуан районына ҡайтып, Мәсәғүт радиотелеаппаратуралар ремонтлау заводында эш башланы.

**ДИНАР:** Рөстәмде ҡарарға әсәйем менән атайым ихлас ярҙам итте. Рәмилә лә йыш ҡайтырға тырышты. Мин Рәмиләнең уҡыуға теләге ни тиклем көслө булыуын белә инем. Ул бик ныҡышмал, теләгәнен тормошҡа ашырмайынса, тынысланмай. Аҙаҡ, Өфөгә күсеп, яуаплы эштә эшләүенә, ике бала әсәһе булыуына, донья мәшәҡәттәренә ҡарамай, үҙенең юридик белемгә эйә булырға, тигән балалыҡ хыялын да тормошҡа ашырҙы ул.

**▶ Ғаилә булғас, төрлө хәлдәр була, һауыт-һаба ла шылтырамай тормайҙыр. Ошондай ваҡытта ҡатын менән ир араһында ҡупҡан "дауылды" нисегерәк тынысландыраһығыҙ?**

**РӘМИЛӘ:** Мин бер ваҡытта ла асыуымды оҙаҡ һаҡлап, кенә тотоп йөрөй алмайым. Әйтер һүҙемде урынында ярып әйтәм. Бер төрлө һөйләп, икенсе төрлө эшләп, өсөнсө төрлө уйлап йәшәй алмайым. Ә Динарға килгәндә, ул һәр ваҡыт сабыр булды, тауыш күтәреп, нимәлер талап итеп ултырғанын иҫләмәйем. Бер ваҡытта ла һинең эш, минең эш, тип бүлешмәй.

**ДИНАР:** Ауыр һүҙ йөрәкте яралай, мәңгелеккә эҙен ҡалдыра. Бер-береңде ғәфү иткән хәлдә лә улар онотолмай. Һүҙ менән, бигерәк тә аламаһы менән, һаҡ булырға кәрәк. Минең асыуым килһә, кәйефем насар булһа, бындай ваҡытымды үткәреү өсөн башҡа эш менән булыша башлайым. Тын алыуы иркенәйгәс, асыу алҡымдан ебәргәс, һәр нәмә үҙ урынына баҫа, донъя яҡтыра. Ҡайһылыр мәлдә өндәшмәүең мең алтын бит.

**▶ Сер булмаһа, әйтегеҙ әле, ғүмер барышында, бергә йәшәү дәүерендә тормош юлдашығыҙ үҙгәрҙеме?**

**ДИНАР:** Минең ҡатыным һәм балаларымдың әсәһе үҙгәрмәне, ә бына йәмғиәттәге Рәмилә үҫте, яңы уңыштарға өлгәште. Уның эшенә, халҡына булған фиҙакәр, эскерһеҙ хеҙмәте, үҙ һүҙенә, эшенә тоғролоғо миндә ғорурлыҡ та, һоҡланыу ҙа уята, хатта аптырата ла. Үҙенә йөкмәтелгән һәр бурысты үтә етди, ҙур яуаплылыҡ менән ҡабул итә белә. Дәүләт эшенә утыҙ йыл ғүмерен бағышланы, ваҡы-



***✓Атайымды республикала йырсы Наил тип беләләр. 1955 йылда Мәскәүҙә үткән Башҡортостан мәҙәниәте һәм әҙәбиәте декадаһында башҡорт халыҡ йыры "Урал"ды йырлап, тамашасыларҙың һушын ала.***

# АЛЫМЫБЫҘ уҡылған түгел

тын, көсөн, һаулығын йәлләмәне. Ә ғаиләлә ҡатыным бергә йәшәй башлаған көндәгесә яғымлы, иғтибарлы. Үткән йылдар уны матурайта һәм байыта ғына.

**РӘМИЛӘ:** Динарҙы ла артыҡ үҙгәрҙе, тип әйтә алмайым. Бәлки, ул ғүмер үткән һайын тәжрибәлерәк, аҡыллыраҡ була баралыр. Мин уны көндән-көн тәрәнерәк хөрмәт итәм. Сөнки тормоштағы күп уңыштарым, яҙмышымдың иң яҡты юлдары тик Динарҙың ярҙамы менән тыуҙы.

**▶ Һеҙҙең ғаиләгеҙ өсөн иң ауыры нимә булды?**

**РӘМИЛӘ:** БДУ-ны тамамлағас, Дыуан районына ҡайттым һәм башкөллө эшкә сумдым. Гәзиттә журналист булып башлағайным, аҙаҡ төрлө баҫҡыстар буйлап килеп, район башҡарма комитеты секретары вазифаһында эшләнем. Төрлө йәмәғәт эштәрен йөкләнем. Бындай әүҙем тормоштоң, әлбиттә, ауырлыҡтары була инде ул, әммә шулар араһындағы бәхетле минуттар ул ауырлыҡтарҙы оноттора. Мәҫәлән, тап ошо ығы-зығы араһында тормошобоҙға йәм өҫтәп, ҡыҙыбыҙ Ләйсән тыуҙы. Тик миңә бер көн дә декретта ултырыу тәтемәне, эшкә сыҡтым. Ҡыҙымды күршеләрем ҡарашты, Ләйсән дә сәләмәт булды - ауырып йонсотманы. Динарҙың да эше тынғыһыҙ, завод етәксеһе итеп үрләттеләр. Икәүләшеп бер туҡтауһыҙ командировкаларҙа йөрөйбөҙ. Ауыл ерен үҙегеҙ беләһегеҙ, икешәр һыйыр, 20-шәр ҡаҙ-өйрәк, ваҡ мал-тыуар, баҡса, умарталар... Ярай әле, балалар үҙаллы булып үҫте. Рөстәм Ләйсәнде балалар баҡсаһына йөрөттө, үҙенсә ҡарарға ярҙам итте.

**▶ Ун ете йыл ауыл тормошо менән йәшәгәндән һуң, ҡалаға күскәнһегеҙ. Был ҡарарҙы кем ҡабул итте?**

**ДИНАР:** Донъя ҡорған ояңды, яратҡан эшеңде, дуҫиштәреңде ташлап, бөтөнләй сит мөхиттә йәшәй башлауы еңел буламы ни инде ул? Барыһы ла балалар хаҡына, уларҙың киләсәге өсөн эшләнде. Рөстәм 9-сы класты тамамлап, Өфөләге Статистика колледжына уҡырға китте. Ләйсәнебеҙ ҙә Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Республика башҡорт гимназия-интернатына уҡырға барырға теләк белдерҙе. Балалар менән бергә булып, терәк-таяныс булайыҡ, тинек тә, үҙебеҙ ҙә Өфөгә күсергә хәл иттек.

**РӘМИЛӘ:** Мин дә, ғүмерҙәренең иң яуаплы мәлендә балалар янында булырға тейешмен, тинем. Ауыл мөхитендә үҫкән балаларҙы төрлө хәүеф-хәтәр һағалап ҙур ҡалаға ни йөрәк менән сығарып ебәрергә мөмкин? Эштән китеү тураһында һүҙ ҡуҙғатҡас, хәлемә инеп, баш ҡалаға эшкә күсереү мәсьәләһен хәл иттеләр. 1995 йылда Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға беренсе тапҡыр депутаттар һайлау үтте. Законға ярашлы, ике палата булдырылды. Ошо өлкәлә тәжрибәле белгестәр кәрәк булғас, мине Дәүләт Йыйылышы Секретариатына эшкә саҡырҙылар. Динар "Башҡортостан" телерадиокампанияһына эшкә урынлашты.

**ДИНАР:** Тәүҙә фатирһыҙ интектек. Килеп тороп ауылды һағындыра. Аҙна һайын тиерлек ауыл менән ҡала юлын тапай торғайныҡ. Иркенлек, саф һауа, күрше-күлән, хатта эт менән бесәйебеҙҙе лә һағына инек. Ерҙе һағыныу тойғоһон баҫыр өсөн баҡса һатып алдыҡ. Аҙағыраҡ фатирлы ла булдыҡ. Балалар матур итеп уҡып китте. Улыбыҙ Рөстәм БДУ-ның юридик факультетында белем алып, уңышлы эшләп йөрөй. Ә Ләйсәнебеҙ ошо уҡ уҡыу йортоноң иҡтисад факультетын ҡыҙыл дипломға тамамлап, шулай уҡ яратҡан һөнәре буйынса эшләй. Ошо уңыштарҙы барлайбыҙ ҙа, Өфөгә күсеүебеҙ юҡҡа булмаған, тигән фекергә киләбеҙ.

***Тәрбиә тураһында томдар уҡып ултырырға икебеҙҙең дә ваҡыт булманы. Атай-олатайҙар тәжрибәһенә таяндыҡ. Сөнки бала аяғында ныҡ баҫып тороу өсөн үҙ тамырҙарын белергә, рухлы булырға тейеш. Рәмиләнең балаларға һөйләгән әкиәттәре, йырлаған йырҙары, башҡорт телендә генә аралашыу быуаттар аша килгән бәйләнеште нығытты.***

**▶ Рәмилә апай, Динар ағай, ошондай һоҡланғыс ғаилә ҡороу өлгөһө барыбер ҙә үҙегеҙ үҫкән мөхиттән, ата-әсәйегеҙҙән киләлер...**

**РӘМИЛӘ:** Минең атайым ябай көтөүсе, иҫ киткес оло йөрәкле кеше ине, әсәйем менән биш бала тәрбиәләп үҫтерҙе улар. Атайымды республикала йырсы Наил тип беләләр. 1955 йылда Мәскәүҙә үткән Башҡортостан мәҙәниәте һәм әҙәбиәте декадаһында башҡорт халыҡ йыры "Урал"ды йырлап, тамашасыларҙың һушын ала. Уның башҡарыуындағы йырҙар радио фондында һаҡлана. Әсәйем Роза ла моңға битараф булманы. Дәртле, татыу, балалар яратҡан, башҡорт рухлы ғаиләлә үҫтем мин. Әсәйемдең тол килеш биш баланы аяҡҡа баҫтырыуы, киң, йомарт күңеле, кешелекле һәм сабыр булыуы һәр саҡ һоҡланыу, уға оҡшау теләген уятты. Мин уның кәңәштәренә ҡолаҡ һалып, ярҙамын тойоп йәшәнем. Ҡәҙерле кешебеҙ тәрбиәләгән берҙәмлек, үҙ-ара татыулыҡ туғандар араһында әле лә бик көслө. Динарҙың атай-әсәһе тураһында мин тик йылы һүҙҙәр генә әйтә алам. Иремдең күркәм холҡона, тәрбиәле, ябай булыуына ҡарап ҡына ла, уларҙың ғаиләһененң ниндәй булыуын күҙ алдына килтерергә мөмкин.

**ДИНАР:** Рәмилә үҙе лә атай-әсәһенән моңло тауышты мираҫ итеп алған. Ул профессиональ кимәлдә, йөрәккә үтерлек итеп халыҡ йырҙарын башҡара. Күңелендә булған тойғоларын шиғыр юлдарына һала. Уның шиғырҙарына Радик Вәлмөхәмәтов көйҙәр ижад итеп, үҙ репертуарына индергән.

**▶ Рәмилә апай, һеҙ ғалимә лә - юридик фәндәр кандидаты. Тормошта үҙ урынын тапҡан, эшендә тулыһынса үҙен асҡан кешегә фән юлы ни өсөн кәрәк булды?**

**РӘМИЛӘ:** Бер ваҡытта ла үҙ өҫтөңдә эшләүҙән, эҙләнеүҙән туҡтарға ярамай. БР Конституция Судында эшләгәндә минең етәксем Ирек Шәрип улы Мөксинов диплом темаһын диссертация итеп яҙырға тәҡдим итте. Яҙылған хеҙмәтемде күп ҡаршылыҡтарҙы еңеп, финиш һыҙығына еткерергә көс таптым. Беҙҙең халыҡҡа ғалимдар ҙа бик кәрәк. Уҡырға бер ҡасан да һуң түгел. Балаларыма ла кәңәшем шул. Ләйсән менән Рөстәмдең белемгә, фәнгә ынтылышы мине бик ҡыуандыра.

**▶ Ләйсән менән Рөстәмде ниндәйерәк алымдарға, принциптарға таянып тәрбиәләнегеҙ?**

**ДИНАР:** Тәрбиә тураһында томдар уҡып ултырырға икебеҙҙең дә ваҡыт булманы. Атай-олатайҙар тәжрибәһенә таяндыҡ. Сөнки бала аяғында ныҡ баҫып тороу өсөн үҙ тамырҙарын белергә, рухлы булырға тейеш. Рәмиләнең балаларға һөйләгән әкиәттәре, йырлаған йырҙары, башҡорт телендә генә аралашыу быуаттар аша килгән бәйләнеште нығытты. Шул уҡ ваҡытта атай-әсәнең өлгөһө, уларҙың ҡылыҡтары, үҙ-үҙен тотошо бала күңелендә мәңгелеккә уйыла. Беҙ ҙә балаларҙы тормошта үҙаллы булырға, бәләкәйҙән мөһим ҡарарҙар ҡабул итергә өйрәттек. Ләйсән менән Рөстәм бер ваҡытта ла беҙҙең итәккә йәбешеп, арҡаға ышыҡланып ултырманы. Эш яратырға өйрәттек. Ауылда торғас, икеһе лә бар эште еренә еткереп үтәй белде. Өй-ҡаралтылағы ремонтты ла Рөстәм менән икәүләп эшләнек. Бөгөнгө көндә бер ҡыйыҡ аҫтында өс ғаилә йәшәйбеҙ, килен менән кейәүебеҙ ҙә үҙебеҙҙең балалар кеүек инсафлы, итәғәтле, тырыш, беҙҙең өсөн өҙөлөп торалар.

**РӘМИЛӘ:** Иғтибар иткәнһегеҙҙер, беҙ йортто ҡыҙым сиккән ҡул эштәре менән биҙәгәнбеҙ. Ләйсән сигеүгә лә, бәйләмгә, тегеүгә лә бик оҫта. Беҙгә кейем-һалымды ла ул тегә, ҡыҫҡарта, кәрәгенсә ремонтлай.

**▶ Балала башҡорт рухы тәрбиәләү нимәнән башлана?**

**РӘМИЛӘ:** Туған телдә аралашыуҙан. Йорт тупһаһынан, интерьерҙан, ғаиләнең һулаған һауаһынан, ашаған ашынан башлана, тиер инем. Элек-электән өйҙә башҡорт халҡының орнаменттары, биҙәктәре төшөрөлгән йыһаздар булды. Шулай уҡ уҡ-һаҙаҡ, Салауат образы, ҡурай төшөрөлгән картиналар, сувенирҙар ҙа күп. Китап шкафыбыҙ башҡорт халыҡ фольклоры, тарихы хаҡындағы китаптар менән тулы. Өй китапханаһын башҡорт авторҙарының яңынан-яңы әҫәрҙәре менән байытып торабыҙ. Театр, концерттарға йөрөү, халҡыбыҙға хас ғөрөф-ғәҙәттәрҙе үтәү тураһында һүҙ ҙә юҡ.

**ДИНАР:** Минекеләр башҡорт моңон телевизор, радио аша ғына түгел, ә әсәһе, өләсәһе башҡарыуында ла тыңлап, күңеленә һеңдереп үҫте. Башҡорт рухы ана шул туған моң аша ла тәрбиәләнә инде ул.

**Ләйсән ИСҠУЖИНА әңгәмә ҡорҙо.**

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Рәмилә һәм Динар Йомағужиндарҙың матур ғаиләһе менән "Киске Өфө" гәзите уҡыусыларын таныштырыу теләген әйткәс, Рәмилә апай: "Ҡуй, һеңлем, беҙ бит яп-ябай ғаилә, башҡаларҙан бер нәмә менән дә айырылмайбыҙ. Әллә ниндәй маҡтаулы исемдәребеҙ ҙә юҡ. Лайыҡлыраҡ ғаиләләр аҙмы ни, шулар тураһында яҙығыҙ", - тине. Эш бит маҡтаулы исемдә түгел. Эш үҙеңдән һуң халыҡҡа хеҙмәт итерҙәй, халыҡҡа лайыҡ булырҙай балалар ҡалдырыуҙа һәм тәрбиәләүҙә. Гәзитебеҙҙәге ошо "Ғаилә ҡоро" рубрикаһының маҡсаты ла тап ошондай ғаиләләр өлгөһө тураһында һөйләү. Һеҙҙең арала ла бармы ундай ғаиләләр, хәбәр итегеҙ беҙгә.**

ШАҢДАУ

# Илен яратҡан ғына илен күтәрер

**Таһир Ишкининдың СССР-ҙың юҡҡа сығыуына 15 йыл тулыуға арнап яҙылған "Ҡайғырманыҡ та, ҡыуанманыҡ та..." тигән мәҡәләһен уҡып сыҡҡас, халыҡ араһында киң таралған бер көләмәс иҫемә төштө. Имеш, Л. И. Брежнев үлер алдынан: "Мине әйләндергеләп яфаланмаҫ өсөн йөҙтүбән ерләгеҙ, сөнки артымды үбер хәлгә етәсәкһегеҙ әле", - тигән. Был көләмәсте башлыса торғонлоҡ йылдарындағы тормошто һағыныусы оло йәштәгеләр һөйләргә ярата.**

Кешегә күңел тыныслығы ҡиммәтерәк бит. Бөгөн тормош алға барған һайын, күңелде тағы ла шомлораҡ ҡурҡыу баҫа. СССР-ҙың емерелеүенә йәмәғәтселек битараф ҡалды, тигән һүҙҙәр менән килешмәйем. Был урында "битараф" һүҙе урынына "халыҡ ҡаушап ҡалды" тиеү дөрөҫөрәк булыр, сөнки алда ниндәй тормош көткәнен бер кем бер ваҡытта ла белмәй.

Бер аҡыл эйәһе: "Үҙен аҡыллымын тип һанаған кешегә ил менән идара итергә юл ҡуйырға ярамай, сөнки ундай әҙәм тормошто яңыртам, тип, барыһын да емерә, үҙгәртә. Ундай әҙәм илен, халҡын түгел, ә тарихта ҡаласаҡ исемен генә ҡайғырта",- тигән. Дөрөҫ әйткән. Шундайҙар емерҙе бит СССР-ҙы ла. Партия власының иң юғары урындарын биләгән әҙәмдәрҙең байлыҡта, муллыҡта шашып үҫкән балалары емерҙе. Улар сит илдәрҙә халыҡ аҡсаһына белем алған чубайстар, гайдарҙар, кохтар һәм башҡалар булыр. Сит илдән улар Тыуған иленә нәфрәт тойғоһо менән әйләнеп ҡайтты түгелме ни?

Сираттағы "Аҙна шаңдауы"н уҡып сыҡтым да, 2008 йылда буласаҡ Рәсәй президентын һайлар көндәр яҡынлашыуын уйлап, тағы тетрәнеп ҡуйҙым. Шунда Рәшит Шәкүрҙең бер шиғыры иҫкә төштө:

Малин-ҡала, малин-ҡала...
Берәү үргә менеп бара,
Бик күптәрҙе еңеп бара,
Элеп алып, һелкеп һала.
Әммә еңеп бөткәс кенә,
Тауға менеп еткәс кенә
Кемдер уны төртә уңдан,
Кемдер уны төртә һулдан.
Һырғалаҡта алыш бара,
Берәү үргә менеп бара.
Берәү, ана, елбер-елбер,
Түбән таба елеп бара...

**Шул "ҡар тауындағы" малайҙар уйынындай шул хәҙер һайлауҙар. Ил халҡының фекеренә ҡолаҡ һалмайынса, юғарылағы ығы-зығылар менән президент та һайланыр. Тик үҙ Ватанын, халҡын күрә алмаусылар ғына власҡа килә күрмәһен, Аллам һаҡлаһын.**

**Фәүзиә ЯХИНА.**

✓**Өс айға тиклем бүҫер ҡорт башындай ғына була, уны халыкта "сабый бүҫер" тиҙәр һәм уны "сабый" сағында, йәғни өс айға тиклем имләмәһәң, ул йәнләнә, тиҙәр.**



ИМ-ТОМ

# БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАЛАРЫ

**Бүҫерле баланы имләү**

Йәш балаларҙың күбеһе бүҫерле була. Бүҫере булһа, бала ал-ял белмәй илай. Уның кендеге ҙурая, күгәрә. Өс айға тиклем бүҫер ҡорт башындай ғына була, уны халыкта "сабый бүҫер" тиҙәр һәм уны "сабый" сағында, йәғни өс айға тиклем имләмәһәң, ул йәнләнә, тиҙәр. "Сабый бүҫер"ҙе хәрәттән өшкөртеп алған таш менән төрткөләп бөтөрөп була икән. Шул таш менән бүҫер доғаһын укып төрткөләһәң, бүҫер йәнләнмәй, тиҙәр. Балаға өс ай булғас, бүҫер йәнләнә һәм баланың эсендә йөрөй башлай. Бүҫер кендек, сандыр, күкрәк пәрҙәһе, баш һәм арка мейеләренә лә барып етә, тиҙәр. Бүҫер ҡайһы ерҙә йөрөй, баланың шул ере ауырта икән. Төҫө буйынса ҡара, аҡ, һары була икән.

**Бүҫергә доға яҙып эсереү**

Бүҫергә доға яҙып та эсерәләр. Химик ҡәләм менән дәфтәргә боронғоса доғаһын яҙалар. Шул яҙыуҙы шәшке аҫтына ғына һалалар ҙа, һыу ҡойоп, иҙеп кенә балаға эсерәләр.

**Аятел көрси яҙып эсереү**

Баланың бүҫере булһа, сынаяҡ аҫтына көмөш ҡара, ҡағаҙ, еләк һыуы менән "Аятел көрси" доғаһын яҙып эсерәләр. Шулай итеп имләһәң, бүҫере бөтә.

**Бүҫер әпсене**

Тоҙло һыуҙы ошондай әпсен менән өшкөрөп, балаға бөрккәндәр:

Аҡ болот ҡырында
Аҡ тәкә,
Күк болот ҡырында
Күк тәкә,
Ҡара болот ҡырында
Ҡара тәкә.
Мөгөҙҙәре күктә,
Ҡойроғо ерҙә.
Уларҙың эсен
Ҡасан бүҫер ашаһа,
Шул сакта, был
Балаға бүҫер йәбешһен.

**Ойоҡбаш менән имләү**

Дим буйы башҡорттары баланың бүҫере булһа, атаһының ойоҡбашы менән төрткөләп, түбәндәге әпсенде укып ҡыуғандар:

Ай ҡайтты,
Көн ҡайтты,
(Фәләндең) бүҫере шиңһен!
Тфү, тфү, тфү!

**Ҡара һыйыр һөтө имеҙеү**

Ҡариҙел, Аҫҡын башҡорттарында бүҫерле балаға ҡара һыйыр һөтөн имеҙеп, ҙурыраҡ бала булһа, аҡ май ашатып, эсен һыйпап, түбәндәге әпсенде әйтеп имләгәндәр:

Аҡ бүҫер, ҡара бүҫер,
Һары бүҫер, ҡарт бүҫер,
Ҡарт булһаң да, ят, бүҫер.
Бысаҡ менән һуйырмын,
Салғы менән ҡыйырмын!
Аҡ бүҫер, ҡара бүҫер,
Кит, бүҫер, кит, бүҫер!

**Һарыҡ майы эсереү**

Ышаныуҙар буйынса, май эстә туңа һәм бүҫерҙе йөрөтмәй. Май эсергәндә түбәндәге әпсенде лә әйтәләр:

Туң май нисек туңа,
Шулай урыныңда ят, бүҫер!
Һары бүҫер, аҡ бүҫер,
Урыныңда ҡат, бүҫер!

**"Башҡорттарҙың им-том китабы"нан.**

# Бер мискә дегет



**(Мәҙәк хикәйә)**

Суска фермаһы эргәһенән йә мәрйә ҡыҙҙары янынан үткән сакта һәр ваҡыт "Бисмилла, йә Илаһи илла Алла", тип укынып үтә торғайным. Әсәйем мине шулай өйрәтте. Ә ул - мулла ҡыҙы.

Шулай йөрөй торғас, әллә Хоҙай мине яңылыш аңланы, әллә ен-пәрейҙәр бутаны, суска караусы Даша тигән сибәр ҡыҙға ғашиҡ булдым да ҡуйҙым. Мәрйә, ишшу етмәһә, суска ҡарай - икеләтә гонаһ. Түҙ, йөрәгем, түҙ инде! Йөрәк түҙә буламы һуң...

Сибәр тигәнем, сибәрлектән ары торорлок, күҙ яуын алырлык шул. Күҙҙәре ут кеүек. Сәстәре күҙҙәренән, билдәре түштәренән, түштәре аяктарынан, ҡыҫҡаһы, ыһм... ҡашыкка һалып йоторлок.

Май айындағы ҡаймаҡ төҫлө аҡ йөҙлө, йоморо, һөйкөмлө, теремек кенә йән. Ҡулда ғына йөрөтөрлөк суска бәрәсеме ни. Тьфү, әпәт суска, әстәғәфирулла...

Уйланып, уфтанып йөрөнөм-йөрөнөм дә, бер көн түҙемлек сигенә сыҡып, әсәйемә әйтеп һалдым:

- Дашка исемле килен алып ҡайтам...

- Әстәғәфирулла, ташка өйләнмәһәң, кыҙҙар бөткәнме һиңә, - тине әсәйем.

Тамам төшөнкөлеккә биреләм. Ғишыҡ уты көн дә йөрәкте өтә, сыҙар әмәл юк.

- Бөгөн Дашканың атаһы менән әсәһе ҡалаға ҡунаҡка киттеләр, – Тимерйән дуҫымдың хәбәре бөтөнләй һушты алды.

Ул минең Дашаға ғашиҡ булып йөрөүемде күптән белә. Кис икәүләп Дашкаларҙың өйөнә барырға һүҙ ҡуйыштыҡ, сөнки "бисмилла"ның ни икәнен дә белмәгән Тимерйән күҙ атып йөрөгән Люба исемле кыҙ кис уларҙа булырға тейеш икән.

Дашканың атаһы Кириллов бабай ат һарайында йүгән, ышлыя, дилбегә кеүек ат егеү корамалдары әтмәләп, уларҙы дегеткә майлап йомшартыу, төҙәтеү менән шөғөлләнә. Шуға уны "шорник Кирюха" тип йөрөтәләр. Ул хатта өйөндә лә шул яраткан шөғөлө менән булаша. Ауылда иң кәрәкле кеше һанала Кириллов бабай.

Атайым Фирғәнәгә ҡунаҡка барғанда алып ҡайтҡан аҡ салбарым менән аҡ күлдәгемде кейеп, урамға сыҡҡанда өй тәҙрәләрендә һукыр шәм яктылары күренә башлағайны. Тимерйән менән татлы хыялдарға биреләп, йылғаны аша сыҡҡанды ла, суска фермаһы эргәһенән үтеп, Дашкалар өйөнә килеп еткәндә лә һиҙмәй ҡалғанбыҙ.

- Фу! - тине Тимерйән, суска фермаһы яғына ымлап. - Яратмайым шул суска еҫен.

Мин өндәшмәнем, сөнки Дашканы күреү өсөн килгәндә ул еҫтән хушбуй еҫенә бәрәбәр икәнен әйтеп булмай бит инде.

Дашкаларҙың өйө дүрт стеналы. Талдан үреп эшләнгән ситән соланы мал тиҙәге менән һыланған, түбәһе һалам менән ябылған.

Солан ишеген ипләп кенә тартып караныҡ, асылмай - эстән бикләнгән. Тукылдатып, тауыш биреп караныҡ - яуап биреүсе юк. Тимерйән тәҙрәгә барып тукылдатып та караны - шып-шым.

- Әйҙә, солан башынан төшәйек, - тип ҡотортто ул мине.

Ғашиҡ кеше оҙаҡ уйлаймы ни ул - бер минут үтеүгә, апаҡ кейемемде лә йәлләп тормайынса, солан башындағы һаламды актара инем. Ниәтем - солан эсенә төшөп, ишекте эс яктан асыу.

Бәүелеү тынысланғансы, солан түбәһенең урҙаһында аҫылынып торҙом да, берәй нәмәгә ҡаҙалып ҡуймайым, тип, турараҡ төшергә тырышып, ҡулдарҙы ысҡындырҙым... Аҫҡа төҙ генә төшөүен-төштөм дә ул, тик тәнем, ни ғәжәптәндер, әҫеле-һыуыҡлы булып китте. Был куркыныс урындан тиҙерәк ҡоторлайым, тип, аяғымды ҡалҡыткайным, нимәгәлер төртөлөп, ҡолап киттем. Тиҙ генә аяғүрә баҫа һалып, Тимерйәнде индереү өсөн солан ишегенән тышка сыктым. Мине күргәс, Тимерйәндең ике күҙе лә тулы айҙай ҙурайҙы, ауыҙын услаптай итеп, бик сәйер тауыш менән ҡыскырып ебәрҙе лә, һә, тигәнсе ситән аша һикереп, картуф баҡсаһын тапай-тапай, әллә ҡайҙа олакты. Мин аптыраштан улай-былай һикерәңләй торғас, салбарымдың төҫө аҡ түгеллегенә иғтибар иттем. Әммә ләкин салбар ҡайғыһы юк - бысранғандыр. Тимерйәнгә ни булды, ниңә ул хәтлем итеп ҡысҡырҙы ул? Шул сакта ғына үҙемә иғтибар иттем. Йә, Хоҙай! Мин, күрәһең, "шорник Кирюха"ның соландағы дегет тултырылған ҙур ағас мискәһенә төшеп, шуның менән ҡуша ҡолағанмын... Баштан-аяк, бит-башыма тиклем дегеткә буялып - әле генә ап-аҡ кейемле кеше ҡап-ҡара булып, кире килеп сыҡҡанмын. Нисек Тимерйәндең йөрәге ярылмаған тиң! (һүҙҙән алға китеп әйтеп үтәйем: ҡото осҡан уның шулай ҙа - ғүмер буйы аҡ менән ҡара төҫтә бутап ыҙаланы. Ҡот ҡойҙороп ҡараһалар ҙа, файҙаһы теймәне: гелән "суска төшөп" тик торҙо).

Тиҙ генә дегетле аяктарымды һөйрәп, юлда осраған ситән кәртәләрҙе буяй-буяй, Тимерйән артынан йылға буйына һыпырттым. Йыуынып тороуҙың файҙаһы юк ине, кейемдәрҙе сисеп, йылғаға ағыҙып ебәрергә тура килде.

Кеше-маҙар күҙенә күренмәй, картуфлыктар аша ғына килеп, гармунсы Әхиәрҙең кейемдәрен кейеп ҡайтырға тура килде. Кейеме-кейем дә ул, ә бына баштағы таҙартып алыуға бер йыллыҡ "Ленинсе" гәзитенең подшивкаһы әрәм булды. Гәзиттән башка, ул дегет тигән нәмә бер төрлө һабынға ла бирешмәй икән дә...

Әйткәндәй, бер ҡалаҡ дегет бер мискә балды буяй, тиҙәр. Буш һүҙ. Хатта бер мискә дегет минең балды, балалы ғүмеремде буяй алманы: ҡатыным менән икәүләп, дегет кеүек ҡарасман ике ул, һөттәй аҡ ике ҡыҙ үстерҙек.

Тик шуныһы үкенеслерәк: бөгөнгө көн булһа, һәр балаға 250-әр мең һум акса алып, миллионер булыр инек. Бер уйлаһаң, эш аксаламы ни - танауыма дегет еҫе бәрелһә, йәш сактарыма ҡайтҡандай булам, әле лә үҙемде егеттәр кеүек тоям... Әммә әсәйемдең һүҙҙәрен һис онотмайым: йәш сактағы ваҡиғанан һуң суска фермаһынан йә мәрйәләр янынан үткән сакта ике тапкыр "Бисмилла, йә Илаһи илла Алла", тип укынып үтәм...

**Роберт ҒИМРАНОВ,**
Әбйәлил районы.

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

## Тәүҙә үҙеңде уйла

Бер көндө күҙ алдарым караңғыланып, башым әйләнеп, үҙемде быға тиклем бер тапкыр ҙа булмағанса насар тойҙом. Отпускыһыҙниеҙ эшләү һөҙөмтәһе булғандыр инде. Кисенә врач әхирәтем шылтырата. Хәлемде һөйләп тә бөтмәнем, пыр туҙҙырып, әрләп ташланы:"Һин нимә эшләйһең? Аяктан йығылһаң, кемгә кәрәгең буласаҡ? Кем өсөн йәшәйһең һин?"

Шунан һөйләп китә: "Ауырыуҙарыма ла шул һорауҙы бирәм: "Кем өсөн йәшәйһең һин?"- тим. Барыһы ла: "Балам өсөн йәшәйем", - ти. "Ауырыу көйө һин балаңа кәрәкме һуң, йә уға һәйбәт буламы? Һиңә яҡшы булһа ғына балаңа ла яҡшы була бит", тим".

Әхирәтемдең һүҙҙәренән һуң, әлбиттә, уйландым. Бер риүәйәт тә бар бит. Сүллектә балаһын йөкмәп, әсә китеп бара. Һауытында ике тамсы ғына һыуы ҡалған. Һуңғы тамсы һыуҙы әсә кеше, әлбиттә, балаһына эсерә. Һуңынан һыуһыҙан үҙе лә үлә, балаһы ла һәләк була. Баяғы һыуҙы эсеп, балаһын йөкмәп ары атлаһа, икеһе лә ҡотолор ине лә бит.

Әхирәтемдең "Иң тәүҙә һин үҙеңде уйла", тиеүе дөрөҫ шул: миңә яҡшы булһа, минең балаларыма ла яҡшы буласаҡ таһа!

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

**✓ *Йырҙың һүҙҙәренә ҡарағанда, көйө нығыраҡ әсир итә. Йыр тексы шул рәүешле тарала һәм йәшәй бирә. Был күренеш, әлбиттә, шәптән түгел һәм хатаны үҙ ваҡытында төҙәтеү хәйерле.***

*АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО*




## СОВЕТСКИЙ ЧЕРТ

Был хәл Сирғол ауылында булған. Бер көн кис бабайы әбейенә гәзиттә баҫылған "Советский черт" тигән мәҡәләне уҡып ишеттергән. Унда ошондай ваҡиға яҙылған була.

Һәр айҙың пенсия алған көнөндә бер әбейгә битенә маска кейгән берәү инеп, унан аҡса таптыра икән. Әбейҙең:

"Һин кем?" - тигән һорауына, ул: "Советский черт", - тип яуаплай икән. Аҙаҡ әбей милицияға хәбәр иткәс, төнөн аңдып тороп, теге "Советский черт"ты тоталар. Ул - әбейҙең күршеһе булып сыға. "Шайтан" ер аҫтынан әбейҙең баҙына тиклем юл ҡаҙған икән...

Шундай әкәмәтте уҡып, әбей менән бабай йоҡларға ята. Ҡурҡыштарынан хатта ҡунаҡҡа килгән кейәүҙәре тураһында ла оноталар.

Был ваҡытта Ырымбур өлкәһенең Гай ҡалаһынан килгән кейәүҙәре ошо ауылда йәшәгән бажаһы менән ҡырға сығып, тәбиғәт ҡосағында байрам итеп йөрөгән була. Ҡараңғы төшкәс, был икәү усаҡ яға. Бажаһы тире йыйыусы булып эшләгәс, арбала кәзә тиреләре була. Ике бажа тиреләрҙе аҫтарына түшәп, усаҡ янында ихлас байрам итәләр. Бер мәл ямғыр яуа башлағас, кейенергә тип арба янына килһәләр, егеүле ат та, арбала ятҡан кейемдәр ҙә юҡ икән. Улай-былай йүгереп эҙләп ҡарайҙар ҙа, атты таба алмағас, ҡайтырға булалар. Гайҙан килгән кейәү йылыраҡ булһын тип, өҫтөнә кәзә тиреһен ябына.

Ауылға ҡайтып еткәс, бажаһы үҙ өйөнә, ҡунаҡ - ҡәйнәләренә юллана. Ҡараңғы төндә кейәү ишек шаҡый. "Советский черт" тураһында уйлап, ҡото осоп йоҡлай алмай ятҡан ҡәйнә ишек янына килеп:

- Һин ҡайҙан? - тип һорай.

- Мин Гайҙан, мин Гайҙан, - тип һикерәңләй өшөгән кейәү.

Кәзә тиреһе ябынған яланғас ирҙе күреп ҡото осҡан әбей келәне шарт элә лә, ҡалтырана-ҡалтырана бабайын уята башлай.

- Бабай, тор, советский черт килгән. Ысын, тора һал. "Һин ҡайҙан?", тиһәм, "Мин ҡайҙан", тип һикерәңләп тик йөрөй. Ишшу, мин - советский черт, тип әйтә...

## ҮӘТ ҺЫЙЛАНЫ!

Сәлихйән ҡарт Шәфиғулла олатайға ҡунаҡҡа барған. Уныһы ҡунағын ит, ҡаҙы менән һыйлаған, һурпаһын, сәйен эсергән. Ҡайтышлай Сәлихйән ҡарт Нәүрйән ҡартҡа һуғылған. Уныһы бабайҙы әсегән бал менән һыйлаған.

Байтаҡ булып алған Сәлихйән ҡарт өйөнә ҡайтышлай осраған кешеләргә һөйләй икән:

- Шәфиғулланың һыйы һыймы ни ул, вәт, Нәүрйән һыйланы!..

## БОРҠОЙ ИКӘН

Яңы ғына шофер булып эшләй башлаған М. ағай машинала ҡайтып килә икән. Ҡаршыға осраған машиналар саң борҡотоп үтеп китә, ти. "Йөрөйҙәр саң борҡотоп!" - тип, был һәр үткән машинаны әрләп килә.

Енләнеп бара торғас, бының үҙенең башына бер уй килә һәм ул уйын тикшермәксе булып, машинаһын кинәт кенә туҡтата ла, кабинанан һикереп төшөп, артҡа ҡарай йүгерә.

Кире машинаһына ултырғас, төшөнкө тауыш менән эргәһендә ултырған кешегә әйтә:

- Минең машинаның артынан да борҡой икән дә...

**Земфира АҠБУТИНА.**

Ейәнсура районы,
Ибрай ауылы.

## ҺӨТ ТАШЫУСЫ

Был хәл 1957 йылдың ноябрь аҙаҡтарында була. Бер йәш кеше, пар ат егеп, ете саҡрым алыҫлыҡтағы күрше ауылға һөт ташый икән. Бер көн, һөтөн тапшырып, ҡайтырға сыға. Ярты юлда ирле-ҡатынлы икәүҙе ҡыуып етә. Һаулыҡ һорашалар, һөт ташыусы уларҙы ултыртып ала.

- Ҡайҙа китеп бараһығыҙ?

- Ҡайҙа булһын инде, бәхет эҙләп сыҡтыҡ, - тип, шаярыу ҡатыш яуап бирә юлсылар. - Барабыҙ ҙа, барабыҙ әле...

- Кис етә бит, ҡайҙа ҡунаһығыҙ?

- Яңыраҡ өс туған һылыуыбыҙ Әбеткә килен булып төштө.

Үҙ ауылын яҡшы белгән һөт ташыусы ҡыҙыҡһына:

- Кем һуң ул?

- Исеме Ғәйшә булыр.

- Ә кейәүегеҙ кем?

- Исемен белмәйбеҙ әлегә. Былай кейәүҙе бик яҡшы, тип маҡтайҙар.

- Ғәйшәне беләм. Бик уңған ҡатын. Тик кейәүе ул хәтлем маҡтағандай түгел.

- Ә, улай икән... - тип, юлаусылар аптырай төшә.

- Бик булмаһа, үҙебеҙгә алып ҡайтайым.

- Әллә инде. Вәт әй, маҡтаған булалар бит әле. Барғас, аҡылға ултыртам мин уны, - тип, ҡатын юл буйына кейәүен әрләп, һөйләнеп килә.

Һөт ташыусының асыуы килә башлай. "Әллә төшөрөп ҡалдырырға микән", - тип уйлап та ҡуя. Шулай ҙа һыр бирмәй.

- Ярай, үҙебеҙгә алып ҡайтам, - ти.

- Ҡатының ни тиер һуң?

- Ҡаршы алыр әле...

Елдереп, ауылға килеп инәләр. Һөт ташыусы үҙҙәренең ҡапҡа алдына килеп туҡтай.

- Ғәйшәү, ҡатын, ҡапҡаны ас, ҡунаҡтарҙы ҡаршы ал, - тип ҡысҡыра ул.

Ғәйшә йүгереп сығып, ҡапҡаны аса.

- Ә- ә-ә, апайымдар килгән, - тип, туғандарын ҡосаҡлап ала.

Күрешәләр, бер-береһенең хәлдәрен белешәләр. Шул саҡ ҡатын ат туғарып йөрөгән һөт ташыусыға иғтибар итә.

- Ә был кем була һуң?

- Бәй, ошо инде кейәүегеҙ. Юлда танышманығыҙмы ни?

Ирле-ҡатынлы ҡунаҡтар аптырап ҡала.

- Ә беҙ бит уны юл буйы әрләп килдек...

(Был мәҙәкте йәш сағында һөт ташыған Арыҫланов Тимербай бабай үҙе һөйләне).

## АЙЫУ СЫҠТЫ

Әлегерәк беҙҙең ауылда бер урыҫ ғаиләһе йәшәгән. Ул саҡтарҙа ҡышҡылыҡҡа утынды йәй әҙерләү тигән нәмә булмаған. Ҡышҡы сатлама һыуыҡ төндә урыҫ Вася менән Рамаҙан исемле башҡорт урманға утын урларға бара. Урманға барып еткәс, ябынып килгән толоптарын атҡа ҡаплайҙар ҙа, ағас ҡырҡырға тотоналар. Бер саҡ болоттар араһынан түп-түңәрәк тулған ай килеп сыға. Рамаҙан: "Ана, ай ҙа сыҡты", - тигән. Башҡортса аҙ-маҙ һупалай белгән Васька быны "айыу сыҡты", тип аңлай ҙа, санаға менә һалып та ултыра. Урыҫтың ҡыланышынан өрккән ат ауылға табан саба башлай. Ат өҫтөндәге толоп һыпырылып төшөп ҡала. "Ҡалай һелтәнә, саҡ ҡотолдом. Бахыр Рамаҙан әрәм булды инде", - тип уйлай Вася. "Аһ-аһ, был Васяға нимә булды?" - тип аптыраған Рамаҙан толобон һөйрәп ҡайтырға сыға.

Ә был ваҡытта Вася ауылға ҡайтып, Рамаҙанды айыу таланы тип, халыҡты уята. Ауыл халҡы һәнәк-мәҙәр менән ҡоралланып, һай-һайлап, урманға юллана. Рамаҙан ҡысҡырышып килеүселәрҙе утын урлағанды һиҙеп, урмансылар уны тоторға килә икән тип уйлай һәм толобон ябынып, ағас араһына боҫа. Ҡара төн уртаһында ҡуҙғалып сыҡҡан ауыл халҡының да, урыҫ Васьканың да ҡышҡы сатлама һыуыҡта урман уртаһында айыу йөрөүе мөмкин түгеллеге уйҙарына ла инеп сыҡмай.

## ИСМАҺАМ, ҺИН ТАНЫМАҒАНҺЫҢ...

Был хәл бер нисә йыл элек була. Беҙҙең ҡаршыла йәшәгән Рауза инәйҙең кәтәүҙә һыйыры ауырып китә. Эт егеп, бесәй мисәп, тигәндәй, ул һыйырҙы көс-хәл менән кәтәүҙән алып ҡайта. "Ауырығас, һыйырымдың хатта төҫтәре үҙгәреп киткән", тип күршеһенә инеп һөйләп сыға. Мөршиҙә әхирәтен саҡырып алып, икәүләп һыйырҙы өшкөрөп, тоҙло-шәкәрле һыу, сүпрә эсереп, мәж киләләр. Кискә табан һыйырҙың хәле һәйбәтләнә, ул көйшәй башлай.

Кис кәтәү ҡайта. Рауза апайҙың һыйыры ғәҙәттәгесә иң алдан ҡайтып, ҡапҡаны мөгөҙө менән төртөп асып, ихатаға килеп инә. Баҡтиһәң, "духтырҙар" бөтөнләй икенсе кешенең һыйырын дауалаған икән.

-Минең һыйыр түгеллеген, исмаһам, һин белмәгәнһең... - ти икән аптыраған Рауза апай үҙенең әхирәтенә.

**Мәләүез районы Әбет ауылы мәҙәктәрен Резеда КҮЗБӘКОВА йыйҙы.**

*ТЕЛ ТӨБӨ – ХАЗИНА*

# Ҡамыштымы?

## Еҙ ҡурайға әйләндереп була икән шул

**Халҡыбыҙҙың боронғо йырҙарында йыш ҡына аңлашылмаған һүҙҙәр осрай. Был тәбиғи, сөнки заман үтеү менән күп һүҙҙәр ҡулланылыштан төшөп ҡалған һәм уларҙы яңылары алмаштырған. Әммә улар һөйләш теленән китһә лә, эпик әҫәрҙәрҙә, йырҙарҙа һаҡлана. Ләкин ҡайһы ваҡыт йырҙы отоп алыусы үҙенә таныш булмаған һүҙҙе яңғырашы буйынса оҡшаш һүҙ менән алмаштыра. Шулай итеп, мәғәнә боҙола, йырҙың йөкмәткеһенә зыян килә. Ә тыңлаусыны, ғәҙәттә, йырҙың һүҙҙәренә ҡарағанда, көйө нығыраҡ әсир итә. Йыр тексы шул рәүешле тарала һәм йәшәй бирә. Был күренеш, әлбиттә, шәптән түгел һәм хатаны үҙ ваҡытында төҙәтеү хәйерле.**

Күптәр хәтерләйҙер, "Ерән ҡашҡа" йырын бер йырсыбыҙ ошолай башҡарғайны:

**Йәйләүҙәргә барҙыҡ, бейәләр һауҙыҡ,**
**Буш күнәккәйҙәрҙе лә ҡулға элеп...**

Тыңлаусыларҙың тәнҡитенән һуң хата үҙ мәлендә төҙәтелде. Хәҙер уны "буш күнәккәйҙәрҙе" тип түгел, "баш күнәккәйҙәрҙе" тип йырлайҙар. Билдәле булыуынса, башҡорттар элек күнәктәрҙе эре малдың баш тиреһе йәки аяҡ тиреһенән, киптереп яһаған. Шуның өсөн баш күнәк һәм аяҡ күнәктәр булған.

Шулай уҡ "Сыбай ҡашҡа" йырын "Һыбай ҡашҡа" тип тә йырлаусылар булғайны. Был да үҙ ваҡытында төҙәтелде. Ысынлап та, һыбай ат булмай, ә "сыбай" тигәне ниҙе аңлата һуң? Моғайын, был һүҙ бөтә кешегә лә таныш түгелдер. Был һорауға БДУ-ның Сибай институты профессоры **Вәкил ХАЖИН** шулай тип яуап биргәйне:

“Әгәр йондоҙ ҡашҡа маңлайҙағы аҡты белдерһә, сыбай ҡашҡа - маңлайҙан алып морон осона тиклем оҙон булып һуҙылған аҡ тамға. Башҡорт телендә "сыбата ялан" тигән һүҙ бар. Йылға буйындағы оҙон яландарға әйтелә ул. "Сыбата егеү" тип әйтәләр, был аллы-артлы /русса "гуськом"/ теҙелдереп, йәғни оҙон итеп егеү була.

Йәнә "Таштуғай" йыры тураһында әйтке килә:

**Таштуғайҡай, һинең ҡамышыңды**
**Еҙ ҡурайҡай итеп тартайым...**

"Еҙ ҡурай" урынына "сор ҡурай" тип йырлау дөрөҫ булыр, сөнки ҡамышты еҙ ҡурай итеп тартыу мөмкин түгел, ә инде теләһә ниндәй эсе ҡыуыш үләндән ҡырҡып яһалған ҡурай нәҡ "сор ҡурай" тип аталған да инде.

Ә хәҙер мәшһүр "Сибай" йырының тексына иғтибар итәйек.

**Йәшел дә генә сана, зәңгәр дуға...**

Башҡорт теленә "зәңгәр" һүҙе уҙған быуаттың баштарында ғына килеп ингән. Ә 19-сы быуатта, "Сибай" йыры тыуған осорҙа, "зәңгәр" һүҙе беҙҙә бөтөнләй булмаған. Шуға күрә дөрөҫө - "зеңгер дуға" булырға тейеш. Сөнки Инйәр буйындағы ауылдарҙа бәләкәй еҙ ҡыңғырауҙы элек-электән "зеңгер" тиҙәр, беҙ мәктәптә уҡығанда, мәҫәлән, ҡыңғырауҙы шулай тип әйтә торғайныҡ. Аттың дуғаһына ла таҡҡандар уны. Зеңгер, йәки зеңгерле дуға, тип аталған ул.

Башҡорт халҡының "Зөлхизә" йыры ошолай башлана.

**Ялан да ғына ерҙән болан килә,**
**Уйһыу ҙа ғына ерҙән дә, ай, түтә, тип, Зөлхизә...**

Ҡайһы бер башҡарыусылар "түтә" урынына "үтәм" һүҙен ҡулланып, йырҙы тупаҫ боҙа. Ә "түтә" - ул яҡын, тура юл, тигәнде белдерә".

**Шулай итеп, Вәкил Хажин әйтеүенсә, хатаны ваҡытында төҙәтеү хәйерле. Юҡһа, ул хата киләһе быуындар теленә лә күсәсәк бит. Ул саҡта: "Олатай, өләсәйҙәр ҡамышты нисек итеп еҙ ҡурайға әйләндерҙе икән?" тип, ултырыр аптырап ейән-ейәнсәрҙәр.**

**Әлфиә БАТТАЛОВА.**

***✓ Әгәр боронғо тәрбиә ҡанундарыбыҙ мөмкин булған тиклем кире ҡайтһа, һәр кем үҙ киләсәге тураһында хәстәрлек күрһә, йола-ғөҙәттәребеҙ тергеҙелһә, йәш быуынды тәр-биәләүҙә, тәртипкә һалыуҙа тос аҙым булыр.***

*ТОРМОШ ҺАБАҠТАРЫ*

**Был юлы рубрикабыҙҙа 40 йыллыҡ хеҙмәт стажының 36 йылын уҡытыусылыҡҡа бағышлаған Зәйтүнә инәй Хәйретдинованың һөйләгәндәрен урынлаштырырға булдыҡ. Ул әле Өфөлә йәшәй, бүләсәрҙәрен - ейәнсәре Айһылыуҙың Ынйыҡай менән Дилбәр исемле ҡыҙҙарын бағыуҙа ярҙам итә. 80 йәштән уҙған өләсәйҙең тормош һабаҡтары бик фәһемле.**



# АҢДАН - ҠАНҒА, ҠАНДАН - ЗАҢҒА

## Нәҫелең затлы икән, балаларың алдында йөҙөң яҡты

Мин ғүмерем буйы уҡытыусы булып эшләнем, балаларҙы халҡыбыҙ тәрбиәһе нигеҙендә әҙәпкә, инсафлыҡҡа, намыҫлылыҡҡа, тоғролоҡҡа, ҡыҫҡаһы, халҡыбыҙҙың төп тәрбиә маҡсаты - Яҡшы кеше булырға өйрәттем. Ни дәрәжәлә йоҡҡандыр - унына Хоҙайға мәғлүм. Тәжрибәмдән сығып шуны әйтә алам: тәрбиә эше нәҫелеңдең күренекле, абруйлы кешеһе өлгөһөндә булһа, айырыуса отошло. Бындай осраҡта һәр бала менән айырым эш алып барыу яҡшы.

Миҫал эҙләп әллә ҡайҙа алыҫ йөрөргә түгел. Бына беҙҙе үҙ төбәгебеҙҙә, ауылда ғына түгел, хатта тирә-яҡта ла "Искәндәр нәҫеле, Искәндәр ырыуынан" тип йөрөттөләр. Ошо исемгә тап төшөрмәҫ, уның яҡты данына ҡара яҡмаҫ өсөн Искәндәр тармаҡтарынан булған туғандар үҙебеҙ ҙә тырыштыҡ, балаларыбыҙҙы ла шулай тәрбиәләргә ынтылдыҡ. Ҡыйғы районының Абзай ауылында күп улар Искәндәр нәҫеленән таралған туған-тумасалар. Улар телгә алынырлыҡ берәй яҡшы эш башҡарып ҡуйһалар: "Беҙ Искәндәр нәҫеленән!" - тип, күкрәк һуғалар.

Башҡорттарҙа шәжәрә төҙөү мотлаҡ һаналғанлыҡтан, ул ғаилә, ара, ырыу һайын һаҡланған. Ер бүлгәндә лә шәжәрә кәрәк булған, яңы ғаилә ҡороусылар өсөн дә шәжәрәңде белеү мотлаҡ һаналған. Ете быуын айырылмайынса өйләнешеү рөхсәт ителмәгән. Тик дингә ҡаршы көрәш йылдарында шәжәрәләр боронғо дини китаптар менән бергә юҡ ителгән, сөнки иҫке төрки хәрефтәре менән яҙылған барлыҡ китаптарҙы ла дини китап тип йыйып яндырғандар. Ә ниндәйҙер ғилләә менән һаҡланып ҡалғандарын өлкәндәр үҙҙәре менән бергә ерләргә тип, васыят әйтеп ҡалдыра торған булған. Иң изге, ҡәҙерле ҡомартҡыларының әләф-тәләф ителеүен теләмәгәндәр. Шөкөр, тарихыбыҙ сағылған байтаҡ шәжәрәләр ниндәй ғилләә менәндер тороп ҡалған. Мин үҙебеҙҙең тармаҡ шәжәрәһен атайым ятлатыуы арҡаһында бер аҙ иҫтә ҡалдырғанмын. Беҙҙең шәжәрәнең билдәле булған тиклеме шулай: Мөхәмәдйәр, уның улы Искәндәр, Искәндәрҙең улы Сәйфулла, Сәйфулланың улы Хәйретдин, Хәйретдиндең улы Ғилметдин, уның улы Фәсхетдин, ҡыҙы - мин үҙем Зәйтүнә. Искәндәрҙең нәҫелебеҙ данын күтәреү ғилләһе шунда: ул 1812 йылғы Француз һуғышында ҡатнаша. Унда үҙе теләп китә. Ул саҡта яугирҙар үҙенең менгеһенән тыш, тағы бер-нисә ат алырға тейеш булған. Искәндәр яугир үҙенә 4 ат алып китә. Үҙенән бер ат, ике ағаһы һуғышҡа барырлыҡ булмағас - уларҙан берәр ат, Әбделҡәйүм бабаһы үҙенең улы булмағас, ат бирергә тейеш булған - унан бер ат.

Һуғыш бөткәс, ике йылдан ашыу ҡайта алмай йөрөгән Искәндәр. Сөнки, йола буйынсамы, ғөрөф-ғәҙәт буйынсамы, шундай тәртип урынлашҡан: һуғышҡа икәүҙән артыҡ, йәғни үҙ менгеһенән тыш тағы бер нисә ат алып киткән кеше ауылына атһыҙ ҡайтырға тейеш булмаған. Ул менеп ҡайтырлыҡ ат алыр өсөн аҡса эшләп оҙаҡлап киткән. Ауылға ике миҙал һәм ике арҡысаҡ (крест) тағып ҡайта, ике йылдан һуң тағы бер арҡысаҡ хужаһын юллап ебәрелә.

Ҡайтыуына ҡатыны фани донъя менән хушлашҡан. Шунан ул йыл ашалап 3 ҡатынға өйләнеп, 11 ир бала үҫтергән. Ҡыҙҙары шәжәрәгә индерелмәгәс, теүәл генә әйтеп булмай - 5 йәки 6 булған шикелле ҡыҙҙары.

Искәндәр олатай улдары һайын ер алғас, бик бай булған. Ғаиләһен бағыуға, улдарын тәрбиәләүгә ныҡ иғтибар бүлгән. Улдарын эшлекле, ҡыйыу, тәүәккәл итеп үҫтерергә тырышҡан. Искәндәр олатай менән улдарының хәҙерге Ҡыйғы районы Абзай ауылы тирәһендә генә түгел, Балаҡатай районы ерҙәрендә лә өлөшө байтаҡ булған. Абзай ауылы ерҙәре өлкән улы Сәйфулланыҡы булған. Абзай Уртауыл тип йөрөтөлгән ул саҡта.

Ата тырышлығы бушҡа китмәгән: Сәйфулла тиҙ арала үрләй, байтаҡ уңыштарға өлгәшә. Староста, десятник, сотник һәм урядник булған. Ул Златоуст өйәҙендә хәрби хеҙмәттә ваҡытында юл төҙөү эшендә үҙенең ойоштороу һәләтен күрһәтеп өлгөргән.

Артабан нәҫелебеҙҙә уңыш ҡаҙанған сая, сәмсел, тәүәккәл туғандарыбыҙҙы: "Оһ! Нәҡ Сәйфулла ҡарт!" - тип тә маҡтар булғандар. Сәйфулла уҙамандың улы Хәйретдин - минең атайым бындай маҡтау һүҙен үҙенең улы, минең ҡустым Фәсхетдингә ҡарата йыш ҡуллана торғайны.

Фәсхетдин 5 йәше тулыу менән һыбай йөрөй башланы. 6 йәш тулыуға ураҡ машинаһы егелгән ос ат өҫтөндә йөрөй алды. Ос ат менән бик оҫта йөрөү кәрәк. Ураҡ машинаһына ике ат төпкә егелә лә, ос ат иң алға - осҡа егелә. Шул ос ат тип атала. Төпкә егелгән ике ат ос ат ыңғайына йөрөргә тейеш. Шулай булғас, ос атҡа атланған һыбай малай бик сос та, оһолло ла булырға тейеш. Фәсхетдин ҡустым 11 йәшендә колхозда һабан һөрөүҙә эшләй башланы.

Фәсхетдин ҡустым менән минең атайымдың исеме Ғилметдин. Ул 1914-1915 Беренсе донъя һуғышында ҡатнаша. Тәүҙә батша армияһы менән Германияға ҡаршы һуғышта, унан һуң Ҡыҙыл армия сафында Граждандар һуғышында ҡатнашып, 7 йыл йөрөп ҡайтты. Әсәйем береһенән-береһе бәләкәй балалары менән ете йыл буйы көтөп ала атайымды. Ул һуғыштан ҡайтҡас, мин тыуғанмым. Атайым мине һәр ваҡыт үҙе менән бергә йөрөттө. Эсмәне, тартманы. Башынан үткәндәрҙе, нәҫел тарихын, затлы туғандарыбыҙ тураһында һөйләй торғайны. Шуның өсөн миндә байтаҡ мәғлүмәттәр тупланған.

Искәндәр нәҫелдәренә, ул саҡтағы бар ир-егеттәр кеүек, һәр быуыны һайын тигәндәй һуғышта ҡатнашырға тура килде. Улар ил һаҡлау өсөн һәр ваҡыт үҙ теләктәре менән фронтҡа киткән. Ҡустым Фәсхетдин Бөйөк Ватан һуғышында 1942 йылдың 10 июненән алып 1947 йылдың мартына тиклем булды. Фронтҡа киткән сағында 18 йәш саҡ тулғайны. Мин был саҡта Дыуан районы Арый ауылында уҡытыусы булып эш башлағайным. Ҡустымды оҙатырға ҡайта ла алманым. Хәбәр итерлек әмәл булмаған.

Беҙҙең ике туғандарҙан ғына ла Бөйөк Ватан һуғышында ун дүрт кеше фронтта булды, уларҙың дүртәүһе генә иҫән ҡайтты.

Ғөмүмән, илебеҙ тарихы беҙҙең нәҫел аша үткән һымаҡ: һуңғы өс һуғышта ла ил һаҡлау тигән изге бурысты намыҫ менән үтәне Искәндәр нәҫелдәре.

Аңдан - ҡанға, тигәндәй, Искәндәр нәҫеле тырыш, сәмсел нәҫел ул. Миҫалға Фәсхетдиндең ҡыҙы Нәфисә Тюменцеваны ғына алайыҡ. Уның булдыҡлылығы, тәүәккәллеге, сәмселлеге тураһында күпме яҙһаң да аҙ кеүек. Нәфисә хаҡында "Ватандаш", "Башҡортостан ҡыҙы" журналдарында ла, гәзиттәрҙә лә яҙҙылар. Бөгөнгө көндә Свердловск өлкәһе Екатеринбург ҡалаһында Башҡортостан вәкиллеге етәксеһе вазифаһын башҡара. Ниндәй генә эш алып бармай ҙа, нәмәләр генә эшләмәй унда! Боронғо башҡорт ерҙәре булған ауылдарҙа үҙҙәренең башҡорт икәнлектәрен дә онота яҙып, туған телдәрендә бөтөнләй һөйләшмәй башлаған милләттәштәребеҙҙе ҡуҙғытып, йоҡомһорағандарын уятып, бөгөнгө көндә туған телдә уҡытыу индертеп, геү килеп эшләп йөрөй.

Минең ике ҡыҙымда ла "Искәндәр нәҫеле" ҡаны аға. Әүҙемдәр, тырыштар, сәмселдәр. Рәмзиә Хисамова - Башҡортостандың халыҡ артисы, Зәкинә ҡыҙым - Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы.

"Искәндәр нәҫеле"нең ғәҙел һәм намыҫсан булыуы тураһында миҫал итеп, тағы бер бабайыбыҙ тураһында ҡыҙыҡ иҫтәлек һөйләйҙәр.

Әйтеп үттек: борон ир бала тыуған һайын ер бүлеп биргәндәр. Сәмиғулла исемле бабайыбыҙҙың улдары ишле, ере күп булған. Башҡортостан ерҙәренә сит яҡтарҙан бүтән халыҡтар күсенеп килә башлағас, арзан-марзанға һатып та, алдап-йолдап та ерҙәрҙе ала башлайҙар. Халыҡтың ере тарайғандан-тарая. Иң уңдырышлы сәсеүлектәр, еләк-емешкә бай туғайҙар, һутлы үләнле сабынлыҡтар ят ҡулдарына ҡала башлай. Еләк йыйған туғайҙар, сейә тиргән тау битләүҙәренән ҡыҙҙарыбыҙҙы ҡыуып ҡайтара башлайҙар. Сәмиғулла бабайҙың еренә терәтеп килтереп сиркәү ултыртып ҡуялар (Ул сиркәү әле лә бар - Яңы Балаҡатайҙа). Бабайыбыҙ баш бирмәҫкә, ерҙәрҙе бүлдертмәҫкә маташып ҡарай, әммә ниндәйҙер юлдар менән, ниндәйҙер ярамаған эштәрҙә ғәйепләп, уны бөтөнләй ерһеҙмалһыҙ ҡалдырыуға тиклем барып етәләр. Ә сиркәү һалдыртыусы ерен һаман киңәйтә бара икән. Күҙ күреме етмәҫ ерҙәргә йәйелеп ятҡан ерен юғалтҡан Сәмиғулла аҡылдан яҙа. Ишетмәҫ, һөйләшмәҫ була. Йөрөй торғас, сиркәүгә эшкә ялланa. Өс йылдан ашыу йөрөй унда тир түгеп. Кеше менән аралашмай, һөйләшмәй. Туғандары күрергә тип барһа, ым-ишара менән генә аңлашалар икән.

Өс йылдан һуң сиркәүҙән ҡаса был. Баҡһаң, өнһөҙ-телһеҙ ҡалған кеше булып, поптың халыҡтан алдап-йолдап тартып алған ерҙе башҡа килмешәктәргә һатыуын, унан килгән болдо алтынға әйләндереп йыйыуын күреп-белеп йөрөгән. Ул алтынды ҡайҙа йәшергәнен дә шәйләгән. Шунан уңайын тура килтереп теге алтынды алып ҡасҡан. Ул алтынды ни эшләтергә уйлағандыр - аныҡ ҡына билдәһеҙ. Ҡайһы берәүҙәр, аҫаба башҡорт ерҙәрен кире һатып алып, элекке хужаларына ҡайтарырға уйлаған, тип тә, икенселәре, алтынлата өләшергә ниәтләнгән, тип тә, өсөнсөләре халыҡты талаусыларҙан үс алырға уйлаған, тип тә фараз ҡыла. Ни генә тигәндә лә, ил мәнфәғәттәренә сикһеҙ тоғро ҡалып, хәләл көсө менән мал табып йәшәгән ғәжәп намыҫсан, тоғро, ғәҙеллек яратыусан Искәндәр нәҫеленән булған Нәмиғулла ҡарт та ул алтынды үҙе өсөн генә үҙләштерергә уйламағандыр, тип уйлайым. Ҡайҙалыр ситтә йөрөгән ул. Артабанғы яҙмышы билдәһеҙ.

**Әгәр боронғо тәрбиә ҡанундарыбыҙ мөмкин булған тиклем кире ҡайтһа, һәр кем үҙ киләсәге тураһында хәстәрлек күрһә, йола-ғөҙәттәребеҙ тергеҙелһә, йәш быуынды тәрбиәләүҙә, тәртипкә һалыуҙа тос аҙым булыр, тигән өмөттәмен. Мәҫәлән, эсеү, тәмәке тартыу кеүек алама ғәҙәттәр беҙҙең халыҡ өсөн сит нәмә. Яман сирҙән дә яманыраҡ, йоғошло сирҙән дә тиҙерәк йоғоусан һәм таралыусан был аламалыҡтарға бирешмәҫлек көс табыу өсөн тәрбиә эшендә үҙ ҡанундарыбыҙҙы ҡайтарыу зарур, тигән фекерҙәмен мин.**

**Рубриканы Мәрйәм БУРАҠАЕВА алып бара.**



✓ *Маҡсат ҡуйҙың икән, һис икеләнмәй, уға табан барырға кәрәк. Үҙеңде булдыҡһыҙға һанап, кире сигенергә хаҡың юҡ. Юл алдыңмы, алға табан атлауыңды бел.*



ДОНЪЯ БЫЛ! УНДА...

**Ҡапыл ғына йыйынып, Өфө тарафына сығып китергә тура килде. Барғанда Яҡтыкүл аша "Газель" машинаһында барһам, ҡайтҡанда Өфө-Баймаҡ маршрут автобусына ултырҙым. Хәҙер рәхәт бит ул: сәғәте етһә, юлға сығаһың да, тәғәйен автобусҡа ултыраһың да китәһең. Аллаға шөкөр, юлдар ҙа таҫма кеүек. Хыяллана торғас, асфальт юлдарҙан ғына йөрөйбөҙ хәҙер. Элекке кеүек, юл ғазабы - гүр ғазабы, тип, юлға сығырға ҡурҡып тормайбыҙ. Өләсәйем әйтмешләй, "кәрәкле ергә көймәләге кеүек сайҡалтмай ҙа алып барып еткерәләр".**

# ...МӘРХӘМӘТКӘ ЛӘ УРЫН БАР

Киске һигеҙҙәр тирәһендә ҡайтырға сыҡтыҡ. Төнгө юл оҙон тойола. Автобусты ике шофер хеҙмәтләндерә. Икеһе лә уртаса буйлы, ҡара сәсле, ҡуңыр йөҙлөләр. Ун һигеҙ пассажир араһында ике күҙе лә тома һуҡыр, ҡашыҡҡа һалып йоторлоҡ сибәр ҡыҙ бар.

Ҡырмыҫҡалы, Архангелде үтеп, Белорет районына индек.

- Миңә тукталыштан һуң биш саҡрым йәйәү атлайһы бар, - тип уфтана эргәмдә ултырған Аҙнағол ауылы ҡатыны Зәкиә исемле апай.

Автобус бер ҙур күперҙе үткәс, боролош янында туҡтаны.

- Ошонда мине ҡаршы алырға тейештәр, туҡталышта кеше бармы? - тип һораны теге ҡыҙ.

- Юҡ.

- Улайһа, алдағы туҡталышҡа барайыҡ.

Унда ла бер кем дә юҡ ине. Ҡыҙ өсөн бөтәһе лә борсола башланы.

- Кире боролоп барайыҡ.

- Бәлки, күрмәй үтеп киткәнбеҙҙер, - пассажирҙар телгә килде.

Ҙур автобус кире боролдо. Туҡталышта берәү ҙә күренмәй. Егеттәр төшөп, бер еңел машинаны туҡтатты.

- Ошо ҡыҙҙы ауылына илтеп ҡуйығыҙ әле.

Машиналы егет "юҡ" тип баш һелкә. Бер аҙ көтөп торҙоҡ та, кире боролдоҡ. Күперҙән һуңғы боролошта йәнә туҡтаныҡ. Ҡыҙ янында ултырған егет:

- Өй телефонығыҙҙың номерын әйтегеҙ әле, -тине.

Кеҫә телефондары булғандар бер-бер артлы ҡыҙ әйткән номер буйынса шылтыратып ҡараны, әммә яуап булманы. Ваҡыт үтә, алда бараһы юл оҙон. Ә ҡыҙ шундай йәл.

- Мине ошонда ҡалдырығыҙ, туғандарым, бәлки, юлда киләләр. Рәхмәт һеҙгә. Мин ошонда төшәм, - тине ҡыҙ.

Шофер егеттәрҙең береһе ҡыҙҙы етәкләп төшөрҙө лә, туҡталышҡа алып барҙы. Ҡыҙ бағанаға һөйәлде. Уны ҡараңғы туҡталышта яңғыҙын ташлап китеү ауыр булды.

- Бына һиңә Диана Гурцкая, Аллам һаҡлаһын, сырағыңдан яҙҙырмаһын, - тине Зәкиә апай.

Автобус маршрут буйынса юлын дауам итә. Бөтәһе лә шымып уйланып килә. Тик ҡыҙ янында килгән егет кенә һаман да кеҫә телефоны менән булаша. Зәкиә апайҙың туҡталышына ла яҡынланыҡ. Шул саҡ егет:

- Ҡыҙҙың өйөнән яуап бар. Улар уны иртәгә килә тип көткәндәр, ҡаршы алырға сыҡтылар! - тип шатланып ҡысҡырып ебәрҙе.

- Уф, Аллам, күңелем тынысланды, рәхмәт, улым, - тип, Зәкиә апай хушлашып төшөп ҡалды.

Төнгө берҙә Рысҡужала өйөм янында төшөп ҡалғас, ҡараңғылыҡты ярып, Һарналы тауына үрмәләгән автобус күҙҙән юғалғансы ҡарап торҙом. Күңелемдә Өфө-Баймаҡ автобусын йөрөтөүсе егеттәргә хөрмәт уянды, әйтелмәгән рәхмәтем ҡалды. Һау йөрөгөҙ, егеттәр!

**Айһылыу ХӘСӘНОВА.**
Әбйәлил районы.

ҺҮҘ АРАҺЫНДА

# Алдаҡсыны тауышынан таны...

**Үҙәк гәзиттәр яҙыуынса, һуңғы ярты йыл эсендә генә мәскәүҙәр алдаҡсылар ауына һигеҙ мең тапҡыр эләккән. Былар рәсми мәғлүмәттәр генә. Ай һайын енәйәтселәргә ҡаршы йөҙәрләгән енәйәт эше асыла, әммә уларҙың бик аҙы ғына хөкөм ҡарарына барып етә. Бөгөн Мәскәүҙә әүәлдән билдәле күҙ бәйләүсе сиған ҡатындарынан тыш, социаль мәсьәләләр буйынса ялған хеҙмәткәрҙәр, финанс пирамидаларын төҙөүселәр һәм башҡа төрлө бик күп аферистар оялауы билдәле. Алдаҡсылар ҡорған хәйлә ауына teләһә кем, бигерәк тә үҫмерҙәр һәм пенсионерҙар эләгеүсән.**



Бурҙарҙың тышҡы йөҙөн һәм нисек эш итеүен, ғәмәлдә, бер кем дә аныҡ ҡына билдәләй алмай. Ни өсөн тигәндә, енәйәтселәр кеше аңын томалауҙа, уны албырғатыуҙа бик оҫта эш итә. Үҙҙәренең мәкерле маҡсатын да оҫта йәшерәләр. Шулай ҙа алдаҡсыларҙы танып була. Сөнки кешеләр бер-береһе менән тел ярҙамы аша ғына түгел, ә ым-хәрәкәт, үҙен тотошо, атлауы, йөҙ мимикаһы һәм, әлбиттә, күҙ ҡарашы ярҙамында ла аралашыусан. Түбәндә килтерелгән миҫалдар аша ҡаршыңда кем тороуын асыҡларға мөмкин.

**Күҙҙәр**

Дөйөм алғанда, алдаҡсылар үҙҙәрен белгертеүҙән бик ҡурҡа. Күңел ныҡ тулҡынланғанда, ғәҙәттә, кешенең күҙ ҡараһы киңәйә, ҡурҡыуҙан ҡаштары юғары күтәрелә.

Алдауҙың тағы бер билдәһе - әңгәмә барышында күҙ ҡарашының икенсе йүнәлеш алыуы. Кешеләрҙең күбеһе мәғлүмәтте һул ярымшар мейеһе аша эшкәртеү сәбәпле, ул алдағанда ҡарашын һул яҡҡа йүнәлтеүсән. Әгәр кеше нәмәнелер маҡтарға теләһә, ул өҫкә йә аҫҡа ҡарай. Ә дөрөҫтө һөйләгәндә беҙ бөтөн мәғлүмәтте баш ыбыҙҙың уң ярымшарынан алып ташлайбыҙ һымаҡ. Әгәр әңгәмәсе башлыса уң яҡҡа йә күҙеңә тура ҡарап һөйләһә, ул алдамай. Әйткәндәй, тыуымыштан һулаҡайҙар уның киреһен эшләй.

**Хәрәкәт**

Адаҡсылар үҙҙәрен тыныс һыҙ тота, тик тормай, ҡулдарын ҡайҙа ҡуйырға белмәй, тиеүҙәре дөрөҫ түгел. Алдау йыйнаҡ булыуҙы талап итә. Шуға күрә алдарға оҫтарған әҙәмдәр иғтибарлы һәм тыныс була. Улар һаҡ ҡылана, артыҡ хәрәкәт яһарға тырышмай.

**Тауыш**

Ҡаршыңдағы алдаҡсыны һөйләгәндә йыш туҡталып тороуынан, йәки еңелсә тотлоғоуынан да билдәләргә мөмкин. Әгәр ул ныҡ тулҡынланған булһа, тимәк, ниҙәндер бик ҡурҡҡан йәки кемгәлер асыуланған, тигәнде аңлата. Әгәр уның алдаҡсы булыуын һиҙеп ҡалып, фашларға ниәтләһәгеҙ, был уйығыҙҙы шунда уҡ һиҙәсәк һәм ҡысҡырып, ҡабаланып һөйләй башлаясаҡ. Әйткәндәй, ундайҙарҙың күңеле ихласмы, түгелме икәнлеге ауыҙ асып һүҙ әйтмәҫтән үк йөҙөнә "яҙыла". Ә бына ялғанлауы бер үк ваҡытта, йә һуңынанырак асыҡлана. Мәҫәлән, һинең менән шатлыҡ уртаҡлашырға теләһә, "Дуҫ, һинең эш хаҡыңды күтәрҙеләр!" тип әйтерҙән алда уҡ йөҙөндә бәхет осҡондары һәм йылмайыу ғәләмәте хасил була.

**Ирендәр**

Әңгәмәсең ирендәрен ҡымтып тора икән, тимәк, нимәнелер әйтеп бөтмәй. Ә инде ирендәрен бер туҡтауһыҙ ҡыймылдатҡан кеше, үҙенең фекерен көсләп тағырға маташа, тигән һүҙ.

**Әйткәндәй, тәнебеҙ алдарға ирек бирмәй. Нисек кенә булмаһын, кеше тәбиғәте менән ғәҙел йән эйәһе. Быны алдарға теләүебеҙгә ҡаршы тороусы тәнебеҙ иҫбатлай. Тап шуның өсөн дә, балалар алдашһа, шунда уҡ усы менән ауыҙын ҡаплай. Хәйер, был хәрәкәт ололарға ла хас, йәғни ололар алдаһа, бармағы менән танау осона йәки эйәк аҫтына тейеп алыусан.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

## Биҙәкәй күҙле

Әсәйем үҙенең телмәрендә биҙәкәй тигән һүҙҙе йыш ҡуллана. Ул матур, йәмле тигәнде аңлата. Йәй көнө, мәҫәлән, еләккә барғанда аллы-гөллө сәскәле яланда йөрөһәк: "биҙәкәй генә аҡланға килеп сыҡтыҡ" ти. Йә булмаһа, фәлән егет ҡырҙан биҙәкәй йөҙлө генә килен алған, ти. Ә йәшел, зәңгәр күҙле кешеләрҙе ул бер ваҡытта ла, хатта яңылыш та күҙҙәренең төҫө менән түгел, ә "биҙәкәй күҙле" ти ҙә ҡуя.

**Миңниса СӘФӘРҒӘЛИНА.**

## Билдыуа

Билдыуа һүҙен иң беренсе әсәйемдән ишеттем, аҙаҡ башҡаларҙан. Әммә уның ҡайҙан килеп сыҡҡанын һис тә аңлата алмайым. Беҙҙең яҡта ҡырына торған лезвияны шулай атайҙар. Әллә квитанцияны "кәпитәнсе" тип әйткән һымаҡ "билдыуа" ла "бритва" тигәндән килеп сыҡтымы икән?

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

УҢЫШ ҠАҘАН



## Ҡағиҙәне тот!

**Һәр кем үҙ яҙмышын үҙенсә ҡора һәм шәхси тормош ҡағиҙәһе буйынса йәшәүҙән күп нәмә ота. Шулай түгелме ни? Мин һеҙгә шундай уйын тәҡдим итәм, ул бигерәк тә маҡсатһыҙ, әле булһа теләгән хыялына өлгәшә алмаған кешеләргә тәғәйенләнә. Иң тәүҙә, календарҙа бөгөнгө көн датаһын билдәләгеҙ һәм бер йыл үткәс тә, был датаны ҡарағыҙ. Шулай итеп, бөгөнгө көндө билдәләнегеҙ. Ә хәҙер киләһе датаға тиклем табыш алыуҙы ике тапҡырға арттырасаҡмын, төҫ-башымды тағы ла матурыраҡ итәсәкмен, сәләмәтлегемдә ныҒытасаҡмын, тип үҙеңә һүҙ бир.**

Ошо изге пландарың хаҡында уйлағанда, эстән генә "эй, быының булыуы мөмкинме һуң инде?" тип бәлки көлөп тә ҡуйғанһыңдыр. Күңелеңдә шикләнеүҙәр ҙә билеп алғандыр. Зарары юҡ. Иң мөһиме, ундай уйҙарҙы башыңдан алып ташлай бел: "Үҙ-үҙемә ышанмаусылыҡ тойғоһо, күңелемдән сығып тай!" - тип тә ҡабатла.

Нимә теләйһең, шуларҙың барыһына ла эйә буласаҡһың!

Иң яҡшы тормошҡа лайыҡһың!

Уйҙарыңа һәм тормошоңа һин, фәҡәт һин үҙең генә хужа!

Ә хәҙер алға табан киттек! Маҡсат ҡуйҙың икән, һис икеләнмәй, уға табан барырға кәрәк. Үҙеңде булдыҡһыҙға һанап, кире сигенергә хаҡың юҡ. Юл алдыңмы, алға табан атлауыңды бел. Был юлда һөҫланғыс кешеләр менән осрашырһың, яңы дуҫтар табырһың, хыялыңды тормошҡа ашырырға булышлыҡ итеүсе әллә күпме мөмкинлектәр асылыуын күреп аптырарһың. Атла, әйҙә, ситкә тайшанма. Ваҡыт һинең өсөн эшләй. Иң ҡыуандырғаны, үҙҙәренең нимәгә өлгәшәсәгенә ныҡлы инанған рухташтарыңды табып, уларҙы ла әйҙәй алыуың булыр. Һеҙ барығыҙ ҙа Яҡтылыҡ һәм Мөхәббәт юлсылары. Бер ваҡытта ла яңы башланғыстарҙан ҡурҡма. Тормош үтә ҡыҙыҡлы. Ҡулыңдан килгән бер эште башлап ҡарарға иренмә. Ғаләм һиңә төбәп аҫҡан мөмкинселектәрҙең береһен дә ҡулыңдан ысҡындырма! Уларҙы маҡсатыңа ярашлы белеп файҙаланырға тырыш. Бөтөн донъяны ҡосоп булмай, шуға күрә иң изге маҡсатыңа табан тайпылмай атла ла атла! Тиҙ үк уңыш килер һиңә.

ӘЙТӘГҮР!

# "Шиғри аһәңһеҙ...

## драматургиялағы фәлсәфә баҙыҡ була"

**"Матбуғат-2007" күргәҙмәһендә Мәскәүҙә йәшәгән яҡташыбыҙ, күренекле башҡорт драматургы Азат АБДУЛЛИН ҡунаҡ булараҡ килгәйне. Мөмкинлектән файҙаланып, штаттан тыш хәбәрсебеҙ уға бер нисә һорау менән мөрәжәғәт итте.**

**✱ Азат Хаммат улы, һеҙҙең "Ун өсөнсө председатель" исемле пьесағыҙ Башҡортостанда ғына түгел, Рәсәйҙә лә шау-шыу тыуҙырҙы. "Ожмах баҡсаһы" тип аталған һуңғы пьесағыҙҙы Мәскәүҙең Роман Виктюк театры ҡуйҙы. Шунан бирле һеҙҙең турала бер ни ҙә ишетелмәй: сығыш яһағаныгыҙ ҙа, интервью биргәнегеҙ ҙә тойолмай. Ирекһеҙҙән һорауҙар тыуа: "Азат Абдуллин ҡайҙа юғалды? Хәле нисек? Яңы әйберҙәр яҙамы?" Ошоға ни әйтерһегеҙ?**

✱ Был һорауҙарҙы яҡташтарым яҙған хаттарҙа ла укырға була. Миңең иждаҡ менән ҡыҙыҡһынғандарҙы тынысландырайым: мин бер ҡайҙа ла юғалманым, иждадым дауам итә. Эйе, пауза оҙаҡҡараҡ һуҙылып китте. Даһи бейеүсе, балет артисы яҡташыбыҙ Рудольф Нуриевтың яҙмышына ауаздаш "Ожмах баҡсаһы" исемле пьесам бик күп ваҡытты алды. Әммә әҫәрҙә уның исеме телгә алынһа ла пьеса уның тураһында ғына түгел, ул йыйылма образ. Роман Виктюк театры ябай театр түгел. Виктюктың үҙе менән эшләүе лә еңелдән түгел. Ысынлап та, бик күп ваҡыт китте.

**✱ Эш күпме дауам итте?**

✱ Пьеса 1997 йылда уҡ яҙылғайны. Мин уны күп театрҙарға тәҡдим итеп ҡараным. Ермолова исемендәге театр уны ярты йыл "тотто" - Рудольф ролендә актер таба алманылар. Гоголь исемендәге театрҙан Сергей Яшин: "Ҡуям!" - тине. Тағы актер тапманылар. Мәскәү театрҙары буйлап күп йөрөнөм. Берене лә батырсылыҡ итмәне. Өфөлә Рус драма театрының художество етәксеһе Михаил Рабинович менән дә һөйләшеү булды. "Пьесаны беләм, әммә уны ҡуйырҙай көсөбөҙ юҡ", - тине ул.

Ниһайәт, Роман Виктюк театры тотондо. Гәҙәттә, театрҙар пьесаның оҙаҡ "уҡый". Баш режиссерҙың ҡулына еткәнсе бер-нисә ай үтеүе ихтимал. Был юлы улай булманы. Миңең пьеса тураһында ҡайҙандыр ишетеп, Виктюк үҙе шылтыратты. Оҙаҡҡа һуҙмай осрашыҡ. Мин уға пьесаның бер экземплярын бирҙем. Берәй ай үтер, тип уйлаһам, был таң менән шылтыратып, трубка аша ҡыскыра: "Азат! Бөйөк артист тураһында бөйөк пьсаны тик бөйөк Америка драматургы Уильямс Теннеси ғына яҙа ала! "Мин был шаярталыр тип уйлап: "Етер, шаштырма", - тим. "Юҡ, мин шаярмайым, әйҙә, осрашайыҡ", - ти был. "Ожмах баҡсаһы" пьесаһы менән эш шулай башланып китте. Акса яғынан да, башҡа яҡтан да ауырлыҡтар күп булды. Каршылыҡтарҙы йырып сыҡтыҡ. Пьеса Виктюк театрында өс йыл буйы уңышлы бара. Санкт-Петербург, Ижевск, Екатеринбург, Силәбе кеүек ҡалаларҙа гастролдәрҙә булып ҡайттылар.

**✱ Тағы ла ниндәй әҫәр өҫтөндә эшләйһегеҙ?**

✱ Эйе, мин яңы пьеса өҫтөндә эшләйем. Ҡыҫҡаса ғына әйткәндә, яңы әҫәремдә һуңғы егерме йылдағы тормошобоҙ тураһында һөйләнә. Тап ошо арауыҡ бөгөн күп бәхәстәр тыуҙыра. Ни өсөн Советтар Союзы тарҡалды? Кем ғәйепле? Горбачевмы, Ельцинмы, әллә башҡа сәбәпселәр бармы? Пьесала ошондай һорауҙарға яуап эҙләнә. Ул - шиғри-фәлсәфәүи драма. Драма тик фәлсәфәгә генә королһа, баҙыклана, Шиғриәт менән бергә үрелгәндә генә пьеса үҙ максатына ирешә. Миңең бөтә пьесаларым да шул принципка ҡоролған. Һис юғы, шулай яҙырға тырышам.

**✱ "Ун өсөнсө председател"дә лә был стиль һиҙелә ине бит.**

✱ Эйе, был пьесала ла фәлсәфә бар, әммә ул ярһылыҡ менән һуғарылған, тойғолар, эмоциялар ҡайнап тора. "Ожмах баҡсаһы" ла шулайыраҡ. Әлбиттә, был стиль яңы әҫәремдә лә сағылыш табасаҡ. Оҙаҡ шымып ҡалыуыма әйләнеп ҡайтҡанда, шуны ла әйтергә кәрәк: башҡорт телендә сыҡкан һайланма әҫәрҙәр китабын әҙерләү ҙә күп ваҡытты алды. Ике томлыҡ материал тупланһам да, Башҡортостандың "Китап" нәшриәтенән әлегә бер томын баҫтырыуҙы ғына һораным. Тәүге том да ҙур күләмле килеп сыҡты. "Китап" нәшриәтенә бик рәхмәтлемен.



**✱ Тәүге томға ниндәй әҫәрҙәрегеҙ инде?**

✱ "Ун өсөнсө председатель", "Һуңғы уҙаман", "Ожмах баҡсаһы", "Яңғыҙ" исемле пьесаларым һәм дурт повесым. Шулай уҡ публицистик мәҡәләләр, хаттар. Хаттарҙың шәхсән үҙемә ҡағылғандары түгел, ә Юғары суд рәйестәре, прокурорҙар менән "Ун өсөнсө председатель" пьесаһындағы Сәғәҙиевтың прототибы Снимчиков Иван Андреевичты яҡлап яҙғандары индерелде. Снимчиков өсөн көрәш 1953 йылдың августынан 1967 йылға тиклем 13 йыл буйына дауам итте. Һеҙемтәлә, Иван Снимчиковтан бөтә ғәйептәр ҙә алынды.

**✱ Азат Хаммат улы, "Ожмах баҡсаһы" ҡасан да булһа Өфөлә ҡурһәтеләсәкме?**

✱ Әлбиттә, был мөғжизәле ваҡиға булыр ине! Һуңғы 15-20 йыл эсендә Мәскәүҙә бер милли драматургтың да әҫәре ҡуйылғаны юҡ. "Ожмах баҡсаһы" 20 йыл эсендә тәүгә ҡуйылған спектакль. Шуға ҡурә яҡташтарыбыҙға ундай пьсаны кҮрһәтеү яҙыҡ булмаҫ ине. Ләкин саҡырылмаған ерҙә барып булмай бит, Виктюк театры улай өйрәнмәгән. Удмурттар, Силәбе, Свердловск өлкәләре саҡырҙы бит...

**✱ "Ун өсөнсө председатель" пьесағыҙ Венгрия, Болгария, Румыния, АКШ, Чехословакия, ФРГ кеүек сит илдәрҙә ҡурһәтелде. Ә ни өсөн "Ожмах баҡсаһы" әлеге көнгә тиклем сит илдәргә сыҡҡаны юҡ? Көнбайыш тамашасыһы өсөн Рудольф Нуриев шулай уҡ таныш. Мәҫәлән, Францияла ул оҙаҡ йылдар бейегән. Сәғәҙиевка ҡарағанда, Нуриев улар өсөн яҡынырак түгелме ни?**

✱ Мин һеҙгә ҡыуаныслы хәбәр еткермәксемен. Австралияның Мәскәүҙәге вәкиле "Ожмах баҡсаһы"н ҡараған дан һуң, уның тураһында Сиднейҙағы театрҙарға хәбәр иткән. Улар пьесаның инглиз теленә тәржемәһен һорағандар. Ләкин ул ваҡытта пьеса инглиз теленә тәржемә ителмәгәйне. Күптән түгел Мәскәүҙә сыҡкан бер китапта ул ике телдә - инглиз һәм рус телендә баҫылды.

**✱ Ә ни өсөн нәҡ Австралияла был пьеса менән ҡыҙыҡһынғандар?**

✱ Рудольф Нуриевтың әҫәрҙәге төп геройҙың прототибы икәнен белгәс, улар шундуҡ ҡыҙыҡһына башлағандар. Ваҡытында Нуриев Австралия балетын күтәреүгә лә ныҡ ярҙам иткән. Тиҙҙән "Ожмах баҡсаһы" сит илдәргә сығыр, тигән өмөтөм бар.

**Алик ШАКИРОВ әңгәмә ҡорҙо.**

## "ЙОНДОҘ" ПРОДЮСЕРЛЫК ҮҘӘГЕ ТӘҠДИМ ИТӘ






Күптән түгел "Йондоҙ" продюсерлык үҙәге 70 йырҙан торған "Осраштыра беҙҙе йырҙар" тип исемләнгән яңы караоке сығарҙы. Бында бөгөнгө эстрадала яңғыраған билдәле композиторҙар Р. Хәсәнов, Р. Тимербаев, Р. Хәкимов, Р. Арыҫлановтар иждаҡ иткән популяр йырҙар, үлемһеҙ халыҡ моңдары тупланған. Бына улар: "Бөрлөгән", "һин - ғүмер ағыштарым", "Күбәләк", "һағындым, ауылым", "Әйтмә һин ауыр һүҙ", "Үҙ яғыма ҡайтһам", "Яра", "Сафия", "һағыныу сере", "Бөрйән егеттәре", "Яратам", "Мәҙинәмбәгеркәйем", "Гөлнәзирә" һәм башҡалар. "Осраштыра беҙҙе йырҙар" караокеһын һатып алып, мәжлестәрҙә тән буйы йырларға мөмкин. Тормошоғоҙға йәм өҫтәгән бер моң йыйынтығы был караоке.

## АҠЫЛ – ҠАҘНА



**Уңыш ҡаҙанырға һәм бәхеткә өлгәшергә теләйһеңме? Өлгәш, әйҙә! Ә тапҡыр һүҙҙәр, ғибрәтле хәлдәр һәм риүәйәттәр быға булышлыҡ итер. Башыңа - уй, йөрәгеңә аҡыл итеп һеңдерергә тырыш уларҙы. һөйләүҙәренсә, бер саҡ фәлсәфәселәр батшаһы Сократ бер үҫмерҙе шаяртырға була һәм унан:"Ҡайҙа зәйтүн майы һатып алып була?"- тип һорай. "Баҙарҙа", - тип ышаныслы яуап биргән үҫмер. "Ә белемде ҡайҙа һатып алып була?"- тигән Сократ. Үҫмер ҡаушап ҡалған һәм:"Белмәйем", - тип яуаплаған. "Минең арттан әйәр!"- тип тәҡдим иткән аҡыл әйәһе. Шуның кеүек, аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# Донъяуи хәҡиҡәт был -

## ҡуллан һәм уңыш яула!

✑ Кешеләрҙе артыңдан әйәртеү өсөн улар артынан бар.

**(Лао-Цзы, ҡытай фәлсәфәсеһе).**

✑ Мин уңыш формулаһын бирә алмайым, ә бына уңышһыҙлыҡ формулаһын тәҡдим итәм: һәр кемгә ярарға тырышып ҡара.

**(Г. Своуп, журналист)**

✑ Етәкселек итеү - ул башҡаларҙы бар эштәрҙе лә эшләргә мәжбүр итеү сәнғәте.

**(Билдәһеҙ автор.)**

✑ Әгәр ҙә кешеләр үҙ-үҙҙәрен йышыраҡ ишетһә, аҙыраҡ һөйләргә тырышырҙар ине.

**(Билдәһеҙ автор).**

✑ ...Иң аҡыллыһы ошондай ауыл хужалығы алымы булыр: яҡшы климат булдырығыҙ, тейешле ашлама менән тәьмин итегеҙ һәм кешеләргә үҙҙәренсә үҫтерергә мөмкинлек бирегеҙ. Бына шул саҡта улар һеҙҙе аптыратасаҡ.

**(Макгрегор).**

✑ Ҡайһы берәүҙәр беренсе рәттә саҡта файҙаһыҙ, әммә икенсе рәттә ялтырайсаҡ.

**(Вольтер, 1694-1778 йй.).**

✑ Килешеп эшләгәндә әһәмиәтһеҙ генә эштәр ҙә күтәрелә, килешеү булмағанда бөйөк эштәр ҙә һәләк була.

**(Гай Крисп, б.э.т. 86-35 йй.).**

✑ Насар етәксе нимә эшләргә кәрәк икәнен белә. Ә яҡшыһы быны нисек эшләргә икәнен кҮрһәтә.

**(С. Орджоникидзе).**

✑ һәр хәкиәкәтте лә ҡыҫҡырып әйтеп булмай: берәүһен үҙең өсөн әйтмә, икенсеһен икенсе берәү хаҡына әндәшмә.

**(Бальтасар Грасиан).**

✑ Ҡаршы тора алғанға ғына таяныр ға.

**(Блез Паскаль).**

✑ һинең хаталарыңды эҙләгән дошманың ул хаталарҙы йәшерергә тырышҡан дуҫыңдан файҙалыраҡ.

**(Леонардо да Винчи).**

✑ Ҡулына балта йә гусли тотҡан кешене тәҙеүсе йә музыкант тип әйтеп буламы? Шуның кеүек, аҡыллы һүҙ һөйләгән кешене лә аҡыллы тип атарға ашыҡма.

**(Эпиктет).**

**Шулай итеп, риүәйәт:**

**Көнсығыш хакимына кемдер берәү үҙенең яҡынтирәһендәге ҡомһоҙ һәм тоғро булмаған хеҙмәткәрҙәрен власть менән боҙолмаған башҡа кешеләргә алыштырырға кәңәш биргән. Күпмелер уйлап торғандан һуң хаким былай тип яуаплаған:"Яңыраҡ мин баҙарға барҙым һәм себендәр һырып алған хәйерсене күрҙем. Мин, әлбиттә, уға ярҙам итергә теләнем һәм уның битендәге себендәрҙе ҡыуған булдым. Ә хәйерсе миңә былай тине:"Йә, әфәндем, был ҡылығың менән нәмәгә өлгәштең инде? Мине һырып алған себендәр минең ҡанымды һурып туйғайны һәм тынысланғайны. Хәҙер уларҙың урынын яңылары, астары биләйәсәк һәм миңә шундай ҡанығыу менән ябырыласаҡ, түҙеп кенә тор!".**

«Киске Өфө» гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡала округы Советы һәм хакимиәте
«Вечерняя Уфа» гәзите редакцияһы
Баш мөхәррире: Гөлфиә ЯНБАЕВА.
Мөхәррирәт: Вячеслав ГОЛОВ, Әхмәр ҮТӘБАЙ, Радик ӨМӨТКУЖИН, Рәлиә БИКТИМЕРОВА

Телефондар: 53-25-44; 52-39-99.
E-mail: kiskeufa@ufacom.ru
«Киске Өфө»нең индексы – 50665.

Гәзит РФ Матбуғат эштәре, телерадиотапшырыуҙар һәм киң информация саралары министрлығының Волга буйы төбәк-ара территориаль идаралығында теркәлде. Теркәү таныҡлығы №7 –1675.

«Киске Өфө»нең реклама хеҙмәте, 53-25-44, 72-89-09, 73-35-92 телефондары буйынса, «Вечерняя Уфа», «Уфимская неделя» һәм «Киске Өфө» гәзиттәренә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 53-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1.**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды,
(450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

Тиражы - 6121
Заказ 21